ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

13-19 ғинуар (һыуығай)

2018

№2 (784)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Башҡорттар, иң беренсе нәүбәттә, тәбиғәт балалары булараҡ, үҙҙәрендә кеше булмышының иң яҡшы һыҙаттарын сағылдыра: эскерһеҙлек, киң күңеллелек, ышаныусанлыҡ, ысын күңелдән ярҙам итергә әҙер тороу, яғымлылыҡ, ҡунаҡсыллыҡ. Был сифаттар уларҙың ҡырысҡлыҡтан, уҫаллыҡтан азат булған эскерһеҙ һәм хәйләһеҙ йөҙҙәрендә сағыла.*

***С.Г. Рыбаков.***

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**"Ҡыҙыл ҡар" ҡасан яуыр?**



3

**Һәр артистың, төркөмдөң...**

үҙ йөҙө булырға тейеш



8-9

**Әҙиптәр менән...**

уҡытыусылар осрашты



11

**Кешеләрҙең күңел ҡапҡаларын...**

асыр бер сара ул беҙҙең ойошма



12-13

**ТВ-программа** 14

КӨНҮҘӘК ӘҢГӘМӘ

# ИРЕК ЯЛАЛОВ: "ҺӘР КЕМ ӨСӨН АСЫҠБЫҘ"

**Йыл һуңында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов федераль, республика һәм ҡала киң мәғлүмәт сараларының баш мөхәррирҙәре менән осрашып, йыл дауамында иң көнүҙәк булған темалар буйынса фекер алышты һәм һорауҙарға яуап бирҙе. Гәзит уҡыусылар иғтибарына Ирек Ишмөхәмәт улының ҡайһы бер һорауҙарға яуаптарын тәҡдим итәбеҙ.**



**➔ Һуңғы йылдарҙа ҡала күҙгә күренеп үҙгәрә, матурлана, граждандарға уңайлы шарттар булдырыу йүнәлешендәге эшмәкәрлек маҡтауға лайыҡ. Әммә кеше һәр саҡ зарланырға һәм ғәйепләргә сәбәп таба. Юҡҡа ғына, әгәр кем өсөндөр ҡапыл насарға әүерелһәгеҙ, тимәк, уның өсөн бик күп яҡшылыҡ эшләгәнһегеҙ, тимәйҙәр. Һеҙҙе лә даими тәнҡит утында тоталар, тәнҡиткә нисек ҡарайһығыҙ?**

- Мин - ҡаланы үҫтереү маҡсатында ҡала Советы депутаттары эшкә алған юғары кимәлдәге менеджер. Үпкәләү йәки үпкәләмәү критерийҙарын уҙған быуаттың 80-се йылдарында, төрлө тикшереүҙәр, халыҡ контроле көслө булғанда, хаталарҙы теркәргә әҙер тороусы гәзиттәр сығарылғанда үттем. Ул ваҡытта, ысынлап та, тәнҡит көслө була торғайны. Хатта партия һәм дәүләт аппараты эсендә лә тәнҡит булды, мин тап ошо мәктәпте үттем дә инде.

Эшмәкәрлегем буйынса бик йыш ғәҙәти булмаған саралар күрергә мәжбүрмен һәм был ҡала халҡының ниндәйҙер бер өлөшө тарафынан ҡабул ителмәй. Әммә бындай ҡарарҙар булмаһа, ҡала үҫеше алға бармаясаҡ. Мәҫәлән, Татарстан менән бер үк ваҡытта Берҙәм иҫәп-касса үҙәге булдырҙыҡ. Унда барлыҡ идара итеү компанияларының мәғлүмәттәре туплана һәм хеҙмәтләндерелә ине. Бының өсөн башта енәйәти әҙәрлекләүҙәр ҙә булды, ләкин күпмелер ваҡыттан һуң Рәсәй кимәлендә был система ҡабул ителде һәм ҡулланыуға индерелде. Йәки Берҙәм капиталь ремонт фондын алайыҡ. Уны беҙ илдә беренселәрҙән булып 2007 йылда булдырҙыҡ. Бөгөн бөтөн ил буйынса төбәк операторҙары эшләй. Һәм башҡа бик күп яңылыҡтар. Бындай саралар тәүҙә хуплау һәм аңлау тапмаһа ла, йылдар үткәс, үҙенең һөҙөмтәлелеген раҫланы. Ҡайһы бер эштәр хатта Европаның айырым дәүләттәренең уҙған быуаттың 60-70-се йылдары тәжрибәһенән сығып эшләнде.

Ә ҡала халҡының һөйөүен яулайым тиһәм, минә бөгөн уларға оҡшаған, әммә бер нисә йылдан ҡаланы иҡтисади көрсөккә терәйәсәк эштәрҙе башҡарырға кәрәк. Ҡала - ул ер өҫтө генә, юлдар һәм парктар ғына түгел. Ер аҫты ҡалаһы һәләкәт торошонда. Шуға күрә һуңғы 5-6 йылда төҙөкләндереү менән бер рәттән, ер аҫты ҡалаһын үҫтереү - инженер инфраструктураһын ремонтлау һәм үҫтереүгә етди иғтибар бирҙек. Әлбиттә, был эш ябай халыҡҡа күренмәй, уға бөгөн подъезд, йорт ихатаһы таҙа, юлдар яҡшы булһын. Шуға күрә, минең эшемде депутаттар баһалаһын. Әйткәндәй, ошо вазифаға өсөнсө тапҡыр һайланыуым уларҙың баһаһы сағылышы түгелме ни?

**(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡортостан буйынса Ғаилә йылы башланып торғанда, ошо өлкәлә хәл итеүҙе көткән ниндәй мәсьәләләр бар, тип уйлайһығыҙ?

*Айгөл РӘХМӘТУЛЛИНА, йәш белгес:* Өс йыл элек университет тамамлап, баш ҡалабыҙҙа белемем буйынса эшкә урынлашыу бәхетенә эйә булдым. Район, ауыл еренә китә алмай инем: һөнәрем ҡалала эшләүҙе талап итә. Ғәмһеҙ студент йылдары шаулап үтте лә китте, хәҙер бер төрлө, эс бошорғос көндәр башланды. Һөнәрем оҡшай, әлбиттә, эш урынында тәүге тәьҫораттар шулай ҙа тоноҡлана төштө, сөнки эш барышына бер төрлөлөк хас. Унын ҡарауы, тыныс, әлбиттә, белгән, күнеккән ҡағыҙ һәм һандар эше инде. Иптәш ҡыҙым менән бер бүлмәле фатир яллап торабыҙ. Ул - уҡытыусы, эштән һуң ашап алабыҙ ҙа , ул тағы дәресенә тотона, дәфтәр тикшерә, ә мин интернет гиҙәм. Тыныс, бер кем ҡамасауламай, ләкин бына күңелем бер ҙә тыныс түгел. Ғүмеремде шулай бушҡа үткәрәм кеүек. Ял көндәре, исмаһам, йәштәр өсөн ниндәйҙер күңелле сараларҙа ҡатнашҡы килеп китә. Театр-филармония репертуарын ятлап бөтөлдө инде, унда ла, нигеҙҙә, йыл буйы бер үк нәмәләр. Кинотеатрҙарҙа гел Америка фильмдары, мин яратмаған мажара-фэнтэзи. Ҡыҫҡаһы, эс бошоуҙан ятып үл инде бына! Ауылға йыш ҡайтып булмай, алыҫ, тик шунда ла, ҡасан кейәүгә сығаһың, йәшең үтеп бара, тип йәнгә тейәләр. Өфө - ҙур ғына ҡала, йәштәр күп, улар ҙа шулай йәшәйме икән? Беҙҙең ысынбарлыҡ хәҙер виртуаль донъяға әйләнеп бара түгелме? Ҡурҡыныс булып китә. Баш ҡалабыҙҙа йәштәр өсөн, ә, бәлки, үҙебеҙҙең башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары өсөн генә булһа ла, ниңә ҡыҙыҡлы аралашыу, танышыу һәм бейеү кисәләре ойоштормаҫҡа? Шунда, бәлки, үҙ йәренде табып, ғаилә ҡороп, тормошонде ҡырҡа үҙгәртеп ебәрергә мөмкин булыр ине. Юғиһә, осраҡлы танышлыҡ көтөп, урам ҡыҙырып йөрөп булмай бит инде...

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

*✓ Бөтәһен дә бер ҡалыпҡа һалыуға йүнәлтелгән сәйәсәт алып барылған заманда башҡортлоҡто һаҡлау зарур. Ир-егеттәребеҙ башҡорт ҡыҙҙарына өйләнергә, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ башҡорт егетенә кейәүгә сығырға бурыслы.*



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЭШЛӘЙ АЛҒАНДЫ ЭШЛӘ!

***Таһир ИШКИНИН, журналист:*** Шәхсән мине һәм бөтә башҡорт милләтен борсоған проблемалар сәйәси һәм иҡтисади шарттарға бәйле, йәғни башҡорт халҡының милләт булараҡ был өлкәләргә инеп китә алыуы мөһим бөгөн. Иҡтисади шарттар йәһәтендә беҙ баҙар шарттарына, капиталистик ил шарттарына яуап бирергә, күнегергә тейешбеҙ. Быны өсөн тәү сиратта байҙарҙан, хөкүмәттән ниндәйҙер ярҙам өмөт итеп ултырыу ғәҙәтен онотоп, һәр кем үҙенә, ғаиләмде туйҙырырлыҡ, балаларымдың өҫтөн бөтәйтерлек аҡсаны үҙем эшләй алам, тигән маҡсат ҡуйырға тейеш. Бөтәһен дә бер ҡалыпҡа һалыуға йүнәлтелгән сәйәсәт алып барылған заманда тәү сиратта башҡортлоҡто һаҡлау зарур. Быны өсөн һәр милләттәштең ҡулынан килгәнде эшләүе мөһим. Беренсенән, ир-егеттәребеҙ башҡорт ҡыҙҙарына өйләнергә, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ башҡорт егетенә кейәүгә сығырға бурыслы. Ғаиләлә балалар һәм ейәндәр туған телдә һөйләшергә тейеш. Быны өсөн балалар баҡсаһында, мәктәптә лә башҡорт телен, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен, тарихын өйрәнергә шарттар булдырыуҙы хәстәрләү, талап итеү кәрәк. Әлбиттә, башҡортса китаптар, гәзит-журналдар алдырыу ҙа милләт булараҡ һаҡланып ҡалырға ярҙам иткән бер фактор. Сөнки улар милләттең бер сағылышы, һәр бер өйҙә булырға тейешле нәмәләр. Бына ошо "тейеш"тәрҙе һәр бер башҡорт теүәл үтәһә, беҙ киләсәктә милләт булараҡ һаҡланып ҡалыуға өлгәшәсәкбеҙ.

Күптәр аңлап етмәһә лә, бөгөн беҙ милләттең киләсәген хәл иткән ваҡытта йәшәйбеҙ. Был "бөгөн" тигән осор бер йыл ғына түгел, ике-өс йылға һуҙылырға мөмкин, ошо арауыҡ эсендә тотош бер халыҡтың яҙмышы хәл ителәсәк. Шуға, алда һаналған мотлаҡ үтәлергә тейеш шарттар бәләкәй, мөһим булмаған эш һымаҡ тойолһа ла, берҙәм эшләгәндә милләттәштәрҙең бер-береһен ҡайғыртыуы, һәр береһенең дөйөм халыҡ мәнфәғәттәрен хәстәрләүе күренәсәк. Ә беҙҙең халыҡ берҙәм, үтеп киткән йылда быны һынарлыҡ ваҡиғалар байтаҡ булды. Ләкин беҙгә һәр ваҡыт үҙебеҙҙе бөтөү алдында торған һымаҡ хис итеп йәшәргә кәрәк, һил тормошҡа өйрәнергә ярамай. Ғөмүмән, кеше үҙен көрәштә, алышта гел алғы сафтарҙа барғандай итеп тойорға тейеш. Был милли интеллигенцияның, яҙыусыларҙың, сәйәсмәндәрҙең генә эше түгел, бөтә яуаплылыҡты улар иңенә һалып, мин ябай бер кеше, тип уйлап, ҡул ҡаушырып торорға ярамай. Һәр кем үҙ урынында, дөйөм милләт мәнфәғәтендә, халыҡтың киләсәген ҡайғыртып, алдынғы сафтарҙа, ҡулынан килгәнсе эштәр атҡарып йәшәһен!

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Башҡортостан буйынса Ғаилә йылы башланып торғанда, ошо өлкәлә хәл итеүҙе көткән ниндәй мәсьәләләр бар, тип уйлайһығыҙ?



**(Башы 1-се биттә).**

***Сәлиә МЫРҘАБАЕВА, медицина фәндәре докторы, профессор, V, VI саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаты, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған табибы:*** Ил күләмендә лә, республикабыҙҙа ла һуңғы йылдарҙа ғаилә мәсьәләһенә иғтибар арта төштө. Был аңлашыла ла, сөнки демография торошо йылдан-йыл киҫкенләшә. Ил Президенты В. Путиндың демография өлкәһендәге һуңғы осорҙағы ҡарарҙары шуға күрә лә күптән көтөлгән мәсьәләләргә ҡағылышлы айырыуса мөһим саралар ҙы үҙ эсенә алыуы менән әһәмиәтле. Яңы йыл башынан уҡ үҙ көсөнә ингән был саралар тыуым кимәлен бермә-бер арттырыуға булышлыҡ итер, тип күҙҙә тотола. Ғәмәлдәге Әсәлек капиталы мөҙҙәтен оҙайтыу ҙа күп балалы ғаиләләр һанын арттырасаҡ, әлбиттә. Икенсе яҡтан, уны ипотека кредитын ҡаплауға йүнәлтеү мөмкинлеге ғаиләләргә торлаҡлы булыуға ла ярҙам итер. Беҙҙең республика, ғөмүмән, тыуым күрһәткестәре буйынса илдә алдынғы урында килә торған булһа, һуңғы йылдарҙа был йәһәттән артта ҡалыу күҙәтелә. Ғаиләләргә һәм лайыҡлы балалыҡ хаҡына күрелгән дәүләт ярҙамы программаларының һәр береһе ҡиммәт һәм кәрәкле икәнен инҡар итмәйенсә, шуны әйткем килә: демография көрсөгөнән сығыу өсөн барыбер илгә иҡтисади тотороҡлолоҡҡа өлгәшеү кәрәк. Иҡтисад өлкәһендә тамырынан үҙгәрештәр булмай икән, әлеге бөтөн яҡшы, изге ниәттәребеҙҙе ғәмәлгә ашырыуҙа ла тотороҡлолоҡ булмаясаҡ. Ә бит ғаиләләргә ярҙам мәсьәләһен дәүләтебеҙҙең әҙмәәҙлекле, даими сәйәсәте һөҙөмтәһе булараҡ танығы килә. Дөрөҫөн әйткәндә, Рәсәйҙә иҡтисад реформаһын тормошҡа ашырыу бөтөн булған социаль мәсьәләләрҙе, шул иҫәптән, ғаилә, балалыҡ проблемаларын үҙенән-үҙе хәл итәсәк, сөнки ул ваҡытта ғаилә башлыҡтары балалар пособиеһына күҙ терәп, эшһеҙ ултырмаясаҡ. Эш урындары булып, лайыҡлы хеҙмәт хаҡы алғандарға торлаҡ мәсьәләһен үҙаллы хәл итеү ҙә еңелләшәсәк.

Демография өлкәһендә һуңғы ваҡыт өйләнешеү, ғаиләле булыу ниәттәрен һуңыраҡҡа ҡалдырыу тенденцияһы күҙәтелә. Элегерәк 20-23 йәштәрҙә ғаилә ҡора торған булһалар, һуңғы йылдарҙа никахҡа инеүселәрҙең уртаса йәше 27-28 самаһында тирбәлә. Был да уйландыра торған факт һәм ул бер ҙә генә демография файҙаһына түгел, сөнки йәш үтә килә ҡатын-ҡыҙҙың да, ир-егеттең дә репродуктив (йәғни бала табыу) һәләте кәмей бара. Ә бит улар был йәштә, тәбиғи ҡанун буйынса, кәмендә ике балалы булырға тейеш. Ғаилә хәленә ҡағылышлы тағы бер көнүҙәк мәсьәлә, тәүҙәрәк әйтеп китеүемсә, ул - торлаҡ проблемаһы. Уны хәл итеүҙең бер юлы - күп балалы ғаиләләргә бушлай ер участкаһы бүлеүҙе тотҡарлыҡһыҙ тормошҡа ашырыу. Әйткәндәй, был статьяны ҡараған саҡта, күп балалы ғаиләнең ошоға тиклем торлағы бармы, юҡмы икәнлеге хәл иткес шарт булып торорға тейеш түгел, минеңсә.

***Фәнүр БАЙЫШЕВ, хеҙмәт ветераны, Аҡбирҙе ҡасабаһы:*** Был өлкәлә проблема күп инде ул. Башҡортостан Башлығы Р. Хәмитов әйтмешләй, ғаилә мәсьәләһенә ҡағылышы булмаған кеше юҡтыр ҙа ул."Демографик хәлде яҡшыртыуҙың бер генә юлы бар - балалар тыуыуы",- тигәйне Ғаилә йылына ҡағылышлы республика Башлығы. Бик дөрөҫ һүҙҙәр. Күп итеп аҡыллы, тәрбиәле балалар тыуҙырып үҫтереү өсөн шулай ҙа тәрбиәле, аҡыллы атай менән әсәй кәрәк. Шуға күрә мин ғаиләләрҙәге мораль климат тигән мәсьәлә хаҡында һүҙ йөрөткөм килә. Мине бигерәк тә айырылышыуҙарҙың иҫ киткес масштаб алыуы борсой. Һуңғы ике йылдың статистика мәғлүмәттәренән күренеүенсә, республикабыҙҙа һәр 100 никахҡа 2016 йылда- 61, 2017 йылда (былтырғы 9 ай мәғлүмәттәре алынды) 51 айырылышыу осрағы тап килә. Тимәк, шартлы рәүештә әйткәндә, һәр никахтың икенсеһе тарҡалыуға дусар, тигән һүҙ! Әлбиттә, мин был хәлдең сәбәптәрен тикшереүгә дәғүә итмәйем, быныһы ла белгестәр, социологтар, психологтар һәм башҡаларҙың эше, ләкин әлеге һандарға тап булып, "күҙ йомоп" ҡала алмайым. Өлкән кеше, бына тигән балалар үҫтергән ғаилә башлығы булараҡ, йәштәргә кәңәштәремде булһа ла еткерәйем, исмаһам. Алһалар... Юғиһә, хәҙер бит йәш быуын үҙбелдекләнергә генә тора, әйтерҙәр унан, аҡыл өйрәтмә әле, тип. Әйтһәләр, әйтерҙәр инде, өлкән быуын өйрәтмәһә уларға, компьютер өйрәтерме? Минеңсә, ғаилә ҡорорға ниәт иткәндәргә был аҙымды ныҡлы уйлап хәл итеү, быныӊ үҙең өсөн генә түгел, икенсе яртың - хәләлең, шулай уҡ буласаҡ балаларың өсөн оло яуаплылыҡ алыуынды төптән аңлау етмәй. Шулай булмаһа, тәүге ҡашығаяҡ шылтырағандан уҡ эш айырылышыуға барып етмәҫ ине. Сабырлыҡ тигән сифат кәрәк. Берең ҡыҙғанда, икенсең өндәшмәйерәк тор, тип өйрәтә ине беҙҙе өлкәндәр. Бер-береңде аңлай белеү, үҙ-ара ихтирам булһа, теләһә ниндәй ауырлыҡтарҙы ла еңеп сығырға була. Бергәләп, ғаилә йөгөн бер үк йүнәлештә тартып, әлбиттә. Икең ике яҡҡа ҡарай башлаһаң - бөттө, тимәк. Тормош ҡороу - уйын түгел, ҡыҙыҡ өсөн дә баҫмайҙар ул аҙымға, ә ғүмер юлында бергә атларға, бер-береңә терәк булырға, нәҫелеңде, рухыңды, асылыңды дауам итәсәк һәм, ниһайәт, мал-мөлкәтеңә варис буласаҡ быуын тәрбиәләп үҫтереү - бына бит маҡсат нимәлә. Йәштәргә ғаилә тәрбиәһе күндереү - Ғаилә йылының ғына түгел, ғөмүмән, тормошобоҙҙағы иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе ул. Ошо маҡсатта, бәлки, мәктәптәрҙә ғаилә дәрестәре кеүегерәк тәрбиә саралары үткәреү урынлы булыр ине, тип уйлайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓1 ғинуарҙан страховка пенсияһы, шул иҫәптән эшләмәгән пенсионерҙарға билдәләнгән түләү 3,7 процентҡа арта. Индексациялауҙан һуң билдәләнгән түләүҙең күләме айына - 4 982,9 һум, пенсия балының хаҡы 81,49 һум була (2017 йылда - 78,58 һум). Һөҙөмтәлә ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһының уртаса күләме 13 423 һум тәшкил итергә тейеш, тип хәбәр иттеләр Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтенән.

✓Башҡортостан халҡы һалым инспекторҙары менән аралашыу мөмкинлегенән әүҙем файҙаланды. Былтырғы йылдың һуңғы ике айында республиканың 12 ҡалаһындағы ҙур сауҙа үҙәктәрендә һәм күп функциялы үҙәк офистарында ойошторолған һалым хеҙмәтенең күсмә офистарына 23 меңдән ашыу кеше килгән. Ошо күсмә нөктәләрҙә 13,5 меңдән ашыу һалым түләүсе 46,5 миллион һумлыҡ суммаға мөлкәт һалымдарын түләү өсөн белдереү ҡағыҙын алған. 15 миллион һумдан ашыу суммаға бурыстарҙы түләүгә 7 936 квитанция тултырылған.

✓Башҡортостанда ике таможня посы 2017 йылғы эш йомғаҡтары буйынса Волга буйы федераль округында иң яҡшылар тип танылды. Өфө аэропорты "Һауала пассажирҙар ташыу буйынса иң яҡшы пункт" номинацияһында беренсе урын яулап, еңеүсе булды. Белорет таможня посы "Штат иҫәбе 10 берәмектән кәм эске таможня посы" номинацияһында өсөнсө урын алды.

✓Өфөлә Ырымбур трассаһында "Спутник" биҫтәһе янында йәйәүлеләр үткәүеле асылды. Йәйәүлеләр күперенең оҙонлоғо - 48 метр, ул лифттар менән йыһазландырылған, өҫтө поликарбонат менән ябылған. Трассаның ике яғында ла "Өфө-Аэропорт" автомобиль юлында туҡталыштарҙың берҙәм концепцияһына ярашлы туҡталыш павильондары ҡуйылған.

✓Рәсәй ауыл хужалығын күҙәтеү идаралығы илгә Швейцариянан хайуандар һәм ҡош-ҡорт индереүҙе тыйҙы. Ньюкасл ауырыуы арҡаһында тереләй ҡош-ҡорт, йомортҡа, ҡош ите һәм йылы эшкәртеү үтмәгән бөтә ҡошсолоҡ продукцияһын индереү рөхсәт ителмәй. Шулай уҡ ҡош-ҡорт өсөн мал аҙығы һәм ҡатышмалар индерергә ярамай. Блутанг (зәңгәр тел) ауырыуы сәбәпле, Рәсәй Федерацияһына эре һәм ваҡ мөгөҙлө мал, һарыҡ, дөйә, ҡырағай һәм цирк хайуандарын индереү тыйыла.

✓ 78 Советтар Союзы Геройы тәрбиәләгән командирҙың түшендә былай ҙа 78 Советтар Союзы Геройы алтын миҙалы, 5 Дан ордены балҡый түгелме ни? Командирҙың түшендә урындар ҙа ҡалмаған бит!



КИЛЕШМӘЙЕМ!

# "ҠЫҘЫЛ ҠАР" ҠАСАН ЯУЫР?



**"Ҡар ҡасан ағарыр ?"- тип һораны бер бала. "Ҡыҙыл ҡар яуғас... - булды атаһының яуабы. - Әйттем бит һиңә, күп итеп ап-аҡ ҡына ҡар яуғас, килербеҙ, әле шыуып булмай, тип..." Биш йәштәрҙәге малай, сана һөйрәп, атаһы менән Сипайлово биҫтәһенең Ҡариҙел дамбаһынан атлай ине...**

Был балаларҙың яратҡан һырғалаҡ шыуыу урыны. Ҡыш еттеме - бала-саға дамбаның текә һарҡыуынан сыр-сыу килеп сана шыуа, ҡарҙа аунап, Ҡар бабай әүәләп, мәж килә. Улар ғына түгел, ял көндәре өлкәндәр ҙә саңғыларын тағып, ошонда ашыға. Дистанция бына тигән: бер ҡайҙа боролмай, хәлең бөткәнсе дамбаның икенсе осона табан еләһең дә еләһең. Ҡыҫҡаһы, бик елле спорт һәм һауыҡтырыу урыны был.

Тукта, мауығып, теге баланы оноттом түгелме? Ап-аҡ ҡар урынына юл ситендәге тупраҡҡа болғанып ятҡан "ҡара" ҡарҙы күреп, шулай һорағайны бит ул. Байҡаһам, һырғалаҡ битләүендәге йоҡа ғына ҡар ҡатламы ла тотошлай ҡором менән ҡапланғайны! Тупраҡ ҡына түгел был, бармаҡҡа һылашып торған майлы һөрөм. Элегерәк ундай уҡ хәлдә күргән юҡ ине. Дамба трассаһында транспорт хәрәкәтенең бермә-бер әүҙемләшеүен йортомдоң етенсе ҡатындағы фатир тәҙрәләренән дә күҙәткеләйем. Быныһы аҡты ҡаралаусы төп сәбәп булһа, ҡары ла яумай оҙаҡ көттөрҙө шул. Ниһайәт, сабыйҙы аптыратҡан ошо ғибрәтте ап-аҡ ҡар ҡаплап китте ошо көндәрҙә генә. Бына ҡыуаныс! Тик ап-аҡ ҡар сафлығы оҙаҡ һөйөндөрөрмө? Хәйер, баланы ғына түгел, баш ҡалаға ауылдан килгән өлкәндәрҙе лә аптыратырлыҡ беҙҙәге "ҡара" ҡар. Ә сәбәбе ҡар яумауҙа ғына түгел шул. Оҙағыраҡ яумай торһа, үҙәк урамдарҙы ла тиҙ генә һөрөм ҡаплап ала. Эштән ҡайтышлай, ҡала буйлап йәйәү атлауҙы туктатырға кәрәк, тигән ҡатғи ҡарарға киләм шул саҡ: ошо һөрөм ҡатламы беҙҙең тын юлдарына, үпкәгә лә ултыра бит!

Үткән йыл аҙаҡтарында халыҡара шау-шыу тыуҙырған "рутений тарихы", республиканы солғап алған смог ваҡиғаһы халыҡты етди хәүефҡә һалғайны. МАГАТЭ халыҡ-ара ассоциация үткәргән экспертиза Көньяҡ Урал төбәгенең, аныҡлабыраҡ әйткәндә, Силәбеләге "Маяҡ" заводының бер нindәй ҙә рутений сығанағы булып тормауын асыҡланы, ләкин был хәлдең сәбәптәре барыбер аҙағынаса билдәһеҙ ҡалды. Тикшеренеүҙәр, бәлки, дауам итәләр, ләкин быныһы икенсе мәсьәлә. Ә бына туҙан смогының бер нисә сәбәбе бар, тигән фекерҙә Башҡортостан экологтар берлеге рәйесе Александр Веселов: "Был проблеманың иһә сығанағы билдәле: автотранспорт атмосфераға 200-гә яҡын төр зарарлы матдәләр бүлеп сығара. Баш ҡаланың ҡалҡыу ерҙәрендә уны ел таратһа, Сипайлово йәки Инорс кеүек түбәнерәк райондарҙа смог ергә ултыра..."

Бына шулай "яуа" беҙҙә ҡара ҡар. Былтыр ноябрь аҙаҡтарында Өфөлә дәүләт экология сәйәсәте мәсьәләләре буйынса фәнни-ғәмәли конференция булып үткәйне. Шунда билдәләнеүенсә, Өфө дөйөм республика территорияһында ни бары 0,5 процент урын алып тороуына ҡарамаҫтан, бүленеп сыҡҡан бөтөн зарарлы матдәләрҙең өстән бер өлөшө баш ҡалабыҙға тура килә. Ҡала эсендә һулаған һауабыҙҙың формальдегид, азот диоксиды, углерод оксиды, туҙан менән бысраныу индексы бик юғары.

Ошо уҡ конференцияла әйтеп кителеүенсә, беҙҙә атмосфераны бысратыусы төп сығанаҡтарҙың береһе - автотранспорт. Бөгөнгө көнгә Өфөлә ярты миллионға яҡын (!), йәғни 493 мең ерәмек автомобиль теркәлгән. Һуңғы 13 йыл эсендә генә лә уларҙың һаны ике тапҡырға артҡан. Ә инде йыл аҙағына автопарктың тағы ла кәмендә 15-16 мең берәмеккә артыуы көтөлә. Шуныһын да әйтеп китеү кәрәктер: 2015 йылда ғына ла бысраҡ һауа әҙәмтәһендә Рәсәйҙә 180 мең кеше үлгән, астма һәм аллергиянан яфаланыусылар һаны ла арта ғына бара.

Әйткәндәй, экология буйынса закон нигеҙҙәрен ҡайтанан ҡарау, уға үҙгәрештәр индереү хаҡында һүҙ бара, ләкин, үкенескә күрә, унда автомобиль хужаларының тирә-яҡ мөхитте бысратыуы өсөн ниндәйҙер яуаплылыҡ саралары күреү хаҡында - ләм-мим. Исмаһам, ҡала эсендә йөрөгәндәрен булһа ла газ менән заправкалауға күсереү хаҡында мәсьәлә ҡуҙғатылһын ине лә бит. Дөрөҫ, был хаҡта ҡыйыуһыҙ ғына һүҙ башланып та алғайны бер осор, үкенескә, был тәкдимгә ҡатғилек тә, ҡыйыулыҡ та етмәне, һәм ул йәнә онотолдо. Газ менән заправкалау станциялары ла бер нисә урында ғына әле, тимәк, был юҫыҡта эш фронты - муйындан. Икенсе яҡтан да автоһәүәҫкәрҙәргә был файҙаға ғына булыр ине, сөнки бензинға хаҡтар көнләп түгел, сәғәтләп юғары үрмәләй бит. Мотор яғыулығы сифатында тәбиғи газ ҡулланыусы машиналарға транспорт һалымы түләүҙә 50 процент ташлама барлығын да онотмағыҙ, йәмәғәт!

Экология йылы үтеп тә китте, ләкин проблемалар, һәр ваҡыттағыса, нисек бар - шулай ҡалды. Улар ҡасан хәл ителер? Ҡыҙыл ҡар яуғасмы?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



## КҮҘӘТЕҮҘӘР

***22-се күҙәтеүем.*** Ҡыҙым менән "Пышка" магазины-сәйханаһына инеп сыҡтыҡ. Унда эшләүсе мөләйем йөҙлө башҡорт ҡыҙы беҙҙе үҙ телебеҙҙә сәләмләп ҡаршыланы. Уның үҙен тотошона ҡарағанда ҡалала тыуып үҫкәнлеге ярылып ята. Ултырып сәй эстек. Һылыу башҡа клиенттар менән дөйөм аралашыу телендә һүҙ алып барһа ла, беҙгә үҙ телебеҙҙә өндәште. Ҡыҙым менән уның аралашыуынан шуны аңланым: ҡалала телебеҙ ҡәҙимгә аралашыу нормаһы булып нығынған икән. Сөнки уларҙа туған телдә һөйләшеүҙән оялыу комплексы бөтөнләй юҡ. Беҙ иһә ҡалала үҙебеҙҙең телдә аралашҡан кешене күрһәк, иң тәүҙә уның ҡайһы яҡтан, ауылын, туғандарын һораша башлайбыҙ. Башҡорт булғас, мотлаҡ, ҡайҙандыр ауылдан булырға тейеш тип уйлап янылышабыҙ...

***23-сө күҙәтеүем.*** 1 май байрамында 3 көн билһеҙ яттым. Яттым тигәс тә, бил ауыртҡанда ятып та, ултырып та, баҫып тороп та, илап та, көлөп тә, йәшәп тә, үлеп тә булмай икән. Был ауырыуҙан дарыу (панацея) юҡ. Сублимация (күсереү) ысулы ла ярҙам итмәне. Малай саҡта әҙәм белмәҫ ауырыу - теш һыҙлау менән яфаланғанда беҙҙең ауылға Сыңғыҙҙан күсеп килеп йәшәүсе Шахморатов Абдрахман олатай: "Улым, бер стакан һыуға яртышар балғалаҡ тоҙ, борос, аджика һалып болғатып эсһәң, бөтә ул", - тигәс, шулай иткәйнем.Теш һыҙлауым юҡҡа сыҡты, уның ҡарауы, эсемдә янғын сыҡҡандай булды. Баҡтиһәң, ауыртҡан бер ерендәге һыҙланыуҙы ошо рәүешле икенсе еренә күсереп була икән. Тик бына бил ауыртыуын ғына күсереп булманы.

***24-се күҙәтеүем.*** Фрейд йөҙ, мең тапҡыр хаҡ. Яҙ етеүгә, болон-ҡырҙар, ҡала аллеялары күҙҙең яуын алырлыҡ төрлө төҫтәге сәскәләргә күмелә. Сәскәләрҙең ни өсөн шулай матур булыуын бер мәл Әмир Ишемғолов туғаныбыҙ аңлатҡайны. Уларҙы елдәр, бал ҡорттары, инкештәр, күбәләктәр, башҡа бөжәктәр һеркәләндерә. Үҫемлектәр: "Миңә ҡун, бына мин бит иң матуры, минән дә матурыраҡты, минән дә гүзәлерәкте тапмаҫһың", - тип, бөжәктәргә йән атып, барлыҡ йәмдәрен һибеп, ихлас йылмайып, ҡуйындарын асып ултыра икән дә. Сәскәләр үҙенең тоҡомон ишәйтеү теләгенән күҙҙең яуын алырлыҡ, тап шул теләктән ата ҡоштар инә ҡоштарҙы сағырып, йәнде өҙҙөрөп һайрай. Барыһы ла артырға, ишәйергә, бының өсөн матур булып күренергә теләй.

***25-се күҙәтеүем.*** Йыл һайын 9 май байрамын оло мөгжизәләй көтөп алабыҙ. Мин, мәҫәлән, тап ошо көндә тарихи fәҙелһеҙлек юҡҡа сығыр, данлыҡлы 112-се Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһы командиры Миңлегәлә Шайморатовҡа Герой исеме бирелер тип өмөтләнәм. Өмөтөм быйыл да аҡланманы, уның ҡарауы, әллә ни ҡайғырманым: сөнки 78 Советтар Союзы Геройы тәрбиәләгән командирҙың түшендә былай ҙа 78 Советтар Союзы Геройы алтын миҙалы, 5 Дан ордены балҡый түгелме ни? Атлы дивизияның 3860 яугиры төрлө миҙал, ордендар менән наградланған. Командирҙың түшендә урындар ҙа ҡалмаған бит!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Федерация Советы әсәлек капиталы программаһын 2021 йылдың 31 декабренә тиклем оҙайтҡан законды хупланы. Документ әсәлек капиталын мәктәпкәсә белем биреү сиктәрендә мәғариф программаларына түләүгә йүнәлтеүҙе, ипотека өсөн тәүге иғәнә булараҡ файҙаланыуҙы йәки уның менән торлаҡ буйынса башҡа кредиттарҙы ҡаплауҙы күҙ уңында тота. Быны балаға өс йәш тулғансы эшләргә мөмкин.

✓Президент Владимир Путин минималь хеҙмәт хаҡын йәшәү минимумына этаплап арттырған федераль законға ҡул ҡуйҙы. 1 ғинуарҙан минималь хеҙмәт хаҡы күләме айына 9489 һум кимәлендә билдәләнә. Законға ярашлы, 2018 йылдың 1 ғинуарынан минималь хеҙмәт хаҡы йәшәү минимумы дәүмәленән 85 процент тәшкил итәсәк. 2019 йылда минималь хеҙмәт хаҡы һәм йәшәү минимумы күләме тигеҙләнергә тейеш.

✓Яңы йылдан Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында яңы депутат. Вакантлы урын КПРФ партияһынан Юнир Ҡотлоғужинға тапшырылды. Был турала ҡарар Үҙәк һайлау комиссияһы ултырышында ҡабул ителде. Закондар сығарыу йыйылышында иң оло депутаттан мандат КПРФ партияһының республика бүлексәһе тәкдим иткән исемлек буйынса килһе кандидатҡа күсте.

✓Салауат Йөнтүрин Рәсәй Юстиция министрлығының Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы начальнигы итеп тәғәйенләнде. Салауат Дияс улы 2009 йылдың июленән Рәсәй Юстиция министрлығының Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы начальнигы урынбаҫары булып эшләне. Рәсәй Федерацияһының 3 класлы дәүләт юстиция советнигы.

✓Рәсәй водителдәре өсөн бер нисә яңылыҡ. 2018 йылдың 1 ғинуарынан ҡараңғылатҡыс өсөн штрафтар үҙгәрә. Яза суммаһы өс тапҡырға арта. Шулай уҡ автоһәүәҫкәрҙәргә "тыныс хәрәкәт зонаһы" тип аталған яңы билдәләргә аптырарға кәрәкмәй. Улар ихаталарҙа, сәғәтенә 10-20 саҡрымғаса тиҙлек сикләнгән биләмәләрҙә ҡуйыласаҡ. Йәйәүлеләр бындай урындарҙа үҙҙәренә унайлы ерҙән юл аша сыға ала. Штраф түләргә яратыусыларға уйланыу зарур. 2018 йылда суд приставтары штрафтар суммаһы 10 мең һумдан артҡан водителдәрҙең өйөнә барыу хоҡуғына эйә. Улар водитель таныҡлығынан мәхрүм итә ала.

**"Башинформ"дан.**

✓ Ә бына телдәрҙе өйрәнеүгә килгәндә - туған тел уҡытыусылары зыян күрергә тейеш түгел, әгәр уларҙың уҡытыу сәғәттәре кәмей икән, уларға икенсе өҫтәмә дәрес бирелә.



ҠЫҪҠАСА

## ҺАЙЛАУҘАР ҺӘМ...

✓ **Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев әйтеүенсә, Рәсәй Президентын һайлауҙа Башҡортостанда тауыштарҙы иҫәпләү өсөн заманса ҡоралдар ҡулланыу күҙаллана.** Республиканың 181 һайлау участкаһында һайлау бюллетендәрен эшкәртеү комплекстары (КОИБ-2010), Башҡортостандың баш ҡалаһында иһә камиллаштырылған комплекстар (КОИБ-2017) ҡуйыла. Тәүге тапҡыр федераль һайлауҙарҙа машина уҡый алған код менән протоколдар файҙаланыла. Башҡортостан биләмәһендә һайлауҙарҙы 69 территориаль һайлау участкаһы тәьмин итә, тауыш биреү өсөн 3435 һайлау участкаһы ойошторола. Халыҡтың ваҡытлыса килеү урындарында 37 участка ҡаралған.

✓ **Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы йылдың ауыл хужалығы һәм эшкәртеү өлкәһендәге мөһим инвестиция проекттарын атаны.** Тармаҡҡа бөтәһе 2,8 миллиард һум самаһы инвестиция һалынған. 2017 йылда "Өфө һөт заводы" - 33 миллион, "1-се Дәүләкән икмәк ризыҡтары комбинаты" - 175 миллион, "Рус игене" һәм "Турбаҫлы бройлеры" компаниялары - 285 миллион, "Алексеевка" совхозы" 455 миллион һум аҡса һалды. "Элеватор" компанияһы (Силәбеләге "Сигма" холдингы составына инә, Шишмә районындағы һәм Күмертауҙағы май экстракцияһы заводтарына идара итә) Маячный ҡасабаһында яңы производствоға 634 миллион һум инвестицияланы. Сусҡа ите етештергән "Башҡортостан ит компанияһы" 1,2 миллиард һум күләмендә инвестиция һалды.

✓ **Төбәк Социаль страховка фонды мәғлүмәттәре буйынса, 2017 йылдың ун айында Башҡортостанда бала табыу сертификатын алған әсәләрҙең 389 игеҙ һәм 3 өс игеҙ сабыйы тыуған.** Республикала бөтәһе 38 803 сабый донъяға килгән. Ҡыҙҙар, ғәҙәттәгесә, әҙерәк, улар 18 638, ә малайҙар 20 165, тип иҫәпләнәләр Башҡортостан буйынса Социаль страховка фондында. Фондтың матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, һуңғы йылдарҙа төп тенденция - ғаиләлә икенсе бала тыуыуының артыуы. Былтырғы йылдың билдәләнгән осоронда республикала 15 800 бала ғаиләлә икенсе булып тыуған. 6209 бала - өсөнсө, 2121 - дүртенсе. 2017 йылдың 11 айында төбәк Фонды медицина ойошмаларына "Бала табыу сертификаты" программаһы сиктәрендә 458 миллион һумдан ашыу аҡса күсергән.

✓ **Республиканың ЗАГС органдары мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда былтырғы йылдың туғыҙ айында 22 313 пар мөнәсәбәтен теркәгән, 11 539 ғаилә тарҡалған.** Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетында никахлашырға теләгән 93 йәшлек ир менән 78 йәшлек ҡатындың быйыл иң өлкән ғаилә булыуы хаҡында һөйләнеләр. Шулай уҡ ведомствола айырылышҡан иң өлкән ирле-ҡатынды атанылар. Ир кешегә - 91, ҡатынға - 82 йәш. Ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар 25-34 йәштәрҙә әүҙем ғаилә ҡора. Шулай уҡ айырылышыу осраҡтары ла күбеһенсә ошо йәш осорона тура килә.

КӨНҮҘӘК ӘҢГӘМӘ

# ИРЕК ЯЛАЛОВ: "ҺӘР КЕМ ӨСӨН АСЫҠБЫҘ"



➔ **Өфө - "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын теүәл үтәүсе, йәғни географик объекттар һәм юл күрһәткестәре, алтаҡталарҙың икенсе дәүләт телендә яҙылыуы 100 процентҡа үтәлгән ҡалаларҙың береһе. Уҡыу йылы башында башҡорт телен уҡытыу буйынса килеп тыуған сетерекле мәсьәләне лә үҙегеҙсә хәл итергә тырыштығыҙ...**

- Тәүҙә эшҡыуарҙарға ни өсөн ике дәүләт телендә яҙылған алтаҡталар булырға тейешлеген аңлатыу ауырыраҡ булһа, улар был эште өҫтәмә ҡатмарлылыҡ кеүек ҡабул итһә, хәҙер аңлашыуға өлгәштек, тиергә мөмкин. Былдай талап бер кемдең дә хоҡуҡын боҙмай. Был мәсьәләне сәйәсиләштермәҫ һәм уға артыҡ иғтибар йүнәлтмәҫ инем. Ә бына телдәрҙе өйрәнеүгә килгәндә - был, ысынлап та, бик ҡатмарлы мәсьәлә. Беҙ уны хәл итеүҙе саҡ ҡына икенсе юҫыҡта башланыҡ: ҡала халҡының теге йәки был өлөшө мәсьәләне нисек ҡабул итә тип ҡараманыҡ, ә эшләп йөрөгән, үҙ бурысын профессионал кимәлдә башҡарған педагогтарҙы яҡланыҡ. Бында беҙҙе ишеттеләр һәм республика, федераль кимәлдә лә хупланылар. Туған тел уҡытыусылары зыян күрергә тейеш түгел, әгәр уларҙың уҡытыу сәғәттәре кәмей икән, уларға икенсе өҫтәмә дәрес бирелә. Ҡағыҙҙа булараҡ, барлыҡ педагогтар - ситтән килгән кешеләр. Кемдер ипотекаға фатир һатып алған, кемдер ҡуртымға алған фатирҙа йәшәй. Күптәренең ике-өс балаһы бар. Эш юғалтыу улар өсөн ысын мәғәнәһендә фажиғә. Шуға күрә мәсьәләне ғәмәли яғынан ҡарап хәл итергә тырыштыҡ.

➔ **Башҡортостан Республикаһы Финанстар министрлығы менән ҡала округы хакимиәте ниндәй мөнәсәбәттә, сөнки төрлө һүҙҙәр ишетелә...**

- Бюджет формалаштырғанда юғары профессионаллек талап ителә. Был йәһәттән иң юғары компетенциялы кешеләр республиканың Финанстар министрлығында һәм Өфө ҡалаһының Финанс идаралығында эшләй, тиер инем, сөнки бюджет - бик ҡатмарлы өлкә. Уның нисек булыуына һәм балансына миллионлы ҡаланың йәшәйеше бәйләнгән. Иң мөһиме - беҙҙе республиканың Финанстар министрлығында ишеттеләр һәм тәҡдимдәребеҙҙе ҡабул итә башланылар. Мәҫәлән, ҡышҡы осор ҡаланы ҡарау һәм таҙартыу. Быйыл өсөн 2018 йылға өҫтәмә рәүештә федерацияға һәм республикаға ҡараған территорияларҙы хеҙмәтләндереү өсөн 176 миллион һум һалына. Шундай хәлде күҙ алдына килтерегеҙ: һеҙ шәхси йортта йәшәйһегеҙ һәм һеҙгә күршегеҙҙең ихатаһын бушлай таҙартыуҙы йөкмәтәләр. Мин ошо вазифала эшләгән осорҙа ғына беҙҙең ҡарамаҡта булмаған объекттар өсөн беҙ күпме аҡса юғалттыҡ! Быйыл өсөн 176 миллионды алтыға ҡабатлағыҙ. Ә быны бераүҙең дә ишеткеһе килмәй, ишетергә лә теләмәйҙәр. Әлеге ваҡытта федераль кимәлдә өсөнсө уҡыуҙа ошо турала закон ҡарала, ул ҡабул ителһә, Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәренә һәм ҡалаларына ҡағыҙҙар тәшөрөләсәк, уның нигеҙендә беҙ төбәктең ҡалаларҙы тәҙоҡлондереүҙә үҙ ҡағиҙәләребеҙҙе булдырыу хоҡуғын биргән вәкәләткә эйә буласаҡбыҙ. 2004 йылда ҡала буйынса бөтөн нәмә билдәле ине, һуңынан прокуратура вәкәләттәребеҙҙе киҫте һәм бөгөн беҙ, закон буйынса, бер нәмә лә эшләй, хатта ҡала урмандарында ла тәртип урынлаштыра алмайбыҙ. Айыҡ аҡылға һыймаған былдай ҡапма-ҡаршылыҡтар бик күп. РФ Дәүләт Думаһына һайлауҙар үткәндән һуң ҡыуанысымдың сиге булманы, сөнки парламентҡа беренсе тапҡыр 51 муниципалитет етәксеһе - профессионал үтте. Улар - етди көс һәм беҙ улар аша эшләйбеҙ. Ил кимәлендә беҙҙең тауышты ишеттеләр, РФ Президенты ҡарамағында Урындағы үҙидаралыҡ буйынса совет ойошторолдо. Ул 16 ағзанан тора, яртыһы - федералдар, ҡалғаны - муниципалитет етәкселәре. Мин унда президиум ағзаһы. Феде-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2018 йылда Башҡортостанда 15 яңы тәбиғи биләмә ойоштороласаҡ, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Экология министрлығынан. Был дала һәм урмандала зоналары: Әбйәлил, Ауырғазы, Бишбүләк, Бөрө, Илеш, Ишембай, Кушнаренко, Миәкә, Учалы райондарындағы һаҙлыҡтар. Дөйөм алғанда республикала 41 районда 182 тәбиғәт ҡомарткыһы иҫәпләнә. Уларҙың дөйөм майҙаны 42 мең 264,7 гектар.

✓Эш аҙнаһы башында уҡ Башҡортостан гидрометеорология үҙәге синоптиктары республикаға һыуыҡтар яҡынлашыуы хаҡында хәбәр иткәйне. Иҫке Яңы йылға ҡаты һыуыҡтар көтөлә. Башҡортостан гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхитте күҙәтеү буйынса идаралыҡ мәғлүмәттәре буйынса, шәмбе, 13 ғинуарҙа, көндөҙ яуым-төшөмһеҙ, һауа температураһының төндә -28 булыуы, урыны менән -34 градусҡа етеүе ихтимал. Көндөҙ бер аҙ йылыта: 18-23 градус һалҡын.

✓Башҡортостанда йәшәүсе оло йәштәгеләр пассажирҙар транспорты һәм енел такси хеҙмәттәре буйынса "Роспотребнадзор" идаралығының Өфөләге төбәк йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһендә кәңәш алырға мөмкин. Адресы: Өфө ҡалаһы, Р. Зорге урамы, 58, 104-се бүлмә һәм "ҡыҙыу линия" телефоны: 8-800-100-47-67. Шулай уҡ теләүселәр Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 25 адресы буйынса урынлашҡан Гигиена һәм эпидемиология үҙәгенең Ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса консультация үҙәгенә мөрәжәғәт итә һәм 8 (347) 287-85-18 телефонына шылтырата ала.

✓Башҡортостан командаһы "ТЭФИ-Төбәк-2017" Бөтә Рәсәй телевизион конкурсының "Идеялар питчинги" номинацияһында еңеү яуланы. "Донъя идеялары" телевизион туристик шоу проектын "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы журналистары отто. Авторҙары - "Тамыр" телеканалы режиссеры, "Телешко" балалар телевидениеһы мәктәбе директоры Рөстәм Аҙнабаев һәм уның йәш коллегалары Руслан Фаршатов, Илья Гордеев, Владимир Саргсян.

✓Өфөнөң Калинин районындағы 157-се мәктәптә "Йәш ҡотҡарыусы" программаһы буйынса белем алған тәүге кадет класының ант биреү тантанаһы үтте. Дәрәжәле ҡунаҡтар ҡатнашлығындағы сарала 25 егет һәм ҡыҙ ант һүҙҙәрен әйтте, һуңынан яңы кадет подразделениеһына байраҡ тапшырыу тантанаһы үтте, һәр кадет погоны булды. Быға оҡшаш профилле класс 116-сы мәктәп һәм 96-сы лицейҙа ла асылғайны.

**✓ Бөгөн Өфөлә 200 миллиард һумдан ашыу һалым йыйыла, һалым булмаған йыйымдар менән бергә дөйөм сумма 240 миллиард һум тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта ҡаланың былтырғы бюджет күләме барығыҙға ла мәғлүм.**



раль кимәлдә норматив-хоҡуҡи акттарҙы үткәреүгә күп ваҡыт китә. Әммә муниципалитеттарға хужалыҡ итеүҙән башлап хоҡуҡи аспекттарға тиклем күберәк вәкәләттәр бирмәй тороп, Рәсәйҙә бер нәмә лә эшләү мөмкин түгел.

**➔ Өфөлә йәмәғәт транспорты хәрәкәтен ойоштороу һәм үҫтереү буйынса ҡатмарлыҡтар бар икәнен беләбеҙ. Шул уҡ ваҡытта менәрләгән маршрут автобусы өҫтөнлөк итә. Баш ҡалала ҡасан транспорт хәрәкәтендә тәртип булыр икән?**

- Республикала йыл һайын йәмәғәт транспортына субсидиялар, субвенциялар рәүешендә ярты миллиард һум аҡса бүленә. 2000 йылдарҙа был сумма электр транспортына (Стәрлетамаҡ, Салауат, Өфө) һәм республиканың ҙур операторы булған "Башавтотранс"ҡа тигеҙ бирелһә, 2010 йылдан башлап бөтөн аҡсаны "Башавтотранс" ҡына ала. Шулай итеп, баш ҡаланың муниципаль электр транспорты элек алған аҡсанан мәхрүм ҡалды. Күҙ алдына килтерегеҙ: ҡала 30 мең самаһы кешене - федераль һәм республика льготаһына эйә граждандарҙы бушҡа йөрөтә. Улар өсөн федераль һәм республика бюджетынан аҡса күсергә тейеш, ләкин ул аҡса юҡ. Бер йылы РФ Финанстар министрлығы менән судлашып, аҡса алғайныҡ, әле барлыҡ судтарҙан дәғүәләрҙе кире алырға ҡушылды.

Әгәр ошо мәсьәләне глобаль ҡуҙаллағанда, уны хәл итергә мөмкин. Мин был фекергә илдең һәм яҡындағы сит илдәрҙең эре ҡалалары эше менән танышҡандан һуң килдем. Мәҫәлән, Минск менән Ҡаҙан бер-береһенә оҡшаш һәм бер юлдан китеп, бер генә супер-ташыусы булдырған. Минскиҙа уға пассажирҙар ташыуҙың 97 проценты тура килә. Был ойошмаға трамвай ҙа, троллейбус та, метробус та, хатта әлегә тиклем метро менән автобус та ингән. Бөтөн был эштәрҙе Минск-Транс дәүләт компанияһы башҡара. Халҡы ике миллион самаһы булған ҡаланы ни бары 400 автобус хеҙмәтләндерә. Ҡаҙанда ла ла бынан 7-8 йыл элек хәлдәр беҙҙәге кеүек ине. Унда республика етәкселеге бер ташыусы ҡалдырырға ҡарар итә һәм метроны, трамвай, троллейбус, автобусты бер ойошмаға берләштерә. Рөхсәтһеҙ спектр иҡтисади һәм административ ысулдар ярҙамында ҡыҫырыҡлана. Беҙ йыл һайын "Башавтотранс"тың Өфөнө хеҙмәтләндергән өлөшө һәм МУЭТ-ты берләштереү тәҡдиме менән сығабыҙ. Ул республика ҡарамағында буламы, муниципаль кимәлдәме, әллә акционер йәмғиәтеме - мөһим түгел. Бында берҙәм ташыусы ойошма булдырыу һәм уға пассажирҙар ташыуҙы ойоштороуҙың барлыҡ функцияларын тапшырыу мөһимерәк.

Ә Өфөлә хәл-торош нисек? Быға тиклем ҡалала пассажирҙар ташыу менән 56 компания шөғөлләнде. Бөгөн уларҙың һаны 15-кә ҡалды, йәғни эрелетеү бара. Тағы 10 йылдан 3-4 компания ғына ҡаласаҡ. Әммә беҙ ун йыл көтә алмайбыҙ, шуға күрә хәҙер ҡеүәтле компания төҙөргә тәҡдим итәбеҙ. Әле МУЭТ менән "Башавтотранс" икеһе бергә пассажирҙарҙың ни бары 15 процентын ғына ташый. Бынан ун йыл элек был нисбәт 50 процент ине. Бынан өс йыл элек беҙҙән муниципаль-ара маршруттарға конкурс үткәреү хоҡуғын тартып алдылар, ҡала буйынса ла бары тик конкурс ҡына үткәрәбеҙ, ә контролләү функцияһына эйә түгелбеҙ. Шайтан ғына өмөтһеҙ, тигәндәй, республика властары менән берлектә 5-6 йыл эсендә ҡеүәтле йәмәғәт транспорты системаһын һәм ҡеүәтле транспорт компанияһын булдырырбыҙ, тигән өмөттәмен.

**➔ Үҙегеҙ эшләгән осорҙа ниндәй йүнәлештәргә өҫтөнлөк бирҙегеҙ?**

- Уҙған алты йылда ер аҫтындағы ҡала иғтибар үҙәгендә булды. ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерләндек, граждандарға йәшәү һәм ял итеү өсөн уңайлы мөхит булдырырға тырыштыҡ. Шул уҡ ваҡытта көтөлмәгән сығымдарға дусар булдыҡ. Элек предприятиелар ҡарамағында булған РТИ, Синтезспирт, Химиктар мәҙәниәт һарайҙары, Пионерҙар йорто ҡала балансына күсте. Бер мәҙәниәт һарайын тотоу ҡала бюджетына 20-30 миллион һумға барып баҫа, етмәһә, Дим районындағы "Орион" клубынан алып, ауылдарҙағы 10 клуб беҙҙең ҡарамаҡҡа күсте. Биналарҙың бер-нисәһен республика әһәмиәтендәге объекттар итеп алырға, мәҫәлән, Балалар филармонияһы, Республика Балалар һарайы һ.б. тәҡдим иттек, әммә улар бер кемгә лә кәрәкмәй.

Һуңғы тиҫтә йылда ҡаланан сығыу юлдары эшләнде һәм улар икенсе муниципалитеттар территорияһынан үтә. Мәҫәлән, Өфө - Аэропорт юлының 60 проценты Өфө районына ҡарай ла, был юлды тотоу ҡалаға йылына 80 миллион һумға барып баҫа. Миҫал өсөн Мәскәүҙе алғанда, ҡала территорияһынан сығыу менән юлдар йә өлкә, йә автодор ҡарамағында. Был йәһәттән республика Хөкүмәте менән һөйләшеүҙәр алып барабыҙ һәм юлдар федераль өлөшкә һәм Башкиравтодор ҡарамағына күсерелер, тип ышанабыҙ. Ул саҡта иғтибарҙы икенсе өҫтөнлөклө мәсьәләләрҙе хәл итеүгә бүлергә мөмкин буласаҡ.

Мәҫәлән, ҡала хакимиәтенең "Парктағы ҡала" концепцияһы буйынса аныҡ күҙаллауы бар. Хәҙер Черниковкала - Нефтехимиктар паркында, Машина эшләүселәр мәҙәниәт һарайы артындағы паркта, Инорста эш алып барасаҡбыҙ. Шулай уҡ "Аҡбуҙат" ипподромынан "Президент-отелгә" тиклем (Менделеев, Кувыкин, Аврора урамдары буйлап) тулыһынса рекрацион зона буласаҡ. Сығымдарҙың яртыһын - бюджет, ҡалғанын инвесторҙар иҫәбенә ҡаплау планлаштырыла.

**➔ Бөгөн баш ҡалала 800 мәҙәни мираҫ объекты бар. Уларға ниндәй ҡараш дөрөҫ тип һанайһығыҙ?**

- Иң дөрөҫ вариант - реставрация үткәреү. Әммә уның нимә икәнен һәм хаҡын беләһегеҙ. Мәҫәлән, Цурюпа урамындағы Сыуаш йәкшәмбе мәктәбенең квадрат метрын реставрациялау 154 мең һумға барып баҫты. Унда шәхси инвестор эшләне. Бинаны емереп, яңынан төҙөү күпкә арзанraҡ. Америка миҫалын ҡараһаҡ, улар бер көн, бер быуын һәм Америка хыялы менән генә йәшәй. Уларға мәҙәни мираҫ кәрәкмәй. Мәҙәни һәйкәлдәргә иң һаҡсыл мөнәсәбәт, моғайын, Европалалыр. Унда һәр нәмәне һаҡларға тырышалар. Әммә уларҙа объекттар ныҡлы нигеҙҙә ултыра һәм тағы ла мең йыл ултырасаҡ. Ә беҙҙә фундаменттар төртһән, ҡойолорға тора. Шуға күрә беҙ объекттарҙың күсермәләрен тергеҙергә тырышабыҙ, сөнки йорттарҙың үҙҙәрен һаҡлап ҡалыу мөмкин түгел, улар нигеҙ кеүек үк түбән сифатлы итеп һалынған. Шул күҙлектән ҡарағанда, һәр объектты айырым баһалап, ул йә реставрацияланасаҡ, йә реконструкцияланасаҡ, йә күсермәһе эшләнәсәк.

**➔ Айырым кешеләр эшләгән арт-объекттарҙың, бәләкәй архитектура формаларының Өфө урамдарында, парктарында, скверҙарында урынлаштырылыуы аңлашылмай. Өйрәнсектәрҙең эшен һөнәрселәрҙекенә алмаштырып булмаймы?**

- Мин коллегаларыма Якутов паркында һәм ҡала территорияһында ҡуйылған пластик фигураларҙың авторы кем икәнен сер итеп һаҡларға ҡуштым. Уның кем икәнен белеү мөһим түгел. Иң мөһиме - кеше эшләне һәм маҡсатына өлгәште - йәмәғәт инициативаларын ҡуҙғытты. Әгәр яҡшыраҡ эшләргә теләйһегеҙ икән, рәхим итегеҙ, эшләгеҙ ҙә, ул һындарҙы алыштырығыҙ. Тәжрибәмдән сығып әйтәм, икенсе арт-объекттар художестволылыҡ йәһәтенән яҡшыраҡ буласаҡ. Сөнки барыһы ла нимәнән башланды? Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре үҙ инициативалары менән шундай фигуралар эшләне лә ултыртты. Ә шул уҡ ваҡытта ҡалала бай 10 мең компания иҫәпләнә. Уларҙың береһе ҡала өсөн берәй нәмә эшләнеме? Эшләгәндәре лә бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

Һәйкәлдәр хаҡында шуны ла әйтер инем: Енеү паркындағы ике генералдың бюсы, Тыл хеҙмәткәрҙәренә һәйкәл, Мостай Кәрим һәйкәле юғары кимәлдә башҡарылһа ла, уларҙы ла тәнҡитләүселәр табыла. Йәки бына Матросов паркындағы Арыҫлан Мөбәрәков һәйкәленең урынлашыуы оҡшаймы? Ә бит ул йәмәғәтселек фекеренә таянып урынлаштырылды. Миненсә, Протазановтың фильмында Салауат Юлаев ролен башҡарған бөйөк артист һәйкәле туристик маршруттың бер туҡталышы булырға тейеш ине. Әле уның ҡайҙалығын күптәр белмәй ҙә, күрмәй ҙә...

**➔ 2017 йылда сығымдар буйынса ҡала бюджеты 25,5 млрд һум тәшкил итте, шул иҫәптән 6,5 млрд һум республика бюджетынан субсидия рәүешендә бирелде. Ә ҡала бер ниндәй көрсөкһеҙ, нормаль йәшәһен өсөн күпме аҡса кәрәк?**

- Ҡала бюджеты төбәк хакимиәте билдәләгән нормативтар нигеҙендә формалаштырыла. Был тотош Рәсәй өсөн ҡабул ителгән дөйөм система. Ҡала етәксеһенең бурысы нимәнән ғибәрәт: ҡайны бер нормативтарҙы ҡайтанан ҡарауға өлгәшеү. Әлеге ваҡытта беҙ 2018 йылға физик шәхестәрҙең килеменә һалымға ике процент өҫтәтеүгә өлгәштек, йәғни НДФЛ-дан йыйылған һалым өлөшөнән былтырғыға ҡарағанда ике процентҡа күберәк сумма ҡала бюджетында ҡаласаҡ. Был яҡынса 500-600 миллион һум. Ә инде бюджет ниндәй булырға тейеш, тигән һорауға килгәндә, мин шул мәсьәләне өйрәнеү буйынса Ҡытай Халыҡ Республикаһына барып ҡайттым. Әгәр ҡытайҙар кеүек үҫешергә теләйбеҙ икән, әйҙәгеҙ, ундағы моделде ҡулланайыҡ. Улар килемде өҫтән бер өлөш буйынса бүлә. Мәҫәлән, федераль бюджетҡа - 1/3, төбәк бюджетына - 1/3, ҡала бюджетына - 1/3 өлөш. Бөгөн Өфөлә 200 миллиард һумдан ашыу һалым йыйыла, һалым булмаған йыйымдар менән бергә дөйөм сумма 240 миллиард һум тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта ҡаланың былтырғы бюджет күләме барығыҙға ла мәғлүм.

Йәки майҙаны һәм халыҡ һаны буйынса бер иш, хатта 100 мең кешегә кәмерәк булған Астананы - Ҡаҙағстан Республикаһының баш ҡалаһын алайыҡ. Уның бюджеты 100 млрд һум, шул уҡ ваҡытта глобаль кимәлдәге инфраструктура проекттарының күпселеге ил бюджетынан туранан-тура финанслана. Бында мине дөрөҫ аңлауығыҙҙы һорайым - был баш ҡаланың йәки Өфө менән Республика Хөкүмәтенең мөнәсәбәттәре проблемаһы түгел, ә Рәсәй Федерацияһында ҡабул ителгән һәм ҡулланылған норматив һөҙөмтәһе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, бер әңгәмәлә генә барлыҡ һорауҙарға яуап табырға һәм борсоған мәсьәләләргә асыҡлыҡ индерергә мөмкин түгел. Шулай ҙа күптәр үҙҙәре өсөн кәрәкле мәғлүмәт алғандыр, моғайын. Ә инде осрашыуҙа ҡатнашҡан киң мәғлүмәт саралары баш мөхәррирҙәре белдереүенсә, бөгөн Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов журналистар өсөн иң асыҡ етәкселәрҙең береһе.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тонзиллит

❖ Эрен тығынын һәм миндалина шешеүен тамаҡты йыш сайҡатыу бөтөрә. 4-5 юл япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә, 1-2 балғалаҡ бал өҫтәргә һәм тамаҡты сайҡатырға. Процедураны сәғәт һайын ҡабатларға.

❖ 10 грамм эвкалипт япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 5-10 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр ашағандан һуң ярты стакан эсергә.

❖ Тамаҡ сайҡатыу өсөн 1-2 эвкалипт япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға.

❖ 5 һарымһаҡ тешен ныҡ итеп иҙергә, 2-3 ҡалаҡ шалфей үләне өҫтәп, 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға. 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм 30-40 минут һайын тамаҡты сайҡатырға.

❖ Тамаҡ ныҡ ауыртҡанда 1 стакан йылы һыуға ярты балғалаҡ аш содаһы, бер семтем тоҙ, 1 тамсы йод өҫтәп, көнөнә 5 тапҡыр тамаҡты сайҡатырға.

❖ Шешеүҙе бөтөрөү өсөн иртән миндалиналарға алоэ һуты (1 ҡалаҡ) һәм бал (3 ҡалаҡ) һөртөргә була.

❖ Йыш ҡына тонзиллит йөрәккә бирә. Йөрәк мускулын нығытыу өсөн 1 ҡалаҡ энәлек сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡасын ябып 2 сәғәт талғын утта быҡтырырға, тик ҡайнатмаҫҡа. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашар алдынан 3-әр ҡалаҡ эсергә.

### Үҙәк көйгәндә

❖ Ашҡаҙандың әселеге юғары булыу һөҙөмтәһендә үҙәк көйһә, даими рәүештә бөтнөклө (мята) сәй эсегеҙ.

❖ 1 өлөш әнис орлоғо, 2-шәр өлөш бөтнөк, меңъяпраҡ, һары мәтрүшкә үләнен ҡушып, уны сәй итеп эсергә.

❖ Ашҡаҙандың әселеге түбән булһа, 1 өлөш ҡомалаҡ тубырсыҡтары, 2-шәр өлөш бөтнөк, аҡ сәскә үләне, әнис орлоғо, ирәүән тамыры (валериана лекарственная) алып, иртәнсәк 1 балғалаҡ ошо ҡатнашманы 1 стакан ҡайнар һыуҙа 15 минут төнәтеп, һөҙөп, эсергә. Бөтөн төнәтмәләрҙе лә 2-3 ай буйы эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Аҡҡоштар, мәҫәлән, айырылышыуҙы ауыр кисерә, ҡайғыра. Айыу, арыҫлан үҙ балаларын хәстәрләй. Филдәр, балаларын кемдер урлаһа, улар артынан ҡоллоҡҡа барырға әҙер.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Өхөд һуғышы

Мөхәммәт бәйғәмбәр иллеләгән уксыны арттан һаҡлау өсөн ҡалдыра.

- Ошо урындан бер ҡайҙа ла ҡуҙғалмағыҙ. Беҙгә ярҙам итергә лә ашыҡмағыҙ. Һеҙҙең бурысығыҙ - ҡөрәйештәрҙең һыбай ғәскәренә уҡ яуҙырыу. Һыбайлылар уктарға ҡаршы тауға үрмәләргә баҙнат итмәйәсәк, - ти ул.

Ҡөрәйештәр ҙә үҙ сафын теҙә. Ҡатын-ҡыҙҙар барабан һуғып, йыр йырлай. Уң флангыла Хәлит ибн Вәлит, һулда Иҡрама ибн Әбүжәһил килә. Һуғыш ҡөрәйештәрҙең һөжүменән башлана. Мосолмандар бирешмәй, бирешмәү генә түгел, урта тирәнән үҙҙәренә ҡарағанда өс тапкыр артыҡ булған ҡөрәйештәрҙе ҡыҫырыҡлай башлай. Тегеләр сигенә, ҡайһы берҙәре ҡаса. Тау башында ултырған уксылар һуғыш тамамланды тип уйлап, тауҙан йүгереп төшәләр ҙә, ҡөрәйештәр ташлап ҡасҡан әйберҙәрҙе йыя башлайҙар.

Бының менән Хәлит ибн Вәлит оҫта файҙалана. Тәүге һөжүмдең уңышһыҙлығынан һуң һуғыш яланында тарҡалып өлгөргән һыбайлыларын йыя ла, тау аша үтеп, унда ултырып ҡалған бер нисә генә уксыны үлтереп, мосолмандарға арттан һөжүм итә. Быны күргәс, ҡасып барған ҡөрәйештәр ҙә кире борола. Мосолмандар ҡамауҙа ҡала һәм тау яғына сигенә башлай. Ошо ваҡыт кемдер:

- Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ һәләк булды! - тип ҡысҡырып ебәрә. Быны ишетеү менән мосолмандарҙың байтаҡ өлөшө ҡаса башлай. Ләкин шунда уҡ Мөхәммәт бәйғәмбәр түгел, ә байраҡ тотоп торған уға бик оҡшаған Мосаб исемле кешенең үлеүе асыҡлана.

Ҡасып барыусы мосолмандарҙың бер өлөшө шунда уҡ кире борола. Был ваҡыт ансарҙарҙың ҙур булмаған төркөмө, үҙҙәрен аямайынса, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе яҡлап, дошман һөжүмен кире ҡағып тора. Аяныслы һуғыш була был. Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе лә дошмандарҙың береһен һөңгө менән үтә сәнсә, ләкин уны ҡолата бәрәләр. Был яуҙа Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең яңағы яралана, бите ҡанай, алғы теше һына, аяҡ быуыны сыға. Ошо аянысты мәлдә мосолмандар килеп етә лә, ярһыулы һөжүм менән ҡөрәйештәрҙе сигенергә мәжбүр итеп, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе күтәреп алып, тау башына менеп китәләр. Ҡөрәйештәргә был тауҙы алыу ауыр булырын барыһы ла белә. Мосолмандар ял итеп алалар ҙа, артабан һуғышырға әҙерләнәләр.

Тик ҡөрәйештәр һөжүм итмәй. Мосолмандарҙы тауҙан төшөрөү өсөн улар яралыларҙы үлтерә һәм үлеләрҙең кәүҙәләрен зәғифләй, төрлөсә мыҫҡыллай башлай. Уларҙың хәйләһен аңлаған мосолмандар, был вәхшилекте күҙәтеү нисек кенә ауыр булмаһын, тауҙан төшмәй.

Ҡөрәйештәр хәрби кәңәшмә ҡора. Тауға һөжүм итә алмай улар, сөнки ҡалала ҡалған яугирҙарҙың арттан килеп һөжүм итеү хәүефе ҙур була. Арттарында мосолман ғәскәрен ҡалдырып, ҡалаға һөжүм итеү ҙә улар яғынан ахмаҡлыҡ булыр ине. Ғәскәрҙе икегә бүлергә ҡөрәйештәрҙең кешеләре етмәй. Шуға ла улар кире ҡайтып китергә хәл итә.

Мөхәммәт бәйғәмбәр төндә Мәҙинәгә ҡайта, шунда уҡ барыһына ла ҡоралланып, ҡөрәйештәрҙе ҡыуа төшөргә ҡуша. Мосолмандар ҡөрәйештәрҙе ҡыуып етә алмай. Мөхәммәт бәйғәмбәр икенсе тапҡыр һуғышыуҙы маҡсат итеп ҡуймай ҙа, сөнки ҡөрәйештәрҙе ҡыуа төшөп тә ҡыуып етә алмау ғәскәрҙең рухын бик ныҡ күтәрә - ҡөрәйештәр Мәҙинә ғәскәренән арттарына әйләнеп тә ҡарамайынса ҡасҡан кеүек килеп сыға. Был хәбәр тиҙ арала башҡа ырыуҙарға ла тарала.

**(Дауамы бар).**

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

# ДӨРӨҪ ҠОРА БЕЛҺӘҢ...

## камиллыҡҡа өлгәшерһең



**Эске донъяһы камил булмағандар күңел тыныслығы тапмай**

Ғаилә бәхетле булһын өсөн ҡатын менән ирҙең билдәле бер әхлаҡи кимәлгә етеүе кәрәк. Ғаилә бәхете көнсөл, үсексән кешеләргә килмәй бит. "Һине уратып алған донъя - ул һин үҙең. Бер үҙең булған саҡта ни тиклем һиңә уңайлы, рәхәт - шул тиклем һиңә башҡалар менән дә рәхәт буласаҡ." Тимәк, үҙеңдең холҡоңдо камиллаштырыу - ғаилә бәхетенә тура юл.

**Күңелле бурыстар һәм аралашыу таҙалығы**

Ғаилә - ул ваҡытлыса булған ауыр һынау түгел. Тиҙерәк ғаиләнән ҡотолоу сараһын эҙләгәндәр ҡалай бәхетһеҙ. Тормошта уңыш ҡаҙаныр өсөн ғаиләлә йәшәүҙең бер нисә ҡанунын белергә кәрәк. Улар араһында - үҙеңдең бурыстарыңды аныҡ ҡына белеү, бойомға ашырыу тигәне бар. Иң мөһим ҡанун - ир менән ҡатындың бер-береһенә тоғролоғо. Ышаныу, ихласлыҡ - шул тоғролоҡтоң йөгонтоһо. Хыянат итеү вирусы ғаилә мөнәсәбәттәре өсөн ҡурҡыныс. "Гонаһлы мөхәббәт" (ғаиләнән тыш) - ул бысраҡлыҡ. Уға "ялған аҡса"ға ҡараған кеүек ҡарарға кәрәк. Сөнки ул "ғаилә кредитын юҡҡа сығара", "никах ихтыяжын юҡ итә". Ә ғаилә иһә дәүләт өсөн ныҡ ҡиммәтле нәмә.

**Балаларҙы хәстәрләү, йәки ни өсөн динозаврҙар юҡҡа сыҡҡан?**

Динозаврҙар, ҙур йыртҡыс хайуандар, 100 миллион йыл элек Ер йөҙөндә йәшәгән, тиҙәр. Ни өсөндөр шунда уҡ юҡҡа сыҡҡандар. Быны аңлатыу гипотезалары араһында шундайы ла бар: динозаврҙар йомортҡаларын ҡомға күмгәндәр ҙә, буласаҡ балалары тураһында онотҡандар. "Бәләкәйерәк һәм аҡыллыраҡ булған йән эйәһе ошо йомортҡаларҙы табып, улар менән туҡлана башлаған һәм, шулай итеп, динозаврҙар төр булараҡ юғала барған", тигән фараз йәшәй. Әгәр ысынлап та шулай икән, был динозаврҙарҙың шул тиклем көслө, ҙур булып та, балалары хаҡында уйламауын, альтруист булмауын, тимәк, төрҙө һаҡлап ҡалырға тырышмауын күрһәтә. Ә кеше үҙенең буласаҡ быуындарын хәстәрләмәнә, альтруизм күрһәтмәһә, кешелеккә ни булыр?

**Аң һәм әхлаҡ**

Мәҙәни яҡтан үҫешкән, юғары белемгә эйә булған ғаилә ағзалары берберенең яҡшыраҡ аңларға тейеш, тигән фекер йөрөй. Ләкин тәжрибә күрһәтеүенсә, гел генә улай булмай, сөнки аңдың үҫешеүе әхлаҡи яҡтан үҫешеү менән бер түгел. Уға ҡарамаҫтан, аңдың булыуы изгелеккә ихтыяж тыуҙыра. Мәҫәлән, иң ябай микроорганизмдарҙың интеллекты юҡ. Ә хайуандарҙың, ҡоштарҙың аңы әҙ генә булһа ла үҫешкән, тимәк, уларҙа хистойғолар бар. Аҡҡоштар, мәҫәлән, айырылышыуҙы ауыр кисерә, ҡайғыра. Айыу, арыҫлан үҙ балаларын хәстәрләй. Филдәр, балаларын кемдер урлаһа, улар артынан ҡоллоҡҡа барырға әҙер.

Кешелә аң менән әхлаҡ бер тигеҙ үҫешергә тейеш. Мейе һуңғы яңылыҡтар менән тулһа ла, күңел буш булып ҡалырға мөмкин. Кешелек аңлы булып та, әхлаҡлы булырға өйрәнмәһә, бөтәбеҙгә лә юғалыу ҡурҡынысы янай. Быға атом бомбаһы асыҡ ишара, сөнки ул бер генә кешенең теләге менән бер секундта бөтә тереклекте юҡ итә ала.

**Ғаилә һәм йорт**

Ғаилә бер ҡыйыҡ аҫтында көн күрә. Ә өй - шәхси урын, кешегә үҙ өйөндә рәхәт, уңайлы булырға тейеш. Ҡатын-ҡыҙ ғаилә усағының һаҡсыһы һанала. Хәҙер был һүҙ символик ҡына, ә элек ҡатын-ҡыҙ ысынлап та ашарға бешереп, ғаилә усағына һүнергә бирмәгән. Ир кеше яланда йөрөп, урманда һунар итеп йөрөгәндән һуң, өйгә ҡайтып ял иткән. Ир-егет өйҙә ял итә, ғаиләһе менән ихлас, тыныс, асыҡ була ала. Өй - ул ғаилә, бәхет, балалар көләүе, шатлыҡ, атаәсәләрҙең хәстәрлек урыны.

**Дөйөм мәнфәғәттәр, юғары маҡсаттар - ғаилә бәхетенең сере**

Өйләнгәндәрҙең дөйөм маҡсаттары, теләктәре йәки ҡыҙыҡһыныуҙары булһа, был ғаиләне тағы ла нығыта. Киләш менән кейәү камиллыҡҡа, белемгә табан бергә атлар өсөн ғаилә ҡорған икән, ғаилә тормошо күңелһеҙ түгел, сағыу, ҡыҙыҡлы, хатта мауыҡтырғыс буласаҡ. Иң бөйөк маҡсат - ул Аллаһы Тәғәлә ризалығын алыр өсөн камиллыҡҡа ынтылыу. Кешеләр үҙ алдына етди рухи маҡсат ҡуя икән, ул маҡсатты бойомға ашырыр өсөн уларҙың дәрте гел өҫтәлеп тора.

Ир менән ҡатын туғандарын хәстәрләһә, белеп, яҡшы итеп ата-әсә ролен үтәһә, уларҙың ғаилә мөнәсәбәттәрен миҫал итеп ҡуйып була. Тимәк, был ғаилә - ысын шәхестәр, юлдаштар берлеге. Ундай мөнәсәбәттәр бер-берендә ялҡытыуҙан йыраҡ, улар рухлы, тыныс.

Кешенең көсө камиллыҡҡа ынтылыуға йүнәлергә тейеш. Был донъялағы бөтә гәмәлдәр ҙә кешегә икенсе донъяға миһырбанлы, камил булып барып баҫырға ярҙам итәсәк. Ғаилә бигерәк тә.

ҠОЛАҠ ҺАЛ!

# ҮҘЕНДЕ ЙӘЛЛӘТМӘ...



**Уңыштарҙы ла, уңышһыҙлыҡтарҙы ла кеше үҙе булдыра. Александр Левитастың уңышһыҙ кешеләрҙең ете ғәҙәте тураһындағы ошо фекерҙәрен уҡы ла, уйлан...**

- Уңышһыҙ кеше үҙен гел йәлләй. Йә төпкөлдә йәшәй, йә ир булып тыумаған, йә белемде яңылыш һайлаған, йә уны ата-әсәһе яратмай, йә кәүҙәһе һомғол түгел... Ҡыҫҡаһы, үҙен йәлләү өсөн уға һәр ваҡыт сәбәп бар һәм ул үҙенең шулай уңышһыҙ булыуының сәбәбе тап шунда икәненә ышана.
- Уңышһыҙ кеше бер туктауһыҙ мыжый һәм зарлана. Уның тормошонда барыһы ла насар, яҡты киләсәккә лә өмөт юҡ.
- Ул үҙен башҡалар менән сағыштыра. Үҙенде үҙең менән генә сағыштырырға мөмкин, мәҫәлән, былтырғыға ҡарағанда бөгөнгө һин барыбер башҡараҡ.
- Ул аҡсаны тапҡанға ҡарағанда күберәк тотона. Ул сығымдарын иҫәпләмәй, кредитҡа аҡса ала, туғандар, дуҫтарҙан бер туктауһыҙ аҡса теләнселәй, иренең йәки ҡатынының елкәһендә ултыра.
- Һаран. Ул магазиндарҙа ташлама эҙләй, осһоҙораҡ варианттарҙы һайлай. Быңдай кешенең бизнесы булған хәлдә лә, һаранлыҡ уға үҫешергә мөмкинлек бирмәйәсәк.
- Ул тиҙ генә файҙа алырға теләй. Киләсәктә яҡшы булһын өсөн бөгөн тырыша белмәй.
- Үҙенә оҡшамаған эш менән була. Әлбиттә, беҙгә күп нәмә оҡшамай, мәҫәлән, һәр көн иртә тороу күптәргә оҡшамай. Әммә уңышлы кеше глобаль кимәлдә үҙенә оҡшамаған нәмәләр менән була - яратмаған эшендә эшләй, үҙенә оҡшамаған өлкәлә эшҡыуарлыҡ менән булыша. Шуға ла башҡарған эшенән шатлыҡ та кисермәй.
- Ул үҙенең ваҡытының ҡәҙерен белмәй.

# КИРЕ ТОЙҒОНАН АРЫН!

**Көнө буйы йыйылған кире энергиянан арыныу өсөн ошондай ябай ғына ысулдарҙы ҡулланырға мөмкин:**

**1-се ысул.** Йылы һыу ағымы аҫтына тороп, көнө буйы һеҙҙә кире тойғолар уятҡан ваҡиғаларҙы хәтерегеҙгә төшөрөп, һыуҙы һалҡынырак итеп, уларҙы "йыуып" төшөрөгөҙ. Күңелегеҙ бушанып, кәйефегеҙ яҡшырғансы, һыуыҡ һыу менән йылы һыуҙы сиратлап ҡойоноғоҙ.

**2-се ысул.** Таҫҡа үҙегеҙ өсөн ҡулайлы булған температуралағы һыу ҡойоғоҙ. Бер ус тоҙ һалығыҙ. Аяҡтарҙы ошо һыуға тығып ултырығыҙ. Тәнегеҙгә иғтибар итегеҙ, уның ҡайһы өлөшө көсөргәнештә икәнен асыҡларға тырышығыҙ. Был урындағы кире энергия аяҡтар буйлап төшөп, тоҙло һыуҙа тарҡала, тип күҙ алдына килтерегеҙ. Тоҙ бөтөн кире энергияны юҡҡа сығара.

✓ *Башҡортостандан ситтә йәшәргә тура килә Усман Ҡыуатовҡа. Ошо арҡала ғына 30-сы йылдарҙың ҡанлы репрессияларынан ҡотолоп ҡала алғандыр, күрәһең. Ул ғүмеренең һуңғы йылдарын Әзербайжанда, Баҡы ҡалаһында үткәрә.*



*УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ!*

# ҺӘЙКӘЛГӘ ЛАЙЫҠ ШӘХЕСТӘР:

## Усман Ҡыуатов

Февраль башында Башҡорт хөкүмәтенең большевиктар тарафынан ҡулға алынғанын ишетеп, Хәрби съездың башҡорт делегаттары Усман Ҡыуатов, Мөхәмәтхан Ҡулаев, Муса Мортазин, Хафиз Ҡушаевтар Ырымбурға ҡайтып төшә. Большевиктар А. Дәүләтшин менән Б. Шәфиев тарафынан ойошторолған яңы орган - Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советы менән һөйләшеүҙәр һөҙөмтә бирмәй. Улар Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәнән сығарырға уйламай. Ҡарашы буйынса большевиктарға яҡын торған Муса Мортазин Советҡа ағза итеп һайлана. Ә Усман Ҡыуатов менән Мөхәмәтхан Ҡулаев большевиктар менән уртаҡ тел таба алмайынса, ҡайтып китергә мәжбүр була.

1918 йылдың июнендә Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте яңынан тергеҙелә. Хөкүмәттең Хәрби бүлеге Башҡорт армияһын ойоштороу эшенә тотона. Июль айында башҡорт эшмәкәрҙәре Ырымбурға килеп, Хәрби бүлектең урындағы бүлексәһен ойоштора. Усман Ҡыуатов Ырымбурға килеп, Хәрби бүлектең эшенә ҡушылып китә. Уға Үсәргән кантонында ирекле отряд ойоштороу эше йөкмәтелә. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә У. Ҡыуатов үҙенә һалынған бурысты үтәп сыға - Үсәргән кантонында 300 кешелек ирекле отряд ойоштороп, уның етәксеһе булып китә. "Башҡорт хөкүмәте вәкиле студент Усман Ҡыуатов инициативаһы менән Орск өйәҙендә башҡорттарҙың тәүге ирекле ғәскәре ойошторолдо. Һәр береһе ҡоралланған, патрондары ла етерлек. Ирекле ғәскәр ойоштороуҙы һәр ерҙә халыҡ ҙур шатлыҡ менән ҡаршы ала. 1-се Үсәргән улысы уларҙың хөрмәтенә, байраҡтар ҡуйып, һыйҙар әҙерләп, ҙур байрам үткәрҙе. Һәр кем ғәскәргә ярҙам күрһәтә", - тип хәбәр итә 1918 йылдың 20 августында "Башҡорт хөкүмәтенең теле" гәзите.

Сентябрь аҙағында Усман Ҡыуатов Үсәргән ирекле отрядын прапорщик Әмировҡа тапшырып, Ырымбурға Башҡорт хөкүмәте ҡарамағына эшкә күсә. Хөкүмәттең Эске эштәр бүлегенең ваҡытлы сәркәтибе итеп тәғәйенләнә. 1 октябрь Башҡорт хөкүмәтенең махсус вәкиле итеп кире Үсәргән кантонына ебәрелә. Артабан У. Ҡыуатов Башҡорт хөкүмәтенең Эске эштәр бүлеге мөдире Аллабирҙе Йәғәфәровтың ярҙамсыһы булып эшләй. Әйткәндәй, был осорҙа, Башҡорт хөкүмәтендә Ҡыуатовтар нәҫеленән тағы бер вәкил - Әлмөхәмәт кантондың улы Хужәхмәт Ҡыуатов эшләй. Ул 1918 йылдың сентябрендә хөкүмәттең ғәскәри милиция бүлеге начальнигы итеп тәғәйенләнә, быға тиклем Семиреченск губернаһында өйәҙ начальнигы булып хеҙмәт итә.



Приказъ
Башкирскаго военнаго совета
№ 28.

Үсәргән кантоны отряды етәксеһе Усман Ҡыуатовтың отряд менән етәкселекте прапорщик Әмировҡа тапшырып, Башҡорт хәрби шураһы ҡарамағына ҡайтыуы тураһында Хәрби шураның фарманы. Ырымбур ҡалаһы, 1918 йылдың 27 авгусы.

1919 йылдың 26 ғинуарында Башҡорт хөкүмәтенең составында үҙгәрештәр булып үтә. Хөкүмәт рәйесе - Мөхәмәтхан Ҡулаев, ә хөкүмәттең ағзалары итеп З. Вәлиди, Ю. Бикбов, А. Йәғәфәров һәм А. Әҙеһәмовтар менән берлектә Усман Ҡыуатов та һайлана. Хөкүмәт ағзаһы булараҡ, ул Башҡортостан автономияһының артабанғы яҙмышын хәл иткән мөһим ҡарарҙарҙы ҡабул итеүҙә ҡатнаша. 16 февраль Башҡорт хөкүмәте тиҙ арала Совет власы яғына сығыу тураһында ҡарар ҡыла.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, 21 февраль көнө 1-се Бөтә Башҡорт хәрби съезында Усман Ҡыуатов Башҡорт Совет автономияһының революцион хөкүмәте - Башревкомдың ағзаһы итеп һайлана. Ике көндән Башревком Башҡорт республикаһының 15 комиссариатын ойоштороға ҡарар итә. Финанс һәм һаулыҡ һаҡлау комиссары вазифаһы У. Ҡыуатовҡа йөкмәтелә. Әммә апрель башында, Абдулла Әҙеһәмов сирләп китеү сәбәпле, Ҡыуатовты Ырымбур ҡалаһына, 1-се армия штабында Башревком вәкиле итеп ебәрәләр. Был осорҙа Колчак армияһы контрһөжүмгә күсеп, Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәре Башҡортостандан сигенә башлай. 14 апрель Зәки Вәлиди: "Постарайтесь скорее вывести из Оренбурга дивизион 2-го полка, а также ходатайствуйте о скорейшей подаче подвижного состава для войска, находящихся в Тоцке", - тип, телеграф аша У. Ҡыуатов менән С. Мағазовҡа хәбәр ебәрә. Ырымбурҙан эвакуацияланырға әҙерләнеп йөрөгәндә, Орск өйәҙе урыҫтары ялыуы буйынса, губЧК вәкилдәре Усмандың фатирын тентеп-тикшереп, 1918 йылда Үсәргән ирекле отрядына етәкселек итеүгә бәйле документтарын таба. Уны аҡ гвардия хәрәкәтендә ҡатнашыуҙа ғәйепләп, төрмәгә ябып ҡуялар. Ырымбурҙағы хәлдәр турағында Башревком рәйесе урынбаҫары М. Ҡулаев Мәскәүгә Милләттәр эштәре буйынса халыҡ комиссары Сталинға хәбәр итә: "На основании параграфа 16 заключенного договора члены Башкирского правительства не подлежат репрессиям за свою минувшую деятельность. Между тем бывший член Башкирского правительства и член Башвоенревкома Куватов был арестован Оренбургской чрезвычайной комиссией. Башвоенревком просит принять меры к разъяснению дела и преданию суду виновников ареста Куватова". Ошондай уҡ телеграмманы Зәки Вәлиди һәм Харис Йомағолов ебәрә. Оҙаҡламай Ырымбур губЧКһы, Мәскәүҙең бойороғо буйынсалыр, ахыры, Усман Ҡыуатовты Һамар ҡалаһына Башревком ҡарамағына ебәрергә була. Апрель аҙағында Һамарға килеү менән Усманды Һамар губернаһы башҡорттары араһында мобилизация үткәреү эшен йөкмәтеп, Пугачев өйәҙенә ебәрәләр. Әммә уны чекистар ҡуҙ уңынан ысҡындырмай. Хәҙер уның эшен 1-се армияның махсус бүлеге һәм Һамар губЧК-һы тикшерергә тотона.

15 майҙа командировканан Саранск ҡалаһына Башревкомға ҡайтыуына, хәрби комиссар Зәки Вәлиди, Һамар губЧК-һы һәм 1-се армияның махсус бүлегенең талабы арҡаһында, күрәһең, Ҡыуатовты ҡулға алырға бойороҡ бирә. Бынан тыш, ул Башревком составынан сығарыла. Ҡыуатов19 майҙа: "Сегодня третий день, как сижу в заключени, и никакого обвинения Валидовым мне не предъявлено... Вместе с тем прошу внести на собрании ревкома вопрос о выдаче меня на поруки комунибудь из членов ревкома", - тип, Башревком рәйесенә ғариза яҙа. Зәки Вәлиди, Һамар губЧК-һы һәм 1-се армияның махсус бүлеге тыныслангансы, Усман Ҡыуатовты һаҡ аҫтында тоторға ҡарар иткәндер, буғай. Бер ай тирәһе һаҡ аҫтында ултырғандан һуң, Башревком уны Яхъя Салихов яуаплылығына, порукаға тапшыра. Бер аҙнанан Ҡыуатовты Башсовнархоздың ер эштәре бүлеге коллегияһы ағзаһы итеп тәғәйенләйҙәр.

1919 йылдың авгусында Башревком Башҡортостанға ҡайта. У. Ҡыуатов Башревкомдың уполномоченныйы сифатында Саранск ҡалаһында ҡалдырыла. Октябрҙең аҙағында ғына Стәрлетамаҡҡа саҡыртып алына. 1920 йылдың башында ул ер эштәре буйынса халыҡ комиссары вазифаһын башҡара. Үҙәк власть 1920 йылдың 19 майындағы декреты менән Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын милли-мәҙәни өлкә кимәленә ҡалдыра. Мәскәүҙең ҡырҡа үҙгәргән сәйәсәтен ҡабул итмәйенсә, Башревком ағзалары, шул иҫәптән Усман Ҡыуатов та, Төркөстанға сығып китә. Бында ла большевиктар власы урынлаштырылғас, У. Ҡыуатов Германияға эмиграцияға китә һәм Берлин ҡалаһына барып урынлаша. 1924 йылдың февралендә Берлинға Зәки Вәлиди менән Фәтхелҡадир Сөләймәнов килә. З. Вәлидиҙең Усманды эмиграциялағы сәйәси эшкә йәлеп итергә тигән ниәте була. Әммә улар килеүенә Усман Ҡыуатов Рәсәйгә ҡайтып киткән була. "Төркөстандан Фәйзулла хужа хөкүмәте Берлинға 70 талип ебәргәйне. Шулар араһында... Башҡортостандан Усман Ҡыуатов та бында булған. Усман үҙе сәйәси көрәшкә бик тоғро егет ине. Тап беҙ Берлинға килгән арала уның ҡайтып китеүен белеп, бикныҡ бошондоҡ. Сөнки башҡорттарҙан көрәште дауам итерлек, университет тамамлаған, өҫтәүенә, немецса яҡшы белгән бер кешебеҙ ҙә юҡ ине", - тип яҙа үҙенең хәтирәләрендә Вәлиди.

Рәсәйгә ҡайтһа ла, күп кенә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәре кеүек үк, Башҡортостандан ситтә йәшәргә тура килә Усман Ҡыуатовҡа. Ошо арҡала ғына 30-сы йылдарҙың ҡанлы репрессияларынан ҡотолоп ҡала алғандыр, күрәһең. Ул ғүмеренең һуңғы йылдарын Әзербайжанда, Баҡы ҡалаһында үткәрә. Баҡы медицина университетында уҡыта. Усман Мөхәмәтғәлим улы Ҡыуатов 1956 йылда ошонда вафат була.

Башҡортостан Республикаһы ойоштороулоуның 100 йыллығын билдәләгән ваҡытта милли хәрәкәт эшмәкәре Усман Ҡыуатовтың исеме тыуған яғы Ейәнсура районында лайыҡлы рәүештә мәңгеләштерелер, тип өмөт итке килә.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы,**
**БР Дәүләт китап палатаһы директоры.**

**(Аҙағы. Башы 1-се һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Башҡорттар тарихына бер нисә концепция

Юғарыла килтерелгән дәлилдәр башҡорттарҙың күп яҡлы һәм тәрән тарихын өйрәнеп, киң йәмәғәтселеккә еткергәндә объектив ысынбарлыҡҡа яҡынайыраҡ тороу талабын ҡуя. Үкенескә күрә, ҡайһы бер ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә башҡорт халҡының тарихын һәм ҡаҙаныштарын башҡа халыҡтарҙыҡы итеп күрһәтергә ынтылыш күҙәтелә. Мәҫәлән, көньяҡ Уралда табылған предметтар буйынса донъяла иң байы һаналған Филиппов ҡәберлеген сарматтарға бәйләйҙәр. Әммә алтын боландарҙың сарматтарҙыҡы түгеллеге, иртә быуатта йәшәгән күсмә халыҡтарҙа алтын эшкәртеү бөтөнләй булмауы М.Ю. Трейетер, И.И. Руденко кеүек ғалимдар тарафынан күптән иҫбат ителгән инде. Был хаҡта алдараҡ яҙып үткәйнем.

Башҡорттарҙың башҡа халыҡтар менән бәйләнеше уларҙың асылының үҙгәреүен аңлатмай. Башҡорттар һәм уларҙың ырыу-ҡәбиләләре үҙенең этносына тоғро булып ҡала, улар, ҡайһы бер ғалимдар иҫәпләүенсә, мадьяр ҙа, курдтар ҙа, йәғни "башкурдтар" ҙа түгел. Мәшһүр башҡорт ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди курдтарҙың тарихын төплө өйрәнә, әммә үҙенең хеҙмәттәрендә уларҙың башҡорттар менән тамырҙаш булыуы хаҡында бер дәлил дә килтермәй.

### Башҡорт-һинд-иран концепцияһы

Хәҙерге һиндтарҙың һәм ирандарҙың ата-бабалары булған арыйҙар б.э.т. II меңйыллыҡта көньяҡҡа һәм көнбайышҡа күсенгән. Б.э.т. XV - XII быуаттарҙа арыйҙар Иведа үҙәнен биләй, ә X - IX быуаттарҙа "һинд-иран берҙәмлеге" эпохаһы башлана. Артабан арыйҙар айылап ике телдә һөйләшеүсе халыҡҡа бүленә, ике дини традиция формалаша: һиндтарҙың "Вед"ы һәм ирандарҙың "Авеста"һы - брахманизм и зароастризм (Рак, 1998, 3-4-се биттәр). Был тарихты өйрәнеүселәр айырым осраҡтарҙа һинд-иран гидронимдары һәм топонимдары фин-уғыр мифтарынан алынған тип фаразлай. Мәҫәлән, Волга - Ра (иранса - Ранха, һиндса - Раса) һәм Урал тауҙары - ведала Фипо.

Һинд-иран эпохаһы, йәғни Иранда һәм Һиндостанда йәшәүсе арыйҙар берҙәмлеге тамамланыуын Э.А. Грантовский б.э.т. 2000 - 1500 йылдарҙа тип билдәләй. Ул эпоханың матди дәлилен "ҡалалар иленә" ҡараған Арҡайым, Һынташ һ.б. тәшкил итә. Ғалимдар фекеренсә, арыйҙарҙың бороңо иле көньяҡ Уралда булған. Мифологик һәм археологик тикшеренеүҙәр арыйҙар ике өлөшкә тарҡалғанға тиклем көньяҡ Уралда йәшәп, һуңынан Евразияның ике тарафына юлланыуын раҫлай.

**(Дауамы бар).**

✔ *Донъя кимәленә сығыу - ул башҡорт булыуҙан, башҡортса ижад итеүҙән туҡтау түгел, киреһенсә, үҙ халҡыңды ла данлау ул. Башҡортостанда ла продюсер үҙәктәре булһа, башҡорт эстрадаһы маҡсатлыраҡ үҫешер ине.*



# ҺӘР АРТИСТЫҢ, үҙ йөҙө

**Һәр йырсының, һәр төркөмдөң үҙенең сәхнә яҙмышы була. 25 йыл буйына популярлығын юғалтмаған легендар төркөм "Караунһарай"ҙың традицияларын дауам итеүсе булған был төркөмдө халыҡ үҙ итеп өлгөрһә лә, һаман төрлөсә атап йөрөтә. "Йәш Караунһарай"мы, әллә "Карауан"мы тип баш ватыусылар ҙа бар, имеш, һаман да. Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының "Карауан" эстрада төркөмө егеттәре Эльмир ӘБҮБӘКИРОВ, Рөстәм ШАҺЫБАЛОВ, Марсель ҠОТОЕВ һәм Тимур РАМАЗАНОВ менән ошо һәм башҡорт эстрадаһына ҡағылышлы башҡа сетерекле һорауҙарға яуап эҙләйбеҙ.**

**Үҙ заманында "Караунһарай" бик популяр төркөм ине. "Карауан" төркөмөн тамашасы, тәү сиратта, уларҙың ижади юлын дауам итеүсе тип ҡабул итәләр, моғайын?**

**Э. Әбүбәкиров:** "Караунһарай"ҙы хатта ниндәйҙер кимәлдә башҡорт эстрадаһына нигеҙ һалыусылар, тип тә атай алабыҙ. Халыҡ уларҙы бөгөн дә һағынып хәтерләй. Башҡорт эстрада-фольклор төркөмө фолк-рок йүнәлешендә эшләй һәм уны ул ваҡыттағы Өфө дәүләт сәнғәт институты студенттары Вилдан Яруллин, Артур Туҡтағолов, Мәхмүт Нәҙершин, Әмир Тойғонов, Рәсүл Ҡарабулатов, Ғилман Ҡашҡаров барлыҡҡа килтерә. Тәүге концерттары ла институттың сәхнәһендә үтә. Ә филармония составына төркөм 1995 йылда күсә. Былтыр улар 25 йыллыҡ юбилейҙары айҡанлы концерт ойошторҙо.

**М. Ҡотоев:** Мин филармонияға эшкә килгәндә "Караунһарай" төркөмөнән Мәхмүт Нәҙершин ғына эшләй ине. Ул йәштәрҙе "Йәш Ҡараунһарай" тигән исем аҫтына йыйып, яңы төркөм булдырҙы. 2007 йыл ине был. Бер йыл мин дә эшләнем унда. Тәүге мәлдәрҙә "Караунһарай"ҙың традицияларын юғалтмаҫҡа тырышып, йәштәр уларҙың юлын дауам итә, тигәнерәк юҫыҡта ижад иттек. Фольклор йүнәлеше өҫтөнлөк итте. Төркөмдөң үҙенең тамашасылары барлыҡҡа килде. Һунынан тағы ла үҙгәрештәр булды һәм беҙ өс йыл элек төркөмдө "Карауан" тип атаныҡ.

**Р. Шаһыбалов:** "Караунһарай" төркөмөндәге ағайҙарға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ, улар күңелдәребеҙгә рух һалды. Беҙ башҡорт йырының, башҡорт фольклорының ҡәҙерен белеп ижад итәбеҙ бөгөн дә. Тик "Карауан" төркөмөн шул уҡ "Караунһарай" тип ҡабул итмәһен ине халыҡ. Был бөтөнләй башҡа төркөм, уның үҙ юлы, үҙ стиле бар. Сөнки йырсының ижады ул йәшәгән заман менән тығыҙ бәйле.

**Э. Әбүбәкиров:** Рөстәм дөрөҫ әйтә, "Караунһарай"ҙың рухы күңелдәребеҙҙә, уларҙың тәрбиәһе өлгөһөндә үҫтек. "Караунһарай" барлыҡҡа килгән осорҙо күҙ алдына килтерегеҙ, суверенитет яулаған, беренсе президент һайлап ҡуйған, халыҡтың дөйөм рухы күтәрелгән, уйҙар, теләктәр берләшкән мәл ине ул. Шуға ла уларҙың репертуары заманына күрә бик актуаль булды. Бөгөн тамашасы башҡа - беҙ ошоларҙы ла иҫәптә тоторға мәжбүрбеҙ. Унан һуң, беҙ Хөкүмәт кимәлендәге концерттарҙа йыш сығыш яһайбыҙ, республикабыҙҙы сит төбәктәрҙә күрһәтәбеҙ, ШОС һәм БРИКС саммиттарында эшләнек - бына былар ҙа репертуарға йоғонто яһамай ҡалмай. Сит телдәрҙә йырларға тура килә. Әммә беҙ халҡыбыҙға, уның фольклорына, халыҡ йырҙарына ла тоғролоҡ һаҡлайбыҙ.

**Р. Шаһыбалов:** "Карауан" да "Караунһарай"ға ауаздаш, исемегеҙҙе үҙгәртергә теләмәйһегеҙме, тип йыш мөрәжәғәт итәләр. Исем үҙгәртеү бер нәмәгә лә килтермәйәсәк, тигән фекерҙәбеҙ. Әлбиттә, халыҡтың һаман буталыуы беҙгә ауырлыҡтар тыуҙыра, әммә үҙебеҙ булып ҡалырға ҡамасауламай. Легендар "Караунһарай" төркөмөнөң үҙ урыны, беҙҙең - үҙ урыныбыҙ.

**"Карауан" төркөмөнөң үҙ юлы тинегеҙ, ниндәй йүнәлештә ижад итәһегеҙ? Һеҙҙең тамашасығыҙ кемдәр?**

**Э. Әбүбәкиров:** Беҙ "Караунһарай" төркөмө өлгөһөндә "тәрбиәләнгән" йырсылар, тип әйткәйнек. Рухлы йырҙар һайлайбыҙ, халыҡ йырҙарын, профессиональ композиторҙар йырҙарын. Беҙ профессиональ артистар, һәм репертуарға һөнәри ҡараш һәм талап булырға тейеш.

Ғөмүмән, һәр йырҙың үҙенең сәхнә яҙмышы була. Ҡайһы бер йырҙы тамашасы шул тиклем ярата, концерттарҙа уны гел һорайҙар. Ә ҡайһы бер йырҙы бер йырлайһың да, шунда уҡ репертуарҙан төшөп ҡала, сөнки халыҡҡа оҡшамай ҙа ҡуя. Йырҙың һуҙҙәрен, аранжировкаһын ҡабаттан үҙгәрткән осраҡтар ҙа була.

**Р. Шаһыбалов:** Башҡорт халыҡ йырҙарын йырлайбыҙ, төркөмдәге һәр йырсы башҡорт халыҡ йырын урын-еренә еткереп башҡара ала. Атайолатайҙарыбыҙҙан шундай бөйөк мираҫ ҡалған, шуға нисек тоғро булмайһың инде? Халыҡсан йырҙар урын алған репертуарҙа, тип әйтер инек. Йырҙың һуҙҙәренә мотлаҡ иғтибар итәбеҙ. Бөгөнгө йәштәр һымаҡ, еңелсә стилдә йырлай башларға һуң инде. Унан һуң, был беҙгә килешмәҫ тә, төркөмдә бер кем дә бындай йырҙар йырларға ризалашмаҫ та ине. Егеттәр нисек уйлайҙыр, әммә мин үҙемдә урта быуын йырсылары рәтенә индерәм. Сәхнәлә ун йылдан ашыу ижад итеү аҙ ғүмер түгел ул, башҡорт йырсылары араһында үҙ исемебеҙ бар хәҙер. Тамашасының иғтибарын яулағанһың икән, уларҙың ышанысын артабан да аҡларға кәрәк.

**М. Ҡотоев:** Төркөмдәге һәр йырсы үҙенсә йырлай, һәр кемдең үҙ тауышы, стиле. Мин үҙемдә классик башҡарыу стилендә үҫтерергә тырыштым, Тимур Рамазанов күберәк Европа стилендә йырлай. Ул үҙе лә йырҙар яҙа. Рөстәм Шаһыбалов халыҡ йырҙары буйынса шәп белгес, әллә күпме йырҙар белә ул. Сөнки ошо мөхиттә үҫкән, атаһы Садиҡ ағайҙы республика халҡы халыҡсан йырсы тип таный. Эльмир Әбүбәкиров иһә төрлө стилдәрҙә лә үҙен яҡшы тоя. Һәр кемдең үҙенә генә хас стиле булыуы тамашасыға ла оҡшай. Төрлө тауышҡа йырлайбыҙ, бер үк йырҙы һәр беребеҙ төрлөсә башҡара.

**Т. Рамазанов:** Йырсы булараҡ, йырҙан үҙең ҙур ҡәнәғәтләнеү алһаң, уны рәхәтләнеп йырлаһаң, уңыш шунда ғына йылмаясаҡ. Бынау йырҙы тиҙерәк йырлап бөтәйек, тип тормайбыҙ сәхнәлә, сөнки һәр йыр күңелдән сыға, һәр йырҙы яратып һайлағанбыҙ.

**Милли эстрада тураһында ниндәй фекерҙәһегеҙ? Ситтән ҡарағанда, беҙ хәҙер 25 йыл самаһы уны үҫтерәбеҙ түгел, ә үҫтерергә маташабыҙ һымаҡ тойола түгелме?**

**Т. Рамазанов:** Ғөмүмән, башҡорт эстрадаһы тураһында кире фекерҙә түгелмен, әле бына "Йәшлек-шоу" үҙенең 25 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Йырсылар бар, тимәк, милли эстрада ла бар.

**Э. Әбүбәкиров:** Йырсыларыбыҙҙың булыуы башҡорт эстрадаһының барлығының билдәһе, тик ул ҙур булмаған майҙанда үҫешә. Сөнки улар ҙур булмаған аудиторияға эшләй, йәғни, тыңлаусылар башҡорттарҙың ер йөҙөндәге иҫәбе менән билдәләнә. Уларҙың да барыһының да йыр тыңламауы, концерттарға йөрөмәүе бар.

**Р. Шаһыбалов:** Шуға ла үҙенең ижадын үҫтерергә теләгән йырсы башҡорт аудиторияһына ғына күҙ төбәп эшләмәй. Радик Юлъяҡшинды алайыҡ, Мәскәүгә китте лә, продюсер тапты, Рәсәй эстрадаһы кимәленә сыҡты. Афарин, тиеүҙән башҡа нимә әйтәһең уға? Ҡаҙан ҡалаһында ла продюсерҙар әүҙем эшләй, йәштәрҙе улар үҫтерә, донъя кимәленә сығарырға тырыша. Донъя кимәленә сығыу - ул башҡорт булыуҙан, башҡортса ижад итеүҙән туҡтау түгел, киреһенсә, үҙ халҡыңды ла данлау ул. Башҡортостанда ла продюсер үҙәктәре булһа, башҡорт эстрадаһы маҡсатлыраҡ үҫешер ине.

**Тимәк, эстрада үҙенең ағышына ғына ҡуйылған?**

**Р. Шаһыбалов:** Шулай тиһәк, дөрөҫөрәк булыр. Эйе, йырсы үҙе йыр һайлай, үҙе таба, яҙҙыра, үҙе үк үҙен рекламалай - клип төшөрә, радиоға бирә, бик булмаһа, "Бәйләнештә" социаль селтәренә һала. Йәғни, ижадсы булараҡ, үҙен үҙе үҫтерә. Ә продюсеры булһа, ул ижад менән генә шөғөлләнер - йырлар ине. Клип төшөрөү, фонограмма яҙҙырыу, концерттарҙы продюсеры ойоштороп ине. Был ойоштороу эштәре күп энергияны ала, башҡорт йырсылары быны үҙ елкәһендә татып белә. Әммә шул уҡ ваҡытта эстраданы продюсер, директор йә промоутер үҙе генә алға этәрә алмаясаҡ, бының өсөн тырыш ижадсылар ҙа булыуы шарт. Башҡорт эстрадаһы барлыҡҡа килгән осорҙо иҫкә төшөрәйек, "Ел, ерәнем", "Сыңрау торна", "Любизар" кеүек үҙебеҙҙең милли йырҙар сәхнәгә сыкты, ошо миллилеге, халыҡсанлығы менән дә көслө булғандыр ул. Бөгөн кемдең күңеленә нимә оҡшай, шуны сығып йырлай торған мәл, тик уларҙы ғәйепләргә кәрәкмәй. Хәҙерге башҡорт эстрадаһы кемгә эйәреп ижад итә? Рәсәй эстрадаһына, ә улары, үҙ сиратында, көнбайыш модаһына эйәрә. Йәғни, был йәһәттән беҙ ҡабатлаусының ҡабатлаусыһы булып сығабыҙ. Әммә ошо шарттарҙа ла ижадсының үҙ йөҙө булыуы кәрәк. Башҡаларҙы ҡабатлап ҡына үҫеп булмай. Күңелдә өйкәп торған тағы бер күренеште әйтмәйенсә булмай. Концерттарға тамашасы йөрөмәй, тип әйтергә яратабыҙ, тик шул уҡ эстраданың, сәнғәттең кимәлен белер, артистарҙың тын алышын тойор өсөн булһа ла етекселәр ҙә күрергә тейеш тамашаларҙы. Мәҫәлән, Башҡорт дәүләт филармонияһы республика мәҙәниәтенең йөҙөн күрһәтеп тора, тик ул да иғтибарҙан ситтә.

**Шоу заманында тамашасы ниндәйерәк йырҙар тыңлағыһы килә?**

**Т. Рамазанов:** Еңелерәк, ҡыҙығыраҡ тамаша күргеләре,



✓ Кемдер, "Ике дуҫтың береһе ҡол була" тип әйткән. Дөрөҫ түгел. Бына мин бер әхирәтемде сәйәси мәсьәләләрҙә көслөрәк булған өсөн үҙемдән өҫтөн ҡуям. Ә ул мине йәшәйеш мәсьәләләрендә үҙенән өҫтөн итеп ҡуя.



# ТӨРКӨМДӨҢ...

## булырға тейеш

дәртләрәк йырҙар тыңлағылары килә. Шулай уҡ хәҙер концертта бер костюмда сығыш яһап булмай. Йырсы сәхнәгә ниндәй костюмдарҙа сыҡты, йырҙары ниндәй, дәртле йырҙар булдымы, әллә һуҙып тик торҙолармы - тап ошо кимәлдә һүҙ йөрөтә бөгөнгө тамашасының күбеһе.

**Э. Әбүбәкиров:** Ысынлап та шулай. Сәхнә кейеме тигән төшөнсәгә талап көсәйә улар тарафынан. Шуға ла гастролдәргә яҡтыртыу ҡоролмалары, кулисалар йөрөтәбеҙ.

**М. Ҡотоев:** Бындай талап республиканың бөтөн төбәктәренә лә хас. Шулай бер концерт менән Баймаҡҡа барҙыҡ, халыҡты йыйғандар, уларға оҡшаны, бик ҡәнәғәт ҡалдылар. "Концерт шәп тә ул, - тиҙәр аҙаҡтан килеп, - тик сәхнә ярлы күренә". Сөнки Татарстандан килеп, шоу-тамаша күрһәтеп, халыҡты шуға өйрәтеп бөттөләр. "Улар бит әкиәттәге кеүек, сәхнәгә томан араһынан килеп сыға", - тип һөйләйҙәр. Мин филармонияға эшкә килгән йылдары гастролгә сыҡҡанда Мәҙәниәт министрлығы маршрут ҡағыҙҙары биреп сығара торғайны. Ул бөтәһенә лә рөхсәт ителмәй ине. Йәғни, республикала гастроль эшмәкәрлеге контролдә тотолдо, шәхси эшҡыуарҙар концерт менән Башҡортостанда йөрөй алмай ине. Ошо тәртип боҙолдо бөгөн. Күнелебеҙ тар түгел, ярай, йөрөһөндәр ҙә, тик республиканың төп мәҙәниәт усаҡтары - филармонияларға ҡамасауламаһындар ине. Башҡорт дәүләт филармонияһы берҙән-бер ҙур концерт берләшмәһе. Шулай уҡ Сибай, Учалы, Стәрлетамаҡ, Нефтекама филармониялары бар.

Тамашасы шоу талап итә лә, тере тауышҡа йырлап тораһыңмы, фонограммамы икәненә тиклем айыра үҙе. Йәки халыҡ йырын саҡ ҡына дөрөҫ йырлама, шунда уҡ көлә башлаясаҡтар, сөнки был йырҙарҙы бәләкәйҙән ишетеп, ошо мөхиттә үҫкән төбәктәр бар. Халыҡҡа нимә кәрәк икәнен аңлап та булмай шунан, шоумы, әллә сифатмы?

**Э. Әбүбәкиров:** Администратор булараҡ, концерт һөйләшергә бараһың, буш көн юҡ, гәфү итегеҙ, был көндәргә беҙгә Татарстан килә, тиҙәр. Үҙебеҙҙең башҡорт ауылдарында ла ошо уҡ хәл ҡуҙәтелә.

**М. Ҡотоев:** "Һеҙгә бит халыҡты йыйып булмай", - тип аҡланыу ягын ҡарай башҡорт апайҙары, башҡорт ағайҙары. Концерт ҡуйырға барһаң, клуб мөдире клубын аса ла, ҡаса һала, йылы һыу тәҡдим итеүсе лә юҡ.

**Э. Әбүбәкиров:** Төрлө программалар әҙерләйбеҙ. Совет фильмдарынан алынған йырҙарҙан торған киноконцерттарҙы ла матур ҡабул итteләр. Ул рус телендә бара. Ни өсөн башҡортса ғына түгел, башҡа телдәрҙә лә йырлайһығыҙ, тип ҡыҙыҡһыныусылар бар икән, әлеге лә баяғы тамашасыға яраҡлашмайынса хәлебеҙ юҡ. Әммә беҙҙең концерттарыбыҙҙың кимәле юғары, быныһын ышаныс менән әйтәбеҙ. 10 йыллыҡ юбилей концерттары менән республикала ғына түгел, Силәбе, Курган өлкәһендә сығыш яһаныҡ, эш сәфәре менән Германияға, Галле ҡалаһына барып ҡайттыҡ. Ә "Карауан"дың йыл һайын уҙа торған концертының датаһын 6 мартҡа ҡалдырҙыҡ. Халыҡ та өйрәнгән, беҙгә лә уңайлы. Былтыр "Уфимская волна" конкурсында Гран-приға лайыҡ булдыҡ.

**М. Ҡотоев:** Хыялда башҡорт халыҡ йырҙарынан ғына торған концерт та бар. Уны беҙ үткән мизгелдә филармонияның бәләкәй залында эшләп ҡараныҡ. Зал тулы булды. Аллаһы Тәғәлә маңлайҙан үбеп, йырлау һәләтен биргән икән, үҙ милләтебеҙгә хеҙмәт итеүҙе лә бурыс итеп һалған. Концерттарҙа ла халыҡ йырҙарынан торған блоктар эшләйбеҙ, һәр беребеҙ халыҡ йырын башҡара ала.

**▸ Донъялағы һәр халыҡтың үҙенең көйө, музыка ҡоралы бар. Сит илдәрҙә башҡорт сәнғәтенә мөнәсәбәт ниндәй?**

**М. Ҡотоев:** Башҡорт халҡын уның сәнғәте ни тиклем юғарыға күтәреүен бөтәһе лә аңлаймы икән? Мин Хакас Республикаһында уҙған "Ут йыры" Бөтөн Рәсәй этник эстрада фестиваль-конкурсында башта ҡатнашыусы, һуңынан баһалама ағзаһы булараҡ ҡатнашам. Унда беҙ һәр ваҡыт заманса эшкәртелгән халыҡ йырҙары менән сығыш яһайбыҙ. Сөнки халыҡ йырының диапазоны ҙур, мелизмы көслө, уның ярҙамында йырсының мөмкинлектәрен күрһәтергә була. Тыңлаған һайын һоҡланалар, ҡайҙан сыға ул был тиклем моң, тип аптырайҙар. Бына шундай ҡөҙрәт ул йырҙарыбыҙ ҙа, ҡурайыбыҙ ҙа. Тыва, бүрәт халҡының көйҙәренең стиле бер үк, улар башлыса өҙләү менән алдыралар. Ә башҡорт йыры - диапазонлы йыр, ул италия арияларын үтеп китә. Абдулла Солтанов Италияла "Буранбай" менән сығыш яһағас: "Һеҙ ниндәй операнан ниндәй ария йырланығыҙ?" - тип юҡҡа һорамағандар бит. Былайтып ситкә сығып, йөрөп ҡайтыуҙың ыңғай яғы бар - беҙ үҙебеҙҙе генә түгел, ә республиканы күрһәтәбеҙ. Барған һайын призлы урын алып ҡайтабыҙ, хайран ҡалып тороп ҡалалар. Егеттәрҙе республикала ла шундай кәйеф менән ҡаршы алһындар ине. "Үҙ ерендә олтан бул", тиһәләр ҙә, ваҡытында күрһәтелгән иғтибар һәм ярҙамдан да мәртәбәле нәмә юҡ артист өсөн.

Жюриҙа булғас, кемдең нисек сығыш яһағанын ситтән күрәм, Иҙел Аралбаев та, Тимур Рамазанов та беренсе урын яулауҙарына ҡарамаҫтан, Гран-приға лайыҡ инеләр. Хатта Хакас Республикаһының мәҙәниәт министры үҙе Гран-приҙы Башҡортостан алырға тейеш ине, тип әйтте. Ошондай мөнәсәбәт күрһәтелә беҙгә, тимәк, башҡорт йыры һәм ҡурайына ла.

**Э. Әбүбәкиров:** Беҙҙең балаларға халыҡ йырҙарын башҡарырға өйрәтеү өсөн продюсер үҙәген асыу теләге лә бар. Балалар өсөн конкурстар ҙа күп, уларҙа ҡатнашырға мөмкин булыр ине. Әлегә матди мөмкинлектәр юҡ хыялды тормошҡа ашырырға, әммә бар идеялар ҙа бит башта уйҙа тыуа, һуңынан алдына килә. "Карауан" төркөмөндә бик талантлы, виртуоз ҡурайсы Илнур Һибәтуллин эшләй башланы. Уның ҡурайҙың мөмкинлектәрен күрһәткеһе килә донъя тамашаһына. Ҡурайҙың яңы төрҙәрен дә үҙләштерә. Хыялдар күп, тырышҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан, ти халыҡ. Тимәк, тырышырға кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, замана өсөн "Карауанһарай" легендар төркөм булды. Бөгөн уларҙың рухлы йырҙарында тәрбиәләнгән быуын йәштәренең ниндәйҙер кимәлдә уларҙың юлын дауам итеүенә лә аптырарға түгел, сөнки уларҙың маҡсаты бер - сәнғәтен популярлаштырыу арҡылы халҡына хеҙмәт итеү. Эш исемдә түгел, эш есемдә, ти бит халыҡ та.**

**"Карауан" егеттәренең һәр береһенең айырым сығыш яһарлыҡ, айырым концерттарға халыҡты йыйырлыҡ мөмкинлеге була тороп, һаман да ошо төркөмдә йәшәтеү маҡсаты менән ижад итеүе лә һоҡландырмай ҡалмағандыр һеҙҙе. Әммә башҡорт сәнғәтен йырсылар ғына түгел, ә һеҙҙең менән беҙ ҙә - тамашасылар ҙа күтәрә. Һөйөү бер яҡлы була алмай. Ошоно ла онотмайыҡ.**

*Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.*

---

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ТОҒРО БУЛ!

?

**"Тоғролоҡто нисек аңлайһығыҙ?" тигән һорау менән бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек:**

***Һәйөндәк АҪЫЛОВ, журналист:*** Кешеләр менән кешеләр араһында тоғролоҡ аҙмы-күпме һаҡлана ул. Мине тормошобоҙҙа йыш осраған икенсе бер хыянат борсой: милли асылыңа хыянат. Уны икенсе төрлө ассимиляция тиҙәр. Үҙ асылына, тәбиғи булмышына тоғро була алмағандар ассимиляцияға бирелә. Тимәк, милли ассимиляцияны рухи яҡтан һынау ғына түгел, бер үк ваҡытта шәхси сифаттарҙың үҙгәреү күренеше лә тип аңларға булалыр. Шуныһы үкенесле: был хыянат өсөн яуап бирелмәй. Әйтәйек, үҙ-үҙенә, үҙ асылыңа хыянат иң ҙур хыянат һаналғас, ниңә үҙ милли асылынан тайпылыусылар выждан ғазабы кисермәй икән? Шулай уҡ ассимиляцияның "объектив сәбәпселәре" лә бер кем алдында ла яуаплы түгел. Әйтәйек, күп һандағы башҡорттарҙы ассимиляциялауға булышлыҡ иткән (Калининдан башлап) кешеләрҙе ни өсөн беҙ ҡара хәреф менән халҡыбыҙҙың "Хәтер китабы"на яҙыуҙан ҡурҡабыҙ?

Ассимиляцияның кешеләр араһындағы мөнәсәбәткә ҡоролғаны ла булалыр. Йәғни көслө характерлы кеше йоғонтоға тиҙ бирелеүсән һәм характерһыҙ кешене үҙенә буйһондора, икенсе һүҙ менән әйткәндә, үҙ инаныуына күсерә, "ассимиляциялай". "Кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың" әйтеме лә тап ошо юҫыҡта тыуған. Мәсьәләгә ошо күҙлектән ҡарағанда, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәге тоғролоҡ - ул кешенең шәхси сифаттарына бермә-бер тап килгәндә генә ысын мәғәнәһендәге тоғролоҡтор. Әгәр ҙә кеше үҙ асылына хыянат итеп, кемгәлер һүҙ биргәне өсөн генә уға тоғро була икән, был иҫәпкә ҡоролған тоғролоҡ һәм ул ысын тоғролоҡ түгелдер. Шулай булғас, кешеләр араһындағы тоғролоҡ иң беренсе кешенең үҙ асылына, тәбиғи булмышына тоғролоғона нигеҙләнергә тейештер. Тимәк, "Һүҙ биргәнһең икән, уны үтәргә тейешһең" тигән девизға бер төрлө генә ҡараш булмауы ла бар. Ул һүҙ ниндәй шарттарҙа, һүҙ биреүсенең ниндәй эмоциональ хәлендә әйтелгән бит әле...

"Мин хыянат иттем тоғролоҡҡа, хыянатым ләкин тоғоро..." тип яҙа халыҡ шағиры Рәми Ғарипов үҙенең бер шиғырында. Шағирҙың ошо уҡ шиғыр юлдарының һүҙ аҫты фекере лә аңлашылып тора: "Мин үҙ асылыма тоғро ҡалдым һәм был кемгәлер хыянатым түгел..."

***Афзал СӘЛИМОВ, уҡытыусы:*** Бер кемдең дә тоғролоғо маңлайына яҙылып ҡуйылмаған, әммә ул һәр кем өсөн дә хас сифат. Кеше иң тәүҙә үҙ-үҙенә тоғро. Йөҙ процентҡа тоғро, сөнки үлем ҡурҡыныслы янағанда кеше үҙенә генә ышана. Батып барғанда тәүҙә үҙе тырмаша, ҡотолор өсөн һаламға булһа ла йәбешергә әҙер. Хоҙайы ин аҙаҡ иҫенә төшә иманһыҙ әҙәмдең. Физиологтар ғүмерҙе (дөрөҫөрәге, тәнде) һаҡлау инстинкты тип аңлаталар беҙгә кешенең был хайуандарса рефлексын.

Тормошта үҙенде ышаныслы тойоу өсөн ана шул үҙенә булған тоғролоғоңдо, үҙенә булған һөйөү-эгоизмыңды башҡаларға өләшергә кәрәк. Ни тиклем күберәк өләшһәң, шул тиклем күберәк әйләнеп ҡайтасаҡ. Йәғни башҡаларға ни тиклем тоғро булһаң, улар ҙа шул уҡ кимәлдә һиңә тоғро буласаҡ.

Тормошта һәр кем тоғролоҡҡа һынау тота. Ватан алдындағы тоғролоҡ илгә ҡурҡыныс янағанда һынала. Атай-әсәйгә, туғантыумасаға, эргәңдәгеләргә тоғролоҡ үҙ-ара мөнәсәбәттә көн һайын, һәр ваҡыт һынауға дусар ителә. Тыуған илгә тоғролоғона хыянат иткәндәрҙе хөкөм итәләр, төрмәгә ябалар. Туғанына хыянат иткәнде ҡәһәрләйҙәр. Дуҫ-фекерҙәштәр, бергә эшләгән коллегалар ҙа һинең хыянатыңды ауыр кисерә, рәнйей. Ә инде кеше үҙ-үҙенә хыянат итһә, ул Хоҙай алдында яуап тота. Тимәк, үҙенә хыянат итеү Аллаһы Тәғәләгә хыянат итеүгә, дин аша ебәрелгән ҡанундарҙы инҡар итеүгә бәрәбәр. Тоғролоҡ хыянат менән һынауҙа беленә. Тик береһе изгелек өсөн бирелһә, икенсеһе - Иблес ҡотҡоһо.

***Гөлиҙә СӘЛИХЙӘНОВА, эшҡыуар:*** Тоғролоҡ менән ихласлыҡ тигән ике сифатты бер-береһенән айырып ҡарап булмай. Бары тик ихлас кеше генә тоғро була ала. Эшен ихлас итеп атҡарғандар үҙ шөғөлөнә, үҙ һөнәренә тоғро ҡала. Ихлас кеше бер ваҡытта ла дуҫына, туғандарына, үҙ-үҙенә хыянат итмәй. Ғаиләлә ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәт ихлас булһа, уларҙы ла тоғролоҡ биҙәй. Минең, мәҫәлән, ихлас яратҡан, хөрмәт иткән дуҫтарым бар. Дуҫбыҙ, тип, бер-беребеҙҙе маҡташып ҡына ултырмайбыҙ, ҡайһы ваҡыт тәнҡит һүҙҙәре лә әйтешәбеҙ. Һәр хәлдә, бер-беребеҙҙең йылы һүҙенә лә, тәнҡитенә лә мохтажбыҙ. Бер-беребеҙҙең тоғролоҡто йөрәгебеҙ менән тоябыҙ. Кемдер берәү "Ике дуҫтың береһе ҡол була" тип әйткәйне, шуны лаҡапҡа әйләндерҙеләр. Дөрөҫ түгел. Ундай дуҫлыҡ дуҫлыҡ түгел инде ул. Бына мин бер әхирәтемде сәйәси мәсьәләләрҙә көслөрәк булған өсөн үҙемдән өҫтөн ҡуям. Ә ул мине йәшәйеш мәсьәләләрендә үҙенән өҫтөн итеп ҡуя. Аҙағында тигеҙләшәбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Әҙәм балаларын ихласлыҡ менән тоғролоҡ шул тиклем биҙәй, ышаныслы итә. Ихлас булмағандар ғына хыянатҡа барырға, ике йөҙләлек күрһәтергә мөмкин.

***✓ Мин бит иреңә һине үлтереп килмәнем. Рәнйеп ятаһы булма берүк! Улыңды үҫтерҙем. Кеше араһында кәм-хур булманы. Үҙ һөтөмдә бирә алмаһам да, аҡылымды бирергә тырыштым. Миңә үпкәләп ятырға хаҡың юҡ!***





Лена ХӘЙРУЛЛИНА

# БАЛАҠАЙҒЫНАМ

(Хикәйә)

Кем белә, бәлки, ана шул ҡыйырһытыуҙарға түҙмәйенсә, ете ят ергә ерегеп китә алмай, эскегә һабышҡан булғандыр бисараң... Ғәфүр әрменән әйәртеп ҡайтҡайны уны. Ҡапҡанан килеп ингәндә үк күтәрелеп ҡарарға ла ҡыймай, улының беләгенә тас йәбешеп торған сибек, ҡарасман ҡыҙҙы үҙһенмәне лә ҡуйҙы шул Сәбилә. Ҡарты иһә бигерәк ҡаты ҡыланды. Ҡайҙан алып ҡайтһаң, шунда илтеп ырғыт, тип кенә ебәрер ине. Әйтерһең дә, ул урамдан табып алған бесәй балаһы! Уныһын да әле эсендә йөнө булғаны тота һалып ҡына сығарып ырғыта алмаҫ. Йәлләр. Ә был бит кеше! Берәүҙең ғәзиз балаһы! Илтеп ырғыт, имеш. Үсал булам тигәс тә... Оҙаҡламай Хәмзә өйөндә нисек тә был ике йәрҙең араһын һыуытырға тигән етди ҡарар ҡабул ителде. Бигерәк тә йәштәрҙең сырсыулашып ихатала баҫтырыш уйнап китеүҙәрен, етәкләшеп урамға сығып сабыуҙарын аҡылдарына һыйҙырып бөтә алмай, иҫнеҙ булып күҙәтеп ултырыр булды был икәү. Тора-бара был йортта килен кешенең исеме лә бик һирәк әйтелеп, аҙаҡ бөтөнләй әйтелмәҫ булып, "теге"гә әйләнеп китте. Әрмеһенә киткәндә Гөлзада менән вәғәҙәләшеп, егет башы менән үҙ вәғәҙәһен боҙоп, улдарының ошо ҡарасманды етәкләп ҡайтып инеүен бер нисек тә ғәфү итә алманы атаәсә.

Ә килен кеше, өйҙән сығып китеп, оҙон-оҙаҡҡа ҡайҙалыр олағырға ғәҙәтләнде. Төшөрөштәрә башланы. Йөклә сағын да күрмәнеләр уның, сабыйын иһә әсә кеше төндә ҡайны тупһаһында ҡалдырып китте. Быларға күренеп торманы. Ара-тирә, әллә күкрәге һыҙлауға түҙә алмай, әллә улын һағынып, ҡайтып киткеләштерҙе. Унан тағы олаҡты. Кешеләр уның урманяландар ҡыҙырыуы, тирә-яҡ ауылдарҙа һалмыш ҡиәфәттә тап итеүҙәре хаҡында төрлө хәбәр-фәлән еткереп торҙо. Үҙ яғына ла ҡайтып китмәне ул, моғайын, ирҙән ҡайтҡан тиген исемде күтәреүҙән оялғандыр. Яҙмышылыр...

Эйе, яҙмыш. Хәҙер инде барыһын да уға ғына һылтарға ҡала. Әҙәм балаһының ғәҙәте шул. Бәхетен ул үҙенән күрһә, бәхетһеҙлеген һәр ваҡыт ана шул яҙмышҡа япһара.

* * *

Гөлзада ҡот осҡос төш күреп уянды. Ғазраил ҡиәфәтле бер ҡатын уның ҡосағындағы улын тартып алмаҡсы була. Бәй! Ныҡлаңҡырап ҡарағас, танып ҡалды тегене - был уның мәрхүмә көндәше лә баһа, баламды алырға килдем, тип, Баязитты йолҡҡослай. Ә малай, Гөлзаданан ысҡынып, әсәһенең ҡулына йәбешмәксе итә. Оҙаҡ тартҡылашыуҙан ҡатындың тамам хәле бөтөп, инде ергә ауҙым тигәндә, кемдер мылтыҡтан атып ебәрә. Теге ғазраил, малайҙы ысҡындырып, күккә күтәрелә. Аңын йыя алмай торғанында "Килен!" тигән тауыш әйләнһә, ҡайныһы баҫып тора. Кеҫәһенән сығарып, Гөлзаданың усына ниҙер һалмаҡсы итә үҙе. Ни булыр был йылы ғына әйбер? Уның йылыһы ҡатындың ҡулы, тора-бара бөтә тәне буйлап тарала. Етмәһә, әллә ниндәй рәхәтлек тә бирә үҙенә. Ҡасандыр кисергәйне бит ул бындай рәхәтлекте. Тик ҡасан? Ниндәй ваҡытта? Уйлай торғас, иҫләне. Улын тәү тапҡыр ҡулына алғанда кисергәйне лә баһа бындай ләззәтте! Әле лә шул ҡабатланғандай булды. Иләҫ-миләҫ булып торғанында ҡапыл Баязитын иҫенә төшөрөп, етәгенә алам тиһә, уныһы янында юҡ. Ҡайҙа булды уның улыҡайы? Ҡайҙа? Ҡайҙа? "Баязииит!" тип ҡысҡырмаҡсы итә әсә кеше, тик тауышы үҙенән алыҫ китмәй, бышылдауға күсә лә китә. Янында баҫып торған ҡайныһы, ымлап, усты асырға ҡуша ла, ҡуйы томан араһына инеп юғала. Гөлзада ус төбөнә күҙ һалмаҡ була. Ни икән ул усты өтөп алып барған был әйбер? Текләнҡерәй бирип ҡарағайны - пуля. Ни ғәләмәт? Ул яйлап ҡына бала йөрәгенә әйләнә лә, тибергә тотона. Үҙе тибә, үҙе һулҡылдай. Һуулҡ-һулҡ!.. Һуулк-һулҡ!...

Был ҡурҡыныс төшөн нисек юрарға ла белмәне әсә. Күңелен шом баҫты. Хәйер, беренсегә генә болармай инде уның төшө. Әле улы бәләкәс саҡта ла йә ҡап-ҡара ҡош килеп, уның бишеге тирәләй әйләнеп оса, йә күҙҙәре янып торған ҡара бесәй Гөлзаданың битерен тырнай, унан ҡапыл ғына йәш, ҡараҡай ҡыҙ ҡиәфәтен алып, Ғәфүрҙең ҡосағына сума. Ныҡлаңҡырап ҡараһа, битен сырыш баҫҡан әбей булып сыға үҙе. Һуңғы арала унан башҡа ла хәсрәте арткан ҡатын тамам аптырауға ҡалды. Уйламағанда түңәрәк кенә бәхете кителде лә ҡуйҙы шул уның. Әллә ни булды. Улының холҡо танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Ҡыҙмасараҡ йөрөгән саҡтары артты. Әрмеһенән үҙгәреп ҡайтты егет. "Әсә юлын ҡыуа, - тине ҡырыҫ ҡайны, - дегәнәктә алма бешмәҫ инде..." Ни эшләп әсәһе юлын ҡыуһын ти? Гөлзада үҫтерҙе лә һуң уны. Юҡ, юҡ, булмаҫ! Юлдан яҙмаҫ уның улыҡайы! Ул-был була ҡалһа, кеше күҙенә нисек ҡараһың? "Уҡытыусы балаһы!" тиерҙәр. Кеше яман бит. Көләрҙәр. Бығаса ана шул "уҡытыусы балаһы" тигәндәре Баязитты ауылдың бөтән балалары араһында бер башҡа юғарыраҡ тотто.

Шул уҡ ваҡытта малайҙың һәр аҙымы ауыл халҡының ҡаты күҙәтеүе аҫтына алынды. Ҡайһы саҡта уның күҙгә эленмәҫ кенә эше лә ҙурҙан тороп маҡталды, төймәләй генә бәләһен дә дөйәләй күреп фашлаусылар ҙа табылып торҙо. Бергә уйнап үҫкән тиҫтерҙәре араһында ла булды әсе телле яуыздары. Түбәһе күккә тейеп йөрөгән малайҙың баһаһын тап ана шулары ер менән тигеҙләп ҡуйғыланы. "Ул бит ысын әсәй түгел! Уның әсәһе эскесе булған! Алкаш булған да үлгән! Алкаш! Алкаш!.." - тип үсекләргә тотоналар. Ундай ҡыйын ваҡыттарҙа Баязит, бүртлеккә менеп китә лә, бесән өҫтөнә ятып илай. Оҙаҡ илай ул. Илап туйғас, салҡан ятып уйға ҡала. Лапаҫ түбәһенә ябылған шиферҙың бәләкәс кенә тишегенән бүртлек эсенә ептәй һуҙылып ҡояш нуры төшә. Уның әсәһе лә шул ҡояш янында йәшәйҙер. Рәхәттер уға. Йылылыр. Кем белә, бәлки, әлеге ваҡытта, Баязиттан күрмәксе, әсәһе лә анау күпереп торған болоттарға ятып уйланып яталыр? Гөлзада әсәһе әйткәйне бит, ул күктә йәшәй, уны бейеккә, ҡояш янына фәрештәләр ҡанаттарына ултыртып алып менгән, тип. Әсәйең ана шул бейектән һине гел күҙәтеп йөрөй, тип тә өҫтәгәйне. Ҡояш бигерәк эҫе лә инде ул, тамағы кибеп, һыу таба алмай йонсомаймы икән әсәкәйе? Теге фәрештәләрҙең ҡанаттары көймәйме икән ул эҫегә? Уй, ҡанаттары янып, уның әсәһен ҡолатып ҡуймаһындар берүк! Бәлки, ҡояш янында түгел, ә айҙа йәшәйҙер Баязиттың әсәһе? Көйөнтә аҫҡан ҡыҙ тураһында ҡәрсәһенән ишеткәне бар. Зөһрә исемле, ти, бик сибәр, ти, үҙе. Бәй! Уның әсәкәйе лә Зөһрә исемле булған бит! Сибәр булғанын да белә Баязит, кәртешкәнән күргәне бар. Атаһы менән икәүләп төшкәндәр. Әсәһе ап-аҡ күлдәктә, сәскәләр тотҡан, ә атаһы - һалдат кейемендә. Әсәһе башын саҡ ҡына ҡыйырайтып, атаһының яурынына терәгән, уныһы бер ҡулы менән кәләшенең биленән ҡосҡан. Йылмайғандар. Кәртешкәгә төшкәндә бөтә кеше лә шулайтып йылмая, уныһын Баязит белә. Гөлзада әсәһе менән ҡалаға барғанда, бер ағай уларҙың икәүһен шыҡылдатып кәртешкәгә төшөрөп алғайны, ул да шунда йылмайырға ҡушты. Ни эшләп улайттыра, тип көйһөҙләнгәйне Баязит, йылмайған кеше матур була, улым, тине Гөлзада әсәһе, бәхетле булып күренә. Үҙе гел ауыҙын йырып йөрөй бит, матур булам, тиҙер. Йә бәхетле булғыһы киләлер. Ә уның әсәкәйе ниндәй булды икән? Нисегерәк һөйләште, нисек итеп атлап йөрөгән ул? Яҡшы булғанмы? Яҡшы булғандыр, әсәйҙәр насар булалыр шул? Көлгәндә ҡысҡырып көлгәндер ҙә, үҙен үсекләгәндәрендә, ул да, Баязит шикелле, ошолайтып илағандыр инде. Их, бер генә күрһәң ине үҙен! Күктән төшһә, ҡыҫып ҡосаҡлар ҙа, бөтән унда ебәрмәҫ ине уны Баязит. Ошонда, үҙҙәре янында ғына йәшәтер ҙә ҡуйыр ине! Юууҡ-юууҡ, ебәрмәҫ ине!

- Ә-сәәй! Әс-сәәәй! - Малай, сөйҙән ысҡынырға торған серек таҡтаны ҡутарып ырғытып, мәмерйә тишегеләй өңөлөп ҡалған тишеккә башын тыға ла, күккә ҡарап ҡысҡырырға тотона: - Ә-сә-кә-йееем! Ә-сәәй!.. Ә-сәәй, тим!

- Мин бында бит, улым! Төпәй булып ҡуйма! - Гөлзада әсәһенең тауышы был.

- Йооҡ! Һиңә түгел, үҙемдең әсәйемә ҡысҡырам! Үҙемдекенә, белдиш! Кит бынан! Һин бит минең ысын әсәйем түгел! Бар, кит!

... Әле лә бына, һалғанын буйына һеңдерә алмай болғанған саҡтарында, әсәһенең үлемендә өйҙәгеләрҙе ғәйепләп, бының ише һүҙҙәрҙе йыш яуҙыра. Ҡолағың ғына сыҙаһын да, йөрәгең генә түҙһен инде ишеткәндәреңә! Етмәһә, арғы ос Гәүһәр кеше аша шомло хәбәрен еткерҙе. Имеш, Баязит йыш ҡына зыяратта, әсәһенең ҡәбере янында ҡунып йөрөй икән. Ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне быға әсә кеше. Аллаҡайым үҙе һаҡлаһын!

Оҙаҡ ҡына уйланып йөрөгәндән һуң Гөлзада бер ҡарарға килде. Көндәшенең ҡәберенә йыйынды. Өйҙәгеләренә белдереп-нитеп торманы был уйын. Ҡояш таң шаршауын асып, тау артынан үҙенең һарылы-ҡыҙыллы уҡтарын ауыл яғына ҡарай берәм-һәрәм ата башлаған мәлдә саҡ еткереп алды ла, тәүәккәлләне. Картуф баҡсаһын үткәс, ауыл осона сығарған һуҡмаҡҡа боролоп төштө. Ундай ергә урам буйлап барыуҙы килештермәне ҡатын. Ҡалҡыулыҡты артылһаң, ҡул һуҙымы ғына ара ҡала. Зыярат ҡапҡаһына еткәнсе юлында осраған сәскәләрҙән гөлләмә йыйып алды. Тулҡынланды үҙе. Әйтерһең дә, мең гонаһлы килеш көндәшенең үҙе менән осрашыуға китеп бара. Күңелендә тулаған мең төрлө уйын бер төйөнгә төйнәргә итһә лә, уларҙы тыңлашмай, төрлөһө төрлө тарафҡа пыран-заран була ла ҡуя. Йыйып алырмын тимә! Оҙон булып үҫкән кесерткәндә йыра-йыра, Гөлзада үҙе төбөн килгән ҡәбергә табан атланы. Бер-бер артлы теҙелеп киткән таштарҙағы таныш исем-шәрифтәрҙе күреп, йөҙөн ҡиблаға бороп, доға уҡырға тотондо: "Әссәләмәғәләйкүм йә әһләл-кубур йәғьфируллаһ ләнә үә ләкүм... Әнтүм сәләфунә үә нәхну бил-әсәр..." Күптән буяу-маҙар күрмәгән, тутығып бөткән тимер рәшәткәләр аша үрелеп, имән бағана төбөнә сәскәләрен һалды ла, аулығының осо менән битен яндырып төшкән күҙ йәштәрен һөрттө. "Һин мине ғәфү ит, - тигән булды ул, һүҙҙе ниҙән башларға белмәй байтаҡ аҙапланғас. - Асыуланма. Мин бит иреңә һине үлтереп килмәнем. Рәнйеп ятаһы булма берүк! Улыңды үҫтерҙем. Кеше араһында кәм-хур булманы. Үҙ һөтөмдә бирә алмаһам да, аҡылымды бирергә тырыштым. Ҡыйырһытманым бит балаңды. Миңә үпкәләп ятырға хаҡың юҡ! - Үҙе алҡымына тығылған төйөрҙө көс-хәл менән йотоп ебәрә алды.- Башҡаса төшөмдә килеп йонсотма. Улымды барыбер һиңә бирмәйем! Бирмәйем, ишетәһеңме? Бирмәйем! Бир-мәәәйеем!.." Әсә кешенең был һүҙҙәре, елгә эйәреп, йәһәннәмгә китеп олаҡты...

...Ә теп-теүәл бер йылдан тотош ауылды тетрәткән хәл булды. Ауылдан сығып китеп олаҡҡан Баязит, ҡайтып инеп, лапаҫта һыйыр һауып ултырған Гөлзадаға йәбеште. Һарай мөйөшөнә өйөлгән бесән өҫтөнә гөрһөлдәп барып осто ҡатын, сәскәле халат, иңдәренән һыпырылып, аяҡ аҫтына осто.

- Теймә әсәңәәә! - Тауышҡа атылып килеп ингән Ғәфүр улын елтерәтеп, тышҡа бырағтырҙы. "Ана һөтө лә ана һөтө, ти ине", тип оҙаҡ илауланы Сәбилә ҡарсыҡ. Хәмзә ҡарт бығаса бүртлектә йәшереп тотҡан ҡушкөбәгенә йәбеште:

- Тегеһен ҡалдырып яңылышҡайным, быныһын үҙ ҡулдарым менән юҡ итәм ҡәбәхәттең!

Ауыл өҫтөн ҡаплаған төн пәрҙәһен йыртып, мылтыҡ тауышы яңғыраны. Баязитҡа тәғәйенләнгән пуля, Гөлзаданың йән өҙгөс тауышына ҡаҡлығып, билдәһеҙлеккә осто:

- Ба-ла-ҡай-ғы-наам!..

**(Аҙағы. Башы 1-се һанда).**

*МӨҺИМ САРА*

**Хәрефтәр танып, уҡый башлағас, ҡүптәрҙең ҡулына алған тәүге китабы уҡытыусыһы һөйләп ҡыҙыҡһындырған берәй әкиәт йәки хикәйә, шиғырҙар йыйынтығы булғандыр. Бына ошолай әҙәбиәт донъяһына ишектәр асыусы уҡытыусыһы һәм яҙыусылар, шағирҙар араһындағы бәйләнештең заман үҙгәреү менән дә өҙөлмәүе Башҡортостан мәғарифты үҫтерeү институтында үткәрелгән "Ихлас күңелдән һөйләшеү" тип исемләнгән сарала тағы бер тапҡыр раҫланды.**

# ӘҘИПТӘР МЕНӘН...

## уҡытыусылар осрашты



Осрашыу башланыр алдынан ойоштороусылар Ноғман Мусин тураһында тапшырыу күрһәтте. Ишембай районының кадрҙарҙа сағылған гүзәл тәбиғәтенән тыш, әҙип әйткән һүҙҙәр анда уйылып ҡалды: "Балаларым минең бынамын тиғән башҡорт кешеһе булып үҫтеләр. Шунан да ҙур бәхет юҡтыр", - тине ул. Был осрашыуға килгән уҡытыусылар үҙҙәре лә ошо уҡ һүҙҙәрҙе ҡабатлай алыр ине, сөнки улар ҙа туған телгә һөйөү тәрбиәләүселәр, фиҙаҡәр эшмәкәрлектәренең һөҙөмтәһе шатлығын татыусылар бит. Күренекле шәхес менән осрашыуға ла бушҡа ғына йыйылманы улар. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусинға 85 йәш тулыуға арналған методик эшкәртмәләр республика конкурсы һөҙөмтәләре буйынса иң яҡшы дәрес өлгөләре авторҙарын тәбрикләргә, тәжрибә уртаҡлашырға йыйылдылар.

Бәйгелә республиканың 102 уҡытыусыһы ҡатнашҡан. Иң яҡшы дәрес эшкәртмәһе авторы, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө гимназияһы уҡытыусыһы Зөлфиә Шәрәфетдинова үҙ проектын яҙыусының "Шайтан ҡуласаһы" әҫәре буйынса эшләгән. "Ноғман Мусин был әҫәрендә тәбиғәт һәм кеше яҙмышын йәнәш ҡуйып һүрәтләй, тәбиғәтте һаҡлау менән бергә күңел экологияһы тураһында ла һүҙ алып бара. Дәрестә автор күтәргән проблеманы уҡыусыларға аңлатыу мөһим, эшемдә шул сағылыш тапты. Беҙҙең эштең баһаһын ошолай күркәм осрашыу ойоштороп билдәләү күңелемдә үҫтерҙе. Сәхнәнән әйтелгән һәр фәһемле һүҙ йөрәккә ятты, саҡырылған ҡунаҡтарҙың Ноғман Мусин менән бәйле иҫтәлектәре хәҙер беҙҙең дә күңелдәрҙә йылыта", - тине Зөлфиә Тәлғәт ҡыҙы тәьҫораттары менән уртаҡлашып.

Бала күңелен үҫтереүгә көсөн йәлләмәй хеҙмәт иткән уҡытыусыларҙың йөрәгенә гәм, дәрт һалған сарала күренекле әҙиптәр Рәшит Шәкүр, Хәсән Назар, Әмир Әминев, БР Яҙыусылар Союзы рәйесе Зәки Әлибаев, "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналы баш мөхәррире Салауат Кәримов, Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты ректоры Рәмил Мәзитов сығыш яһаны. Осрашыуҙы Ноғман Мусин үҙе йомғаҡланы:

- Яҙыусылар һеҙгә таянып йәшәй, сөнки һеҙ - әҙәбиәтте йәш быуынға аңлатыусы иң яҡын дуҫтарыбыҙ, - тине ул педагогтарҙы тәбрикләп. - Бөгөн бик күп темаларҙы күтәрҙек, рухи аҙыҡ булған китаптар, гәзит-журналдар тураһында төплө фекер алыштыҡ. Бер ваҡытта ла вайымһыҙ йәшәмәгеҙ, уйланығыҙ, халыҡ менән һөйләшә йөрөгөҙ...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Тағы ла был көндәрҙә "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2018" һәм "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2018" ҡала һөнәри конкурстары старт алды. Быйыл унда бөтәһе 68 педагог көс һынаша, шуларҙың ун туғыҙы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. Йәш уҡытыусылар йылдағыса "Педагогик дебют" һәм "Педагогик өмөт" номинацияларында билдәләнәсәк. Ярыш үткән йылдың декабрь аҙағына тиклем дауам итте, уҡытыусылар "Эссе", "Минең педагогик инициативам", "Оҫталыҡ дәресе", "Мәғариф проекты", "Түңәрәк өҫтәл" "Методик семинар" буйынса һынауҙар үтте. Ошо арала уның йомғаҡлау этабы үтәсәк.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ЗАУЫҠ*

# АВТОБИОГРАФИЯМ

*Фидаил САФИН*

Тормош юлым бик ябай
Малай, егет, ир, бабай.

* * *

Алмаш-тилмәш уҙа ғүмер;
Ярты ғүмер үтте тәҙәп,
Ә яртыһы - мин ҡорғанды
Емергәндә ҡарап... Түҙеп.

* * *

Йәшәү тигән был ғазапҡа
Мин сыҙамай, кем сыҙай.
Аҡыл ерҙә, хыял күктә
Ҡап уртала мин - Фидай.

* * *

Балдан татлы бала саҡтарымда
Табын күрке булды йыр бары.
Әллә илай күңел, әллә йырлай,
Иҫкә төшһә әсәй йырҙары.
Әсәйле лә, атайлы ла саҡтар
Ғүмеремдең йырлы йылдары.
Бала сағым хәтирәһе булып,
Ҡолағымда сыңлай моңдары.
Тормош ҡануңдары аяуһыҙ шул,
Үтә йылдар, үтә теҙелеп.
Көйлө генә булһын алда йылдар,
Тик ҡалмаһын йырҙар өҙөлөп.

* * *

Йыйып алдыҡ баҫыуҙарҙан
Ғүмер булмаған уңыш.
Алла бирһә, Сүриәлә
Тиҙҙән бөтә ти һуғыш.
Ярҙарына һыймай, ташып
Тормош шишмәһе аға.
Ә ниңә һуң киләсәккә
Күңел өмөтһөҙ бага.
Күҙең әле иҫән саҡта
Төңөлмәй тор һин, күңел.
Әҙәм булып һин тыуғанһың,
Өмөтһөҙ шайтан түгел.

* * *

Ҡыуылғандан бирле әҙәм
Ожмахтан, гонаһ ҡылып.
Байлыҡ тиеп донъя ҡыуа
Төрлө хәлдәргә ҡалып.
Бөндөнең бит бар өмөтө
Ожмахҡа кире ҡайтыу.
Ете ҡаттың береһендә
Әҙергә генә ятыу.
Ожмахта эшһеҙ, ҡаңғырып
Ятырғамы, юҡ инде!
Ҡыл доғанды, бирәм, әбей,
Кеҫәмдәге бар тинде.
Эшһеҙ исемен күтәреп,
Түләп аҡса ла бушҡа,
Заман йөрөттө мине лә,
Яҙмаһын Хоҙай башҡа.

* * *

Яңы тәртип менән ергә
Аяҡ баҫты яңы быуат.
Яңылыҡтар менән бергә,
Илдә арта, арта ҡеүәт.
Арта, арта... Сығарабыҙ
Бергә берҙе ҡушып - өҫтө.
Минең генә, тик ниңәлер
Мәшәҡәттәр һаман иҫкә.
Теләк менән мөмкинлегем
Араһында үрһәләнәм.
Минең хәлдә аңлар бары
Минең хәлгә керһә әҙәм.

Ҡартатайһыҙ үҫкән ҡартатаймын.
Был замана балаһына
Аптыраһаң, аптыра.
Ейәнкәйем мең һорауға
Мең яуапты таптыра.
Күҙ теймәһен сабыйыма,
Шатланам, собханалла.
Шул уҡ ваҡыт һағышлы уй
Күңелде солғап ала.
Ҡартатайҙан оло мираҫ:
Фамил(и)ям уның аты.
Һаҡлана һандыҡ төбөндә
Тағы ла "ҡара хат"ы.
Халҡым әйткән тағы бер һүҙ
Хәтергә ныҡ һалынған,
Атайҙан да йәп-йәш ҡалып,
Аҡылдан буш ҡалынған.
Сабыйыма ҡарайым да
Ҡыуанам, тыныс күгем.
Ҡартатайһыҙ үҫкән быуын
Ҡартатай үҙе бөгөн.

* * *

Дуҫ-иштәрҙең күбе үткәндәрҙә.
Киләсәктә мине кем көтә?
Мин ҡаламын әле бөгөнгөлә,
Барыр юлдар булһа ла түтә.
Киләсәккә, ваҡыт, саҡырма ла
Саҡырма ла мине, бармайым.
Ә шулай ҙа ошо шиғырымды
Тик бер һиңә, һиңә арнайым.

*ЯРҘАМ*



# ТУЙ ТАБЫНЫНДА...

## мәҡәлдәр, әйтемдәр

- Аҙ ҙа етә, күп тә бөтә, бергә торғанға ни етә?
- Аҙ ҙа етә, күп тә бөтә, татыулыҡҡа ни етә?
- Аҡса алһаң, һанап ал,
Ҡатын алһаң, һынап ал.
- Ана туй, бына туй - тай етмәһә күршенекен һуй!
- Ат алһаң - арба кәрәк,
Ҡатын алһаң, бары ла кәрәк.
- Ата-инә йәше менән,
Улы-ҡыҙы эше менән.
- Аталы бала - арҡалы,
Инәле бала - иркәле.
- Инәле бала - иркәле.
Аталы бала - аҡсалы,
- Атаһын күр ҙә - улын ҡос,
Әсәһен күр ҙә - ҡыҙын ҡос.
- Аттың шәбе - кешелә, ҡатын шәбе күршелә.
- Ауырткан ерҙән ҡул китмәҫ,
Унған ҡыҙҙан күҙ китмәҫ.
- Аштың йәме тоҙ менән,
Өйҙөң йәме ҡыҙ менән.
- Аштың йәме тоҙ менән,
Йоҡо тәмле ҡыҙ менән.
- Ашлыҡ уңһа - ерҙән,
Ҡатын уңһа - ирҙән.
- Балалы өй - баҙар,
Балаһыҙ өй - тулы зар.
- Бармағына күрә балдағы.
- Бер бар, берәгәйле бар.
- Бер ҡатында ун тауыҡтың көсө бар.
- Бизмән менән гер бергә,
Ҡатын менән ир бергә.
- Бойҙай яҡшыһы - ерҙән,
Ҡатын яҡшыһы - ирҙән.
- Далаһына күрә - ҡуйы,
Заманаһына күрә - туйы.
- Донъя күркe йәр менән.
- Донъяла кем гүзәл?
Кемде һөйһәң, шул гүзәл.
- Егет булһа, батыр булһын,
Ҡыҙ булһа, матур булһын.
- Егет - йорттоң терәге,
Ҡыҙҙар - йорттоң биҙәге.
- Егет - ил күрке,
Ҡыҙ - өй күрке.
- Ел иҫмәй, ҡура һелкенмәй,
Бер үпмәй, йөрәк елкенмәй.
- Еренә күрә еләге, ҡыҙына күрә кейәүе.
- Еткән ҡыҙ - киткән ҡыҙ.
- Ике килен бешергән аш йә гел тоҙ булыр, йә гел тоҙһоҙ булыр.
- Ике күңел бер булһа, суплек башы гөл булыр.

**Фәнүр ШАҺИЕВ.**
**Учалы районы**
**Иҫке Байрамғол ауылы.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Ағинәйҙәребеҙҙең ҡайһы берҙәре һыйыр һөтөнән генә 40-лап төр ризыҡ яһап булыуын иҫбатлап, күргәҙмә ойошторҙо. Аңыбыҙ төпкөлөндә ойоңҡорап киткән малсылыҡ менән бәйле йолалар иҫкә төшөрөлдө.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# АСЫҒЫУҘЫҢ...
## файҙаһы бар

■ Бака исемендәге институт тикшеренеүселәре билдәләүенсә, асығыу баш мейеһенә ял итергә мөмкинлек бирә. Оҙайлы ваҡыт асығыу һөҙөмтәһендә нейрондар араһындағы берләшмәләр әүҙемлеге кәмей һәм баш мейеһе көс йыйып ала. Һынауҙар емеш-еләк себендәрендә үткәрелгән. Башта себендәргә аҡһым, һуңғараҡ бөтөнләй ризыҡ бирелмәгән. Өс сәғәт үткәс, нейрондар араһындағы берләшмәләр әүҙемлеге 50 процентҡа кәмегән. Туҡлыҡлы матдәләр булмағас, нейромедиаторҙар аҙыраҡ бүленгән, энергия ҡулланыу кәмегән. Белгестәр иҫәпләүенсә, кешеләрҙә был процесс ошолай уҡ бара. Был асыш ғалимдарға эпилепсия кеүек ауырыуҙарҙы дауаларға мөмкинлек бирәсәк. Асығыу шулай уҡ ябығырға, юғары ҡан баҫымын, холестерин кимәлен төшөрөргә ярҙам итә. Бынан тыш, асығыу стрестан һаҡлай.

■ Торонтолағы медицина мәктәбе тикшеренеүселәре билдәләүенсә, туғандар менән аралашып йәшәү ғүмерҙе оҙайта. Экспериментта 57-84 йәшлек өлкәндәр ҡатнашҡан, асыҡланыуынса, кем туғандары менән йышыраҡ аралашҡан, улар оҙағыраҡ йәшәгән. Психологтар ҙа, яңғыҙлыҡ кешенең сәләмәтлек торошона яҡшы йоғонто яһамай, ти. Шуға ла улар оло йәштәгеләргә әүҙем булырға, төрлө сараларҙа ҡатнашырға саҡыра.

■ Төндә насар йоҡлаһаң, йоҡларға ятыр алдынан физик күнекмәләр эшләп ал, тип кәңәш итә ғалимдар. АҠШ-ның Йоҡо милли фонды үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар яуаптары буйынса бер нисә төркөмгә бүленгән: уларҙың ҡайһылары күнекмәләрҙе даими яһаған, ҡайһылары еңелсә генә спорт менән шөғөлләнгән, ҡайһылары бөтөнләй ҡыбырларға яратмаған. Кем ниндәй ҙә булһа күнегеү төрө яһаған, улар яҡшыраҡ йоҡлаған. Кемдәрҙер матур төштәр күреүен дә билдәләгән. Көнөнә 10 минут ҡына йәйәү йөрөү ҙә йоҡоноң сифатын күпкә яҡшырта, ти белгестәр.

■ Ғалимдар аҙ хәрәкәтләнеүҙең иҡтисади эҙемтәләрен баһалап ҡараған һәм байҙар һәм ярлылар араһында бер принципиаль айырма тапҡан. Билдәләнеүенсә, түбән социаль кимәл ялҡаулыҡ менән бәйле, улар шулай уҡ аҙ хәрәкәтләнә лә икән. The Lancet журналы яҙыуынса, ғалимдар 142 илдән йыйылған мәғлүмәттәрҙе анализлаған. Айырыуса аҙ хәрәкәтләнеү һөҙөмтәһендә ҡаҡшаған сәләмәтлекте кире нығытыу өсөн тотонолған сығымдарға иғтибар бирелгән. Халыҡтың түбән физик әүҙемлеге донъя иҡтисадына йылына 67,5 млрд һумға төшә. Йәки һаулыҡты нығытыу өсөн кешеләр ошо күләмдә аҡса тотона. Ғалимдар әйтеүенсә, был минималь һан, ысынында иһә һан тағы ла ҙурыраҡ булыуы ихтимал.

■ Бүләк биреү - кешелек тарихындағы иң боронғо йолаларҙың береһе. Психологтар билдәләүенсә, был кешенең психик торошона ла яҡшы тәьҫир итә. Ябай ғына бүләктән дә ыңғай тойоғолар кисергән кешеләр була. Кемдер ҡиммәтле бүләктәр ҡабул итеп өйрәнгән, уларҙың иһә кәрәкле әйберен ала алмаһа, кәйефе төшә. Ғөмүмән, бындай кешеләрҙең кәйефе йыш үҙгәреп тора. Бүләк биреүсе лә, кешенең ҡыуаныуын күреп, шатлана. Балаға бүләк эшләп, уны ҡыуандыраһығыҙ икән, ул да һеҙҙе үҙен яҡшы тотоуы, дәрестә алған яҡшы билдәләре менән бәхетле итергә тырышаcаҡ, тимәк, ул ала белеү генә түгел, бирә белеү мөһимлеген дә аңлаясаҡ, ти ғалимдар.

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# КЕШЕЛӘРҘЕҢ КҮҢЕЛ ҠАПҠАЛАРЫН...
## асыр бер сара ул беҙҙең ойошма

**Бөгөн республикабыҙ районДарында әүҙем эшләгән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы үтә ваҡытлы барлыҡҡа килде. Ауылдарҙа йорт ҡапҡалары, йорт ишектәре генә түгел, кешеләрҙең күңел ҡапҡалары ла бикләнә башлағайны бит. Иҡтисади ғына түгел, рухи көрсөккә ҡалған хәлебеҙгә әсенеп ултырған, ауылдарыбыҙ, милләтебеҙ яҙмышына битараф булмаған Учалы районы ҡатын-ҡыҙҙары ла бер ҡорға ойошоп, мәшһүр эпосыбыҙҙың үлемһеҙ юлдарын - "Донъяла мәңге ҡалыр эш - ул да булһа яҡшылыҡ" тигәнен девиз итеп алып, байтаҡ эштәр башҡарырға өлгөрҙө һуңғы биш-алты йыл эсендә. Ағинәйҙәр ҡоро беҙҙең, 18 йәштән 60, 70, 80 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙарҙың, аралашыуға, бергәләп нимәләрҙер эшләргә һыуһаған күңелдәргә ҡанат ҡуйҙы, дәрт бирҙе, илһамландырҙы, көнитмешебеҙҙе бермә-бер йәнләндерҙе, үҙ асылыбыҙға ҡайтыу юлдарын асты.**

Районыбыҙҙа ағинәйҙәр тарафынан ойошторолған һәр сара халҡыбыҙға, бигерәк тә балаларға, йәштәргә тәрбиә биреүҙе, үҙебеҙҙең башҡортлоҡ асылына ҡайтыуҙы, асығыраҡ итеп әйткәндә, милли сифаттарҙы, милли үҙлекте, милли йәшәү рәүешен иҫкә төшөрөүҙе, патриотлыҡ тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуя. Билдәле башҡорт яҙыусыһы Шамил Анаҡ:" Үҙ кейемеңде кей, үҙ һауытыңдан эс, үҙ икмәгеңде аша һәм үҙ йырыңды йырла - ул саҡта бер кем менән бутамаҫтар һине!" - тип бик тапҡыр әйткән. Ағинәйҙәребеҙ ҙә, тәү сиратта, милли кейемебеҙҙе тегеп кейеүҙе хәстәрләне. Күлдәк-камзулдар тегеп алғас, башҡорт ҡатын-ҡыҙының милли биҙәүестәре - яға һәм ҡашмауҙар эшләргә тотондоҡ. Бер ыңғайҙан оҫталыҡ дәрестәрендә ул биҙәүестәрҙең , шулай уҡ милли кейемдең үҙебеҙҙең яҡҡа хас булған деталдәрен, биҙәктәрен өйрәндек. Һөҙөмтәлә Учалы телевидениеһы менән берлектә беҙҙең яҡта яға тип аталыусы милли биҙәүесте эшләүселәрҙең конкурсын үткәрҙек. Конкурста 100-гә яҡын кеше ҡатнашты, йомғаҡлау кисәһен ҙур байрам итеп үткәреп, уны быға тиклем бер кем дә үткәрмәгән сағыу байрамға әйләндерҙек. Өфөлә үткән милли кейем байрамында ла Учалы ағинәйҙәре иҫ киткес матур кейемдәрендә башҡалар менән бер сафта ғорур атлап үтте.

Ағинәйҙәр ҡорон ойошторғанда беҙҙең алға шундай бурыс ҡуйылды бит: ағинәйлек - ул беҙҙең йәшәү рәүеше, ул беҙҙең көндәлек башҡарыла торған бурыс, беҙ көн һайын, сәғәт һайын үҙебеҙҙе милләт һағында тороусылар итеп тойорға, ошо йәшәү рәүешен балаларға ла, йәштәргә лә, башҡаларға ла йоҡторорға тейешбеҙ. Ошо бурысты йөрәктәргә яҡын иттек, ағинәйлек сифаттарына эйә булырға, башҡаларҙы ла матур йәшәү рәүешенә ылыҡтырырға тырышыла бына. Киләсәк быуынға Зәйнулла Ишан, Муса Мортазин, Шәкирйән Мөхәмәтйәнов кеүек күренекле шәхестәребеҙҙе тел осонан да төшөрмәй һөйләп торһаҡ, башҡорттоң аҡтамыры мәңге ҡоромаҫ, тиҙәр ағинәйҙәр. Әле ошо арала ғына Миндәк ауылы ағинәйҙәре мәктәп уҡыусыларына легендар комбриг, репрессия ҡорбаны Муса Мортазинға арналған сара үткәрҙе. "Ауылпиада" тигән сараны ла беҙҙең Учалы ағинәйҙәре - Ыҫтамғолдар уйлап сығарҙы. Ҡыш көнө уҙғарылған ауылпиадала олоһо ла, йәше лә, ир-аты ла, ҡатын ҡыҙҙары ла сәмләнеп ярыша. Районыбыҙҙа һуңғы ваҡытта "Мәргән уҡсы" ярыштары йышайып китте. Милли кеймдәребеҙҙе кейеп, милли аш-һыуҙарыбыҙҙы әҙерләп, ҡул эштәре күргәҙмәләребеҙҙе алып килеп, ошо байрамдар майҙандарын да, район кимәлендә үткән башҡа байрамдарҙы ла йәмләйбеҙ.

Бөгөн беҙгә, башҡорт халҡына, ҡағылышлы һәр нәмәне һаҡлау, яҡлау өлкәһендә эшләргә кәрәклекте яҡшы аңлайбыҙ. Бөтә донъяға рекламаланған кока-коланан мең тапҡыр артыҡ буҙа тигән эсемлегебеҙ бар. Йәнгә лә, тәнгә лә шифалы эсемлегебеҙҙе күтәрмәләү маҡсатында "Буҙа" байрамдары үткәреп торабыҙ. Әле күптән түгел генә район кимәлендә "Көҙгө ҡатыҡ - көмөш ҡалаҡ" тигән фестиваль ойоштороп, уны халҡыбыҙҙың борондан килгән төп шөғөлөнә - малсылыҡҡа, һыйыр һөтөнән әҙерләнгән милли ризыҡтарға арнаныҡ. Ағинәйҙәребеҙҙең ҡайһы берҙәре һыйыр һөтөнән генә 40-лап төр ризыҡ яһап булыуын иҫбатлап, күргәҙмә ойошторҙо. Аңыбыҙ төпкөлөндә ойоңҡорап киткән малсылыҡ менән бәйле йолалар иҫкә төшөрөлдө. Ысынлап та, совет осоронда күп йолаларыбыҙҙан баш тарттыҡ, үҙебеҙгә генә хас оҫталыҡ

*СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ*



# МАСТОПАТИЯ НИМӘНӘН ҠУРҠА?
## Бесәй үләненән һәм һары мәтрүшкәнән!

**Табиптарҙан "мастопатия" диагнозын ишеткәс, ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ төшөнкөлөккә бирелә. Һәм юҡҡа түгел. Күпселек был сирҙе нисек дауаларға һәм артабан нисек йәшәргә белмәй. Табиптар бик йыш бер ниндәй ҙә дауа тәҡдим итмәй, бары тик йыл һайын һөт биҙҙәрен тикшереп торорға ҡуша. Ә инде төйөр үҫә башлаһа, моғайын, операция яһатырға тура килер...**

Тәүҙә "Нимә ул мастопатия?" тигән һорауға яуап бирәйек.

Мастопатия - ул ҡатын-ҡыҙ гормоны эстроген йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән төрлө ҙурлыҡтағы һәм формалағы тығыҙ төйөндәр. Улар, ғәҙәттә ике яҡ күкрәктә лә була, йәиһә бер яҡта ғына булып, тупаҫ ауыртыу тыуҙыра. Бик йыш мастопатия ауыртыуһыҙ үтә, бары тик төйөргә баҫҡанда ғына ниндәйҙер ауыртыу тойола.

Мастопатия хәүефле түгел, әммә, ҡайһы бер табиптар белдереүенсә, уның яман шешкә әүерелеүе ихтимал. Шуға күрә уны бик йыш онкология сире хәбәрсеһе йәки яман шеш алды сире тип йөрөтәләр. Һәм, йәнәһе лә, бындай үҙгәрештәргә фиброз-кистоз мастопатия бик яҡын. Әммә Америка табиптарының һуңғы тикшеренеүҙәре был раҫлауҙы инҡар итә һәм мастопатияның яман шешкә әйләнеүе һөт биҙе туҡымаһы яман шеше менән бер күләмдә тора, тип белдерә. Шуға ҡарамаҫтан, мастопатия булғанда даими рәүештә ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһында, шулай уҡ хирургта һәм онкологта ҡаралыу, рентген һәм ультра тауышлы тикшеренеүҙәр үтеү зарур. Бынан тыш, мастопатия булғанда физиотерапевтик процедуралар, эҫе мунса, массаж, кварц лампаһы менән нурланыу һәм ҡояшта ҡыҙыныу ярамай.

Аҙған мастопатияны дауалау өсөн кальций хлорид һәм калий йодиды, гормональ препараттар кәрәк. Әгәр гинеколог төйөндәрҙе ҡурҡыныс түгел, ти икән (улар йә килеп сыға, йә юғала)

В6 витаминын (100 мг - иртәнге аш ваҡытында), цинк (30 мг йоҡо алдынан), энотера майы (һәр ашаған һайын 1 г) һәм Е витаминын (400 МЕ) көнөнә ике тапҡыр эсергә кәрәк. Барлыҡ был сараларҙы төйөндәр тулыһынса юҡҡа сыҡҡанға тиклем ҡулланырға.

Ә бына халыҡ медицинаһы ҡатын-ҡыҙҙың хәл-торошон еңеләйтергә, төйөндәрҙе бөтөрөргә, ҡайһы бер ос-

✓ *Беҙгә бала саҡтан, тормош - ул көрәш, тип һеңдерҙеләр. Ваҡиғаларҙы ашыҡтырырға һәм терһәгең менән юл ярырға өйрәттеләр. Һөҙөмтәлә, шул рәүешле йәшәргә тырышып, хәлдән таябыҙ һәм тормошобоҙҙо үҙебеҙ боҙабыҙ.*





мәктәбен юҡҡа сығара яҙҙыҡ. Мәҫәлән, халҡыбыҙ борон-борондан һарыҡ йөнөнән кейемен дә, ятыр-торорон да әҙерләгән. Беҙҙең ағинәйҙәр ҙә оҫталыҡ дәрестәрендә һарыҡ йөнөнән кейеҙ түшәктәр, келәмдәр генә түгел, ә кейем эшләргә лә өйрәнде. Республикала тәүгеләрҙән булып Учалы ағинәйҙәре милли биҙәк һалып баҫылған камзул кейеп, "Байыҡ" конкурсына сыҡты һәм Гран-приға лайыҡ булды.

Туй йолаларын ныҡлап тергеҙәбеҙ. Эс бошороп, туй ваҡиғалары мәлендә - "выкуп", яңы тыуған сабыйҙарҙы туйлағанда - "зубок"кеүегерәк мәғәнәһеҙ йолалар нығынып китте, мәғәнәле исемдәребеҙ урынына әллә ниндәй ят исемдәр атауҙы модаға индереп ебәрҙеләр. Был өлкәлә лә эшебеҙ йәнләнде. " Туй - ул йола байрамы" исемле түңәрәк өҫтәлдәр үткәреп, һәр ауыл ағинәйҙәре туйҙа башҡарыла торған йолаларҙың мотлаҡ үҙебеҙсә үтәлергә тейешлеген яҡлап сыҡты. Мәҫәлән, Мәҫкәү ауылы ағинәйҙәре ауылдарында үткән һәр никахты мулла менән берлектә йолаға ярашлы үткәрә. "Ситтән килгән ҡоҙалар ифрат ҡәнәғәт булып ҡайта", - ти улар. Әле үткән йәй айҙарында ғына булған бер ваҡиға: йәштәр сабыйына Богдан тигән исемде ҡушырға ниәтләгән, ағинәйҙәр иһә сабыйҙың Ислам булырға тейешлегенә күндергән.

Тағы бер йәнде әрнеткән күренеш шулай уҡ ағинәйҙәр иғтибарынан ситтә ҡалманы. Ер-һыу атамаларын дөрөҫ яҙҙырып, нығытып ҡуйыуҙы ла бурысыбыҙ итеп алғанбыҙ. Бит бөгөн ҡайһы бер атамалар онотолоп, телдән төшөп ҡалып, урынына туҙға яҙмағандары ла тыуып тора. Мәҫәлән, беҙҙә Ҡарағайлы күле - Ворожеич, Бүҙәкә ташы - Музыка ташы булып киткән. Бөтәбеҙ ҙә белгән Шүлгән йәш быуын телендә Капово булып нығынып килә...

Һанай китһәң, ағинәйҙәр башҡарған эштәр бик күп. Туй йолаларында мотлаҡ башҡарыла торған мөнәжәттәр ҙә йышыраҡ ишетелә башланы хәҙер. Районда мөнәжәтселәр конкурсы ла ойоштороҙоҡ. Алла бирһә, 2018 йылда был конкурсты тағы ла үткәрмәксебеҙ. Халҡыбыҙҙың онотолоп барған дауалау алымдарын тергеҙеүгә, үләндәрҙең шифаһы, уларҙы әҙерләү, һаҡлау серҙәренә арналған саралар мәлендә үҙебеҙгә күп һабаҡтар алабыҙ, нескәлектәрен өйрәнәбеҙ, йыябыҙ. Ағинәйҙәрҙең ауылдарҙағы мәсеттәрҙе тәртиптә тотоуы, буйҙаҡ егеттәрҙе өйләндереү, яусылыҡ институтын тергеҙеү буйынса эштәрен дә телгә алмай булмай. Иң мөһиме, аралашабыҙ."Әлдә беҙҙе йортобоҙҙан халыҡ араһына, йәмғиәткә алып сыҡтығыҙ, күңелдәргә ғәм, дәрт, сәм ҡундырҙығыҙ",- тип рәхмәт уҡый хәҙер ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ миңә һәм ошо ойошма эшен республика кимәлендә киң йәйелдереп ебәргән етәксебеҙ Гөлфиә Янбаеваға.

Тәүге осорҙа, кәрәкме ул был ойошма, ҡатын-ҡыҙҙар советы бар бит инде, тигәнерәк һүҙҙәрҙе лә ишетергә тура килде. Ләкин бөгөн Ағинәйҙәр ҡоро үҙенең эштәре менән башҡорт йәмғиәтенә кәрәклеген тулыһынса иҫбатланы. Беҙ бөгөн, замандың төрлө шауҡымдары алҡымдан алғанда, милләтебеҙ, телебеҙ оло һынау алдында ҡуйылғанда, бер датанан икенсе датаға тиклем генә эшләгән, башлыса байрам саралары ойоштороу менән генә шөғөлләнә торған ойошма була алмайбыҙ. Йәмғиәтебеҙҙе күҙ менә ҡаш арабыҙҙа тоторға, ҡайһы тәңгәлдә ярҙамыбыҙ кәрәк, шунда йүгереп барырға, үҙебеҙҙең бер нимәлә лә битараф булмағанды, милләттең рух усағын һаҡлаясаҡбыҙ икәнде белдереп йөрөргә тейешбеҙ, тибеҙ. Муниципаль район хакимиәте, мәҙәниәт бүлеге, урындағы ҡоролтай, йәштәр бүлеге беҙҙең бар сараларҙы хуплай, ойоштороу эштәрендә индәрен ҡуя. Бергәләп тырышҡас, эшебеҙҙең һөҙөмтәһе бар, буласаҡ та.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе,**
**Рәсәйҙең почетлы мәғариф хеҙмәткәре.**

раҡтарҙа бөтөнләй уларҙан арынырға мөмкин булған тәбиғи сараларҙы бик күп белә. Халыҡ дауаларына килгәндә инде, грек сәтләүегенең бүлкәт араларындағы бүлкәнән эшләнгән төнәтмәне тәҡдим итергә була. Уны эшләүе бик еңел. 2025 сәтләүектән бүлкәләрҙе алығыҙ, уларға 100 г 70 процентлы спирт ҡойоп, ныҡлы итеп ябығыҙ һәм ҡараңғы урында 10 көн төнәтегеҙ. Көн һайын ашарҙан ярты сәғәт алда ярты стакан һыуға 15-20 тамсы тамыҙып эсегеҙ. Дауаланыу курсы - 2 ай. Был сараны мастопатия менән бер үк ваҡытта үҫешкән аналыҡ фибромиомаһы, шулай уҡ башҡа шештәр, шул иҫәптән башҡа ағзаларҙың яман шеше ваҡытында ҡулланырға мөмкин.

Ниндәй генә мастопатия булғанда ла ауыртҡан ерҙәргә күгүләндән (бәпкә үләне) сылатҡыстар - бер стакан һыуға 2 ҡалаҡ үлән һалып эшләнгән төнәтмә - ябырға кәрәк. Бынан тыш, дарыу үләндәре йыйылмаһы ла кәңәш ителә. Мәҫәлән: меңъяпраҡ (бер өлөш), артыш емеше (1 өлөш), ҡырҡбыуын (1 өлөш), кукуруз һеркәһе (столбики с рыльцами кукурузы, 2 өлөш). Барыһын бергә ҡатыштырып, ваҡлағыҙ. 1 ҡалаҡ йыйылманы алып, бер стакан ҡайнар һыу ҡойоғоҙ һәм ярты сәғәт төнәтегеҙ. Һарҡытып, ашағандан һуң көнөнә өс тапҡыр 50-70 мл эсегеҙ.

Икенсе йыйылма: ала миләүшә (1 өлөш), валериана үләне (1 өлөш), ҡырҡбыуын (1 өлөш), эт дегәнәге (1 өлөш), кесерткәнде (1 өлөш) бергә ҡатыштырып, унан бер ҡалаҡ үләнде бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп ҡайнатырға. Һуңынан һыуытып, һарҡытып, иртән һәм кисен ашағандан һуң стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә.

Тағы бер бик файҙалы йыйылма: валериана тамырын ваҡлап (1 өлөш), юл япрағы (2 өлөш), һары мәтрүшкә (2 өлөш), эт дегәнәген (4 өлөш) бергә ҡатыштырып, 1 ҡалаҡ ҡатышмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәтегеҙ һәм һарҡытып, көнөнә 3-4 тапҡыр ашағандан һуң берәр ҡалаҡ эсегеҙ.

Бысағүлән (сабельник) үләнен йәки тамырын, ҡайын япрағы, сөйәл үләне, тырнаҡ гөлө, меңъяпраҡ, боланут, һары мәтрүшкә, күгүләнде, бәпембә тамырын, юл япрағы, үгәй инә үләне, ҡарағат япрағы, мәтрүшкә һәм ҡыҙыл миләш емештәрен бергә ҡушып, кофе тарттырғыстан үткәрегеҙ. Әгәр кипмәгән булһалар, ит турағыс аша тарттырығыҙ. 1 ҡалаҡ ҡатнашманы термоста 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдырығыҙ. Иртән һарҡытып, төнәтмәне көн дауамында эсегеҙ. Дауаланыу курсы - 2-3 ай.

Һуңынан 10-14 көнгә тәнәфес яһағыҙ, артабан дауаланыуҙы икенсе йыйылма менән дауам итегеҙ. Унын өсөн ҡурай еләге япрағы, бәпембә тамыры, ҡыҙыл миләш емеше, һары мәтрүшкә, ҡаҙ үләне, ҡайын япрағы, әрекмән тамыры, юл япрағы, аҡ сәскә, тырнаҡ гөлө ботаҡтары, меңъяпраҡ, гөлйемеш емеше кәрәк. Әҙерләү һәм ҡулланыу өсөн өҫтәге ысулды ҡарағыҙ.

Сираттағы тупланма өсөн тигеҙ күләмдә бәпембә тамыры, мәтрүшкә, әрекмән тамыры, һыуһар емеше, ҡандала үләне, укроп емеше, ҡыҙыл миләш емеше, боровая матка кәрәк. Ошо йыйылмаларҙы сиратлап ҡулланып дауаланыу ваҡыты йыл самаһы дауам итә, әммә ҡайһы берҙә 2-3 айҙан да төйөрҙәрҙең бөтөүе билдәле. Ҡайһы берҙә дауаланыу процесы 15 айғаса һуҙыла. Барыһы ла ауырыу стадияһынан һәм уның күпме дауам итеүенән тора. Тиҙ һөҙөмтә артынан ҡыумағыҙ. Сир йылдар дауамында туплана, шуға уны һыпырып ташлап ҡына бөтөрөп булмай. Ләкин тырышлыҡ һәм түҙемлек хатта иң ныҡышмал сирҙе лә еңергә ярҙам итә.

Шуны иҫегеҙҙән сығармағыҙ: дауаланыу алдынан табип менән кәңәшләшегеҙ!

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Нисек итеп күңел тыныслығы табырға?

Ниндәйҙер кимәлдә был эске көйләнеште һәм донъяға ҡараште сағылдыра. Бының өсөн аңды тынысландырыу маҡсатында көн һайын нимәлер эшләүҙе ғәҙәткә индерергә кәрәк. Үҙҙәре менән килешеп йәшәүселәр һәр көн нимә менәндер мәшғүл һәм был уларға эске донъяларын тынысландырырға ярҙам итә. Ул доға, медитация, иртәнге прогулка булыуы мөмкин. Барыһы ла тыныслыҡ һәм яңғыҙлыҡ эҙләй. Бары тик үҙ-үҙеңә күмелеп кенә ысын мәғәнәһендә тирә-яҡ мөхитте күрергә мөмкин. Мин дүрт йыл ял көндәрендә семинарҙар үткәрҙем, кешеләрҙе тән һәм аң релаксацияһына өйрәттем, ошо техниканы үҙләштереүселәрҙәге үҙгәрештәргә аптырай инем. Күптәргә бер нәмә лә эшләргә кәрәкмәне, бары тик улар артыҡ проблемаларҙы баштарынан алып ташланы һәм шуға иғтибарын йүнәлтеүҙән туҡтаны.

Хәҙерге көнбайыш цивилизация шуға ҡоролған - барыбыҙға ла нимәлер эшләргә кәрәк. Бының менән бәхәсләшеп булмай. Шуға ҡарамаҫтан, нимәлер эшләр алдынан донъялағы бөтөн нәмә менән көрәшеүҙе туҡтатырға кәрәк. Беҙгә бала саҡтан, тормош - ул көрәш, тип һеңдерҙеләр. Ваҡиғаларҙы ашыҡтырырға һәм терһәгең менән юл ярырға өйрәттеләр. Һөҙөмтәлә, шул рәүешле йәшәргә тырышып, хәлдән таябыҙ һәм тормошобоҙҙо үҙебеҙ боҙабыҙ. Тормош тик көрәштән генә тора икәненә ышанһаң, ул, ысынлап та, көрәштән генә тора. Ләкин уға бит үҙ яйы менән барырға рөхсәт итергә лә мөмкин.

## Бөгөн һәм хәҙер йәшәгеҙ

Күптәребеҙ ниндәйҙер ваҡытта бөгөнгө менән йәшәүҙең ауырлығына инана, һөҙөмтәлә үткәндәргә үкенеп, киләсәктән ҡурҡып, күп ваҡытын сарыф итә. Әлеге мәлдә йәшәү - канат буйлап йөрөү ул. Тәүҙә ҡолап төшөүҙән ҡурҡыта, әммә ваҡыт үтеү менән тәжрибә туплана килә һәм атлаған һайын еңелерәк була бара. Түбәндә аңығыҙҙы хәҙерге ваҡытҡа көйләргә ярҙам итәсәк ике ысул.

## Һәр эшкә күпме кәрәк, шунса ваҡыт сарыф итергә

Һәр ваҡыт ашығып йәшәү етте. Әгәр инаныу системағыҙҙа, "һәр ваҡыт бер нәмәгә лә ваҡытым етмәй", тигән пункт бар икән, тормошоғоҙҙа ла бер нәмәгә лә ваҡытығыҙ етмәйәсәк. Һөҙөмтәлә ғүмер буйы автобус артынан йүгерәсәкһегеҙ, лифтҡа һыймай ҡаласаҡһығыҙ, төшкө ашты шылтыратыуҙарға яуап биргән арала ғына ашаясаҡһығыҙ.

## Тормошто "эттәр кеүек күрергә" өйрәнегеҙ

Эт менән урамда йөрөгәндә ҡыҙыҡлы нәмәгә өйрәндем. Улар бөтөн нәмәне бер юлы күрә. Бер генә ҡыуаҡ та, газондағы бер генә сәскә лә, бер генә фонарь бағанаһы ла уларҙың иғтибарынан ситкә китмәй. Бер һуҡмаҡ буйынса күпме генә үтмә, һәр көн эткә яңы ҡыуаныс килтерәсәк. Эттәр хәҙерге ваҡытта йәшәй белә.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



### 15 ЯНВАРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Внимание! С 05.00 до 11.45 вещание осуществляется по спутниковым и кабельным сетям.**
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.35 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 01.35 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 02.40, 03.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Двойная жизнь". 1-я и 2-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.35 "Что и требовалось доказать". 1-я и 2-я серии. Детективный сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Семейный детектив". Сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский. Реанимация". 1-3-я серии. Драматический сериал (12+).
00.30 "Провокатор-2". Мелодраматический сериал (12+).
02.30 "Поцелуйте невесту!" Сериал (12+).

### БСТ

**Профилактика на канале.**
**14.00 Итоги недели.**
**14.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Интервью" (12+).**
**17.00 "Наши годы" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Бай" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-проба" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Холодное сердце". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

### 16 ЯНВАРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 01.40 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 02.45, 03.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Двойная жизнь". 3-я и 4-я серии (16+).
23.35 Что и требовалось доказать". 3-я и 4-я серии (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Семейный детектив". Сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский. Реанимация". 4-6-я серии (12+).
00.30 Провокатор-2". Мелодраматический сериал (12+).
02.30 "Поцелуйте невесту!" Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Новогодние приключения". Сериал.**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Башҡорт йыры" представляет…" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Инвестиции в любовь". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

### 17 ЯНВАРЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 01.40 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 02.40, 03.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Двойная жизнь". 5-я и 6-я серии (16+).
23.35 "Что и требовалось доказать". 5-я и 6-я серии (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Семейный детектив". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский. Реанимация". 7-9-я серии (12+).
00.30 "Провокатор-2". Мелодраматический сериал (12+).
02.30 "Поцелуйте невесту!" Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Новогодние приключения". Сериал.**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана".**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра".**
**17.00 "Михаил Танич. Последнее море" (12+).**
**17.45 "Орнамент" (6+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Витязь" (Московская область).**
**22.00 "Вечерний телецентр".**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Потерянный отпуск". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бэхэтнамэ" (12+).**

### 18 ЯНВАРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 01.40 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 02.45, 03.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Двойная жизнь". 7-я и 8-я серии (16+).
23.35 "Что и требовалось доказать". 7-я и 8-я серии (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Семейный детектив". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский. Реанимация". 10-12-я серии (12+).
00.30 "Провокатор-2". Мелодраматический сериал (12+).
02.30 "Поцелуйте невесту!" Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Назад к счастью, или Кто найдет синюю птицу". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Бай" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ" (6+).**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "М.Танич. Последнее море" (12+).**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башҡорттар" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Мэрайа Мунди и шкатулка Мидаса". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

### 19 ЯНВАРЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.45 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.55 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос" 5 лет". Большой праздничный концерт в Кремле.
23.40 "Ингеборга Дапкунайте. Все, что пишут обо мне, - неправда" (12+).
00.45 "Лицо со шрамом". Боевик (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Семейный детектив". Детективный сериал (12+).
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
21.00 "Склифосовский. Реанимация". 13-16-я, заключительная, серии (12+).
00.30 "Провокатор-2". Мелодраматический сериал (12+).
02.30 "Качели". Мелодрама (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Назад к счастью, или Кто найдет синюю птицу". Сериал (16+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 М.Карим "Земляки" (12+).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце".**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - ЦСКА (Москва).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ" представляет…" (12+).**
**24.00 "Влюбиться в невесту брата". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 Р.Кинзябаев. "Одолжи мне жеребца" (12+).**

### 20 ЯНВАРЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10, 04.10 "Zолушка". Худ. фильм (16+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.50 "Смешарики. Спорт".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.20 "Лучше всех!" Рецепты воспитания"
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Людмила Касаткина. Укротительница".
15.00"Укротительница тигров". Комедия.
17.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
18.00 Чемпионат Европы по фигурному катанию. Танцы. Произвольная программа. Прямой эфир.
19.00, 21.20 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
22.00 "Исход: цари и боги". Боевик (12+).
00.45 Чемпионат Европы по фигурному катанию. Женщины. Произвольная программа.
01.50 "Девичник в Вегасе". Худ. фильм (18+).

### РОССИЯ 1

04.34 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.35 "Маша и медведь". Мультсериал
07.10 "Живые истории".
08.00, 11.20 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.40 "Аншлаг и Компания" (16+).
14.05 "Дочь за отца". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Расплата". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.25 "Любовь из пробирки". Мелодрама (12+).
02.45 "Личное дело". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Красная шапка против зла" (12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00, 22.00 "Свой вес" (16+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15, 12.00 "Тәмле" (12+).**
**11.30 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Орнамент".**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ" представляет…" (12+).**
**17.00 Гала-концерт Открытого конкурса кураистов "Волшебная мелодия курая" (12+).**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**21.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.30, 02.00 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры представляет…" (12+).**
**24.00 "Невеста и предрассудки". Худ. фильм (16+).**
**02.45 Ф.Эрдуран. "Подарок" (12+).**

### 21 ЯНВАРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Бедная Саша". Худ. фильм.
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.25 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.20 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.35 "В гости по утрам" с Марией Шукшиной.
11.30 "Дорогая переДача".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Теория заговора" (16+).
13.20 Чемпионат Европы по фигурному катанию. Женщины. Произвольная программа.
14.45 "Анна и король". Мелодрама.
17.30 "Русский ниндзя".
19.30 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?" Дети XXI века.
23.40 Чемпионат Европы по фигурному катанию. Показательные выступления.
01.10 "Восстание планеты обезьян". Фантастика (16+).
03.05 "Мужское/Женское" (16+).
03.55 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

04.50 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35, 03.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00, 14.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.20 "Нелегкое счастье". Мелодрама (12+).
16.15 "Одиночество". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде" (12+).
01.25 "Право на правду". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 Сборник советских мультфильмов.**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Дети-герои".**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.00 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирма".**
**12.30 "Итоги недели" (на башк.яз.).**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.15 "Башҡорттар" (6+).**
**15.45 "Дорога к храму".**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Слован" (Братислава).**
**19.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.15 "Белоснежка: месть гномов" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Гражданин Кейн". Худ. фильм (12+).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# "КИСКЕ ӨФӨ" АВТОРҘАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**1-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Артыш. Йосопов. Йөргәнсә. Сәсәнә. Тамға. Өҙәк. Тәүрат. Арҡа. Мнишек. Алҡа. Ринг. Оҫта. Әмиров. Отвар. Динар. Ахыр. Әмер. Серов. Йүнә. Кенә.
**Вертикаль буйынса:** Таймасов. Йомадилов. Айседора. Йәйгә. Хикәйә. Өрөк. Руслан. Адрес. Акр. Ерек. Өлкәр. Негр. Шторм. Оран. Солтангәрәев. Алиһә. Өйәр. Өмөтбаев.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рабиғел ахыр - Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (28) дүшәмбе | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:48 | 17:18 | 18:48 |
| 16 (29) шишәмбе | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:50 | 17:20 | 18:50 |
| 17 (30) шаршамбы | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:52 | 17:22 | 18:52 |
| 18 (1) кесе йома | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:53 | 17:23 | 18:53 |
| 19 (2) йома | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:55 | 17:25 | 18:55 |
| 20 (3) шәмбе | 7:56 | 9:26 | 13:30 | 15:57 | 17:27 | 18:57 |
| 21 (4) йәкшәмбе | 7:55 | 9:25 | 13:30 | 15:59 | 17:29 | 18:59 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# НИКАХ КИСЕНДӘ

Никах кисәһе - йәш егеттең тормошонда иң мөһим кисә. Ғаиләһенең нигеҙен, башланғысын нисек ҡорһа, шул рәүешле дауам итер. Мосолман егет никахын һәм туйын ғөрөф-ғәҙәттәргә тура килтереп үткәрер һәм никах кисендә ике рәкәғәт намаҙ уҡыр. Аллаһтан киләсе менән бергә бәхетле булыуҙарын һорар. "Бисмилләһир-рахмәнир-рахим" тип, ошо доғаны уҡыр: "Раббәнә һәбләнә мин әзүәжинә үә ҙурриййәтинә ҡуррәтә әғйүниң үәжгәлнә лил-муттаҡинә имәмә" ("Әл-Фуркан" (Айырғыс) сүрәһе, 74-се аят).

Мәғәнәһе: Әй, Раббыбыҙ! Беҙгә ҡатындарыбыҙҙан һәм нәҫелдәребеҙҙән күҙҙәребеҙҙең нуры, һөйөнөсө булырлыҡ яҡшы кешеләр бүләк ит һәм беҙҙе тәҡүә әйиәләренә хужа ҡыл.

Был аяттан һуң тағы ошоно уҡыр: "Аллаһүм мәж-нибнишшәйтанә үәж-нибиш-шәйтанә миммә разәҡтәнә".

Мәғәнәһе: Аллаһтың исеме менән, Аллаһым! Шайтанды беҙҙән һәм беҙгә бүләк итәсәк баланан йыраҡ ҡыл (Бохари, никах, 66).

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 ғинуар "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия 12+
**14 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+
**16 ғинуар "Кара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.) 16+
**17 ғинуар "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**18 ғинуар "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл 12+
**19 ғинуар Илшат Йомағоловтың** хәтер кисәһе

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**13 ғинуар "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00 0+
**19 ғинуар "Карт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа"** (Ф. Бүләков), фольклор комедия 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**13, 14 ғинуар "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова), Яңы йыл тамашаһы. Башлана 16.00 0+
**13 ғинуар "Слоненок"** (Р. Киплинг) 0+
**14 ғинуар "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова) 0+. Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**20 ғинуар** ҡурайсы, республика конкурстары лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Илшат Ишморатов "20 йыл бергә!"** тип аталған концертына саҡыра. Башлана 18.00

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ЭҘЛӘЙҺЕГЕҘМЕ...

**"РИА Яңылыҡтар" агентлығы Ираҡтың Мосул лагерында Чечня властары вәкилдәре тарафынан табылған һәм Бағдадтағы ҡатын-ҡыҙҙар төрмәһенә ябылған рәсәйҙәрҙең исемлеген баҫып сығарҙы.**

Араларында Башҡортостандан ике ҡатын һәм уларҙың балалары бар. Улар - 1973 йылғы Арыҫланова Айгөл Сәфәр ҡыҙы (Күмертау ҡалаһы) һәм уның ике балаһы, шулай уҡ Баймаҡ районынан өс балалы Бикбирҙина Нурзилә Нурфәйез ҡыҙы (1992 йылғы).

Исемлекте агентлыҡҡа Чечня башлығы ҡарамағындағы Граждандлыҡ йәмғиәтен үҫтереү һәм кеше хоҡуҡтары буйынса совет ағзаһы Хеда Саратова тапшырған. Ул ирҙәре илебеҙҙә тыйылған ИГ ойошмаһының контролдә тотолған биләмәһенә алып сыҡҡан Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙарын һәм балаларын эҙләү, уларҙы кире ҡайтарыу буйынса эшсе төркөмгә ингән. Төркөмдөң етәксеһе - Чечня башлығының Яҡын Көнсығыш һәм Төньяҡ Африка илдәрендәге вәкиле Зияд Сабсаби.

Хеда Саратова әйтеүенсә, исемлекте Ираҡ властары вәкилдәре төҙөгән, Рәсәй яғы вәкилдәренең мәғлүмәттәргә аныҡлыҡ индереүе көтөлә. Уның һүҙҙәренсә, исемлектә ата-әсәһеҙ ҡалған һәм таныштары тәрбиәгә алған балалар бар. Алты бала әшсе төркөм менән бәйләнешкә сыҡҡан да инде. Ул шулай уҡ ҡайһы бер ата-әсәләр өсөн ҡыҙҙарының Ираҡ лагерына эләгеүе көтөлмәгән яңылыҡ булыуы хаҡында ла һөйләне. "Улар тәүҙә ышанманы, күптәр һаманғаса туғандары Төркиәлә имен-һау йәшәп ята тип иҫәпләгән", - тип һөйләй Хеда Саратова.

Әле Чечня властары булышлығында Ираҡтан һәм Сүриәнән 100-гә яҡын ҡатын-ҡыҙ һәм бала тыуған иленә ҡайтты. Улар - Чечняла, Дағстанда, Ингушетияла, Башҡортостанда, Тверь, Нижневартовск ҡалаларында йәшәүселәр, шулай уҡ Ҡаҙағстан һәм Үзбәкстан граждандары.

АФАРИН!

# ҠЫШҠЫ ИРӘМӘЛДӘ...

## ҡурай моңо яңғыратты



**Риүәйәт буйынса, яуыз хан бойорого менән ҡарурманға ташланған йәш егет ҡурай моңон ишетә һәм тәүгеләрҙән булып уны ҡырҡып алып, уйнап ҡарай. Күңелендәге һағыныу хисе моң булып түгелә. Шунан алып ҡурай ҡурайсының йөрәгендә яралған моңдо башҡаларға еткерер ҡоралға әүерелә. Был ваҡиға булып үткән мәлдән әллә күпме һыу аҡҡан, әллә күпме ел иҫкән, тик бөгөн дә ҡурай үҫкән урында булыу, ҡурай ҡырҡып уйнау һәр ир-егет өсөн абруй иҫәпләнә. Күптән түгел тап ошо маҡсат менән Ирәмәлгә Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Яңылыҡтар" хеҙмәте журналисы Илдар БАЙБУЛАТОВ та күтәрелә. Был турала уның үҙенән һөйләтәйек әле.**

- Үҙем ҡурайҙа уйнай белмәһәм дә, был уйын ҡоралы минең өсөн бик яҡын. Һәр башҡорт өсөн изгелер ул, тип уйлайым. Декабрь башында Өфөлә "Урал" галереяһында сәйәхәтсе, ҡурайсы Самат Асҡаровтың фотокүргәҙмәһе асылғайны. Шунда Самат ағайҙың быйыл Ирәмәлдә ҡурай үләненең уңыуы тураһында ишетеп ҡалдым. Һөйләшеп килештек тә, бергәләп Ирәмәлгә менергә булдыҡ. Самат ағай бик ҡыҙыҡ кеше, быйыл ғына ул Ирәмәлгә 22 тапҡыр менгән, бөтәһе 190 тапҡыр менеп төштөм, ти. Сығышы менән Белорет районынын, тауҙар, урмандар менән бер телдә "аралашҡан" кеше ул. Әлеге көндә Силәбе өлкәһенең Трехгорный ҡалаһында йәшәй. Сит ҡитғаларҙағы тауҙарға ла менгән ул, уларҙың матурлығын мәңгеләштереү маҡсатынан үҙе менән һәр ваҡыт фотоаппарат йөрөтә.

Ҡышҡы юлды иҫәпкә алып, саңғылар ҙа алдыҡ. Кемдер йәйәү ҙә менде. Килеүебеҙҙе хәбәр иткәс, Самат ағай үҙе генә алдан барып, ҡарап ҡайтҡан булған. Беҙ тауҙың үренә тиклем менмәнек, ғөмүмән, ғәҙәти турист һуҡмағы буйлап барманыҡ. Ҡурайҙар тауҙың башҡа ерендә үҫә икән, унда кеше бөтөнләй йөрөмәй тиерлек. Юлда китеп бараһың, ике яҡлап ҡурай үләндәре оҙатып бара. Алда тағы бер нисә үҫенте осрай. Ошоға тиклем үҫеп ултырған ҡурайҙы күргәнем булһа ла, ике метр бейеклегендәге ҡурайҙарҙы беренсегә күрҙем. Йылдың яуынлы булыуы ҡурай өсөн яҡшы мөхит тыуҙырғандыр, тигән фаразда Самат ағай.

Беҙҙең менән бергә ҡурайсы Фәдис Асҡаров та барғайны. Ул үҫемлекте киҫеп алып, ҡурай эшләп, шунда уҡ уйнап та ишеттерҙе. Фәдистең, ҡурайҙы ҡырҡып алғас та, иң тәүҙә уның сатыр сәскәләрендәге орлоҡтарын ергә һибеүе ҙур ихтирам уятты. Орлоҡтар ошо үҙерлегендә шытым бирергә тейеш, тигәнгә ишара булды был. Ғөмүмән, 17 йыл журналист булып эшләү дәүерендә ошо сәфәрҙән алған кеүек ыңғай хистәр, ғорурлыҡ тойғолары кисереүем һирәк булғандыр. Башҡорттоң ихлас күңеле өсөн генә яратылған, боронғолоғобоҙҙо билдәләүсе ҡурай башҡа хистәр уятыуы мөмкин дә түгел.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**2018 йылда ҡурай төбәк бренды булараҡ теркәлеүе ихтимал. Был турала Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова белдерҙе. Валентина Матвиенко киләһе йылда һәр сенаторға урындағы брендтарҙы теркәү мәсьәләләрен күтәреүҙәрен һораны. Лилиә Салауат ҡыҙы башҡорт халыҡ музыка ҡоралы атамаһын теркәтергә йыйына. Бөгөнгө көндә РФ Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы ҡарамағындағы халыҡ художество кәсептәре реестрына берҙән-бер төбәк бренды - Тула гармуны ғына индерелгән. Рәсәйҙә башҡа бындай миҫалдар юҡ. Лилиә Ғүмәрова белдереүенсә, Роспатентҡа мөрәжәғәт итеп, ҡурайҙы законлы рәүештә географик атамаға бәйләү өсөн Рәсәй Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығының ҡарары кәрәк. "Әлегә тиклем был ведомство халыҡ кәсептәре менән генә шөғөлләнгән, шуға ла был мәсьәләне ҡарауҙа ҡайһы бер ҡаршылыҡтар бар. Әммә уларҙан ыңғай һөҙөмтә алырбыҙ, тип ышанам", - ти сенатор.**

БАШ ЙӨРТТА

# БОРОНҒО МОДАНЫ...

## күргәҙмәгә барып күр

**"Боронғо Өфө" республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығында "Өфө II ҡаласағы. Кешеләр. Мода. Йөҙләр" күргәҙмәһе асылды.**



Экспозицияла Өфө II ҡаласағында йәшәгән - Мәҙүнин һәм Турбаҫлы археология мәҙәниәттәренә ҡараған иртә урта быуат халҡы костюмдарының тарихи реконструкциялары тәҡдим ителгән. Бынан тыш, музейға килгәндәр 2006-2017 йылдарҙа ҡаласыҡта ҡаҙыу эштәре барышында табылған ҡыҙыҡлы нәмәләр менән таныша ала. Күргәҙмәне асыуҙа Башҡортостан Республикаһының Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Алексей Пешков, тарихи костюм, ҡорал, эш ҡоралы һәм биҙәүестәр реконструкторҙары Ғәлинур Зарипов, Антон Сухарев, Артем Белявский ҡатнашты. Костюмдарҙы реконструкциялау эше ныҡлы тарихи базаға нигеҙләнгән: Өфө II ҡаласағындағы артефакттарҙан тыш, Әгәсә, Юғамаш, Иҫке Ҡабан, Бөрө, Яңы Турбаҫлы, Дежнев, Өфө биләмәһе ҡәберлектәрендә табылған материалдар ҡулланылған. Музей-ҡурсаулыҡ директоры Гәүһәр Батталова билдәләүенсә, кейем эшләү, ювелир эше, тимерсе һәм һөйәк ҡырҡыу кәсептәре өлкәһендә киң даирә белгестәрен йәлеп итеү менән иртә урта быуат костюмдарын тергеҙеү тәжрибәһе Башҡортостан музейҙары араһында тәүгеләрҙән булып тора. Урман техникумы урамы, 49 адресы буйынса урынлашҡан күргәҙмәне 2018 йылдың 15 мартына тиклем ҡарарға мөмкин буласаҡ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИСЕМЕҢ ШӘП БУЛҺЫН...

Исемең шәп булһын, ырыуыңа тап булһын, ырыуыңа тап килмәһә, оранына тап булһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡартлыҡ - донъялағы иң көтөлмәгән нәмә. Унан әле генә көлгән йәш егетте лә ҡартлыҡ урап үтмәй, егет өсөн был ысынлап та көтөлмәгән булып сыға.

**(Рамон Гомес Де Ла Серна)**

Байҙарҙың юҡ-барға аҡса сарыф итеүен күреү нисек йәл! Уларға ярҙам итеп тә булмай бит - шуныһы ҡыҙғаныс.

**(Пьер Данинос).**

Бәхәс формулаһы шулай: "Һарыҡ дөйөм аңлашылмаусылыҡ тураһында һөйләй. Ҡуян дөйөм икеләнеүҙе еткерә. Һуңынан арыҫлан аяғүрә баҫа һәм дөйөм фекерҙе белдерә.

**(Феликс Кривин).**

Тарихтан ала алған берҙән-бер һабаҡ шунда: кешеләр тарихтан бер ниндәй һабаҡ та алмай.

**(Бернард Шоу).**

Алда барғандар тураһында насар фекер йөрөтмә, иҫеңдә тот: һинең артыңдан килеүселәр ҙә бар бит.

**(Борис Ручьев).**

Мәңгелек хәҡиҡәт, мәңгелек булыуға ҡарамаҫтан, даими хәтергә төшөрөп һәм раҫлап тороуға мохтаж.

**(Махатма Ганди).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер крәҫтиәндең аты ташландыҡ ҡоҙоҡҡа төшөп киткән. Атҡа зыян килмәгән, ләкин уны шул тиклем тәрән ҡоҙоҡтан анһат ҡына тартып сығарыу мөмкин булмаған. Хужа атты ҡоҙоҡтан сығарыуға тотоноласаҡ сығымдың яңы ат һатып алыуға ҡарағанда ла күберәк буласағын иҫәпләгән дә, был эш менән мәшәҡәтләнмәҫкә булған. Ул бер нисә кешене яллаған да, атты шул ҡоҙоҡта ерләргә ҡушҡан. Эшселәр көрәк алып, ҡоҙоҡҡа тупраҡ ташлай башлаған. Ат улар ташлаған тупраҡты өҫтөнән һелкеп ташлай ҙа, тояҡтары менән тапай икән. Эшселәр тупраҡ ташлауҙы дауам итә, ә ат тупраҡты аяҡ аҫтына һелкеп ташлап тапай бирә, ти. Шулай итеп соҡор күмелә яҙып бөткән һәм ат ҡоҙоҡ эсенән килеп тә сыҡҡан...**

**Беҙҙең дә тормошта төрлө ауырлыҡ-кәртәләр соҡорона батҡан саҡтар була, шундай мәлдә кемдәрҙеңдер яуызлыҡ, битарафлыҡ, хөсөтлөктө өҫтөбөҙгә көрәкләп өйөүе лә ихтимал. Шундай саҡта әлеге ат тураһында иҫкә төшөрөгөҙ: өҫтөгөҙгә ишерелгән бар сүп-бысраҡты һелкеп ташлағыҙ ҙа юғарыға ынтылығыҙ. Һеҙгә күпме генә бысраҡ ташламаһындар, уларҙан юғарыраҡ күтәрелегеҙ. Әлеге ат һымаҡ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 12 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 53/01